ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3-9 июнь (һөтай) 2023

№21 (1063)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреккле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Туристар артынан...** сүптәр ҡала өйөлөп



3

**Китап тантана итте**



6

**Уҡытыусы, тәрбиәсе-остаздың...**



статусын аңлау-таныу йылы булһын!

8-9

**Башҡорттарҙа йондоҙҙар атамаһы**



12

*Ташламалы хаҡҡа яҙыл! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 5 июндән 15-нә тиклем ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә ташламалы хаҡ менән 738 һум 36 тингә яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

# ХЕҘМӘТ ДӘРЕСЕ ҠАЙҘА БУЛҒАН?

**Күберәк художестволы керамика, скульптура менән шөғөлләнәм һәм был эшкә балаларҙы ла өйрәтәм, шәхси музейыбыҙ, цехыбыҙ бар. Ҡул эштәре араһында Шайморатов генерал, Ғәлимйән Ибраһимов, Рәшит Назаров һәм башҡа башҡорт әҙиптәренең һындары, Хөсәйенбәк кәшәнәһенең күсермәһе бар. Әле бына военкомат һәм район хакимиәте менән бәйләнешкә инеп, Украиналағы махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан, Рәсәй Геройы исеменә лайыҡ булған алты яҡташыбыҙҙың иҫтәлекле һындарын яһау буйынса һөйләшеүҙәр алып барам.**

2022 йылдың декабрендә ВДНХ-ла үткән күргәҙмәлә "Йыл һөнәрсеһе" булдым. Былаҙы эшләр өсөн бөгөн кадрҙар әҙерләү бик мөһим. Ә ҡыҙыҡһыныусы балалар бар, мин ойоштороған түңәрәккә лә 10-15-ләп бала йөрөнө. Әммә уҡыусылар дәрестәрҙән бик һуң бушай һәм арып ҡайта, барыһының да уйында бер нисә кәрәкле предметтан БДИ тапшырыу ғына. Өлкәндәрҙе бала рухи тәрбиә алып, кешелекле булып үҫәме-юҡмы, борсомай ҙа кеүек. Балалар нимә матур, нимә юҡ икәнен айырмай, эш һөймәй, бөтә мәғлүмәт ҡулдарындағы телефонда. Йәмғәт урындарында ла йәш быуында илһөйәрлек, халҡың һәм илең өсөн ғорурлыҡ, яҡшылыҡҡа ынтылыш кеүек тәрбиәүи әһәмиәте булған һәм реализмға ҡоролған һынлы сәнғәт өлгөләре һирәк күренеш, ҡыҙғаныска күрә. Беҙҙең геройҙарҙы һынландырған скульптуралар кәрәк, ә абстракцияны балаларыбыҙ аңламай ул. Хәҙер бит хеҙмәт дәрестәрен дә "Технология" тип атайҙар, ә унда балалар ҡулдарына тотоп, ниҙер әтмәләү урынына теория уҡып ултыра. Беҙ үҫкән осорҙа хеҙмәт дәрестәрендә көндәлек тормошта кәрәкле әйберҙәрҙең барыһын да үҙебеҙ эшләргә өйрәнә инек бит. Кәрәк эшләһәк, уны колхозға, ауыл советтарына таратып бирәләр һәм ҡулланалар, атай-әсәйҙәребеҙ эшләгәндә кейер өсөн тәғәйенләп бейәләй тегә инек. Кәрәкле әйбер эшләүебеҙгә ҡыуана инек. Өйҙә атай-әсәйҙәр ҙә бәләкәйҙән эш ҡушып үҫтерҙе. Ә хәҙерге йәштәрҙе ғаиләлә лә, мәктәптә лә бер кем бер нәмә эшләргә өйрәтмәй, хеҙмәт дәрестәре лә юҡ хатта. Балаларыбыҙ ҡулланыусы булып үҫә, эшләмәйҙәр, әммә ихтыяждары юғары: яҡшы телефон, машина, тир түкмәй генә ҙур аҡса ҡулға төшөрөү. Бына ниндәй хәлгә барып еттек.

Ауылдарҙа тракторға ултырып ер һөрөргә лә кеше таба алмайҙар бит хәҙер. Тағы ла 5-6 йылдан икмәк үҫтерергә лә кеше булмаҫ, тимә. Ауылда йәшәп тә мал тота белмәгән, картуф сәсмәгән, хатта баҡсала ҡыяр ҙа үҫтереп ашамағандар бар. Яуаптары, һатып алабыҙ, имеш. Хеҙмәт тәрбиәһен киренән аяҡҡа баҫтырырға кәрәк беҙгә. Ә нисек? Мәктәптә бит уҡыусынан хатта таҡта һөрттөрөргә ярамай. Уҡыусы иҙән йыумай, дежур булмай, уны кемдер башҡа берәү хеҙмәтләндерергә тейеш. Ә беҙ уҡығанда мәктәп өсөн ағас ҡырҡып, утын әҙерләнек. Эшләп үҫтек, бер еребеҙ ҙә кителмәне.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*



**Ваҡытлы матбуғаттың төрлөһө бар. Рәсми тел менән яҙылған, ҡоро һандар һәм факттарҙан торғандары, артыҡ сөсө телле, маҡтау һәм күтәрмәләүгә ҙур урын биргәндәре, реклама араһынан мәҡәләләре күренмәгәндәре һәм башҡалар. Ығы-зығылы тормоштоң бөтә яғын да самалы ғына итеп үҙ уҡыусыһына бирә барған, бөгөнгө замандың ғына түгел, ә тарихтың да һәр мөһим һәм әһәмиәтле күренештәрен күҙ уңынан ысҡындырмаған, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәрен күтәрмәләгән, балалар һәм йәштәр тауышын да ишеттерә барған баҫмабыҙ - "Киске Өфө"бөҙ - булыуы менән бәхетлебеҙ.**

# ГӘЗИТЕБЕҘ МЕНӘН...

## бәхетлебеҙ

Гәзиттең аҙнаһына бер күп битле булып сығыуын да тик ыңғай баһалайым. Ашыҡ-бошоҡ итеп әллә нисә номер сығарғанға ҡарағанда, ала-һала оҙаҡ итеп 16 битле күләмле генә гәзитте ҡулға тотоп уҡыһаң танһыҡты ҡандырып ләззәт алаһың, исмаһам.

Хикәйәләрҙе көтөп алып уҡыйым. Гәзиттәге сканвордты сисергә яратам. Баҫманың аҙаҡҡы битендәге аҡыллы кешеләрҙең әйткәндәренә мотлаҡ күҙ һалам. Эшҡыуарҙар, ғалимдар һәм башҡа өлкәлә эшләгән йәш кешеләр менән әңгәмәләр бик үҙенсәлекле килеп сыға "Киске Өфө"ләрҙең. Халҡыбыҙҙың милли кейем, биҙәүес һәм башҡа әйберҙәре менән таныштырып барыуҙарын бик хуплайым. Һуңғы ваҡытта интернет селтәрендә үҙебеҙҙең йырсыларҙы, ғөмүмән, сәхнә кешеләренә һүҙ тейҙереүҙәрен уҡып, йөрәк әрней. Йәнәһе лә, күрше республика вәкилдәренә етергә бик алыҫ әле, тип тә ебәрәләр, шуларҙы маҡтап яҙалар, реклама эшләйҙәр. Ә "Киске Өфө" үҙебеҙҙең сәнғәт кешеләрен күҙ уңынан ысҡындырмайынса, уларҙың эшмәкәрлеген күҙәтеп бара, улар менән интервьюлар эшләй, күңелдәрен үҫтереп ебәрә. Афариндар, тиергә генә ҡала.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*АФАРИН!*

# ҺАУМЫ, ҺАУМЫ, ӘКИӘТ!




**М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының ишектәре ул көндә шар асыҡ була: ул үҙендә баш ҡаланың иң илгәҙәк, телсәр, аҡыллы балаларын көтә. Улар йыл һайын май аҙағында шулай йыйылышып, өлкәндәргә лә, үҙҙәренә лә күркәм байрам ойоштора. Аңлағанһығыҙҙыр, һүҙ "Һаумы, һаумы, әкиәт!" донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡортса һөйләүселәрҙең ҡала конкурсын йомғаҡлау тантанаһы тураһында бара. Ун дүртенсе тапҡыр уҙғарылған ярыштың кескәй әкиәтселәре, йәш әртистәре, һәләтле ғаиләләре кемдәр һуң?**

**(Дауамы 16-сы биттә).**

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

ӨС ДӘЛИЛ: АБВ

# АУЫЛДЫ МАҠТА ЛА...



**Рәсәй Федерацияһы Советы спикеры Валентина Матвиенко йәштәрҙе күпләп ауылға йәшәргә ҡайтырға саҡыра. Быһың өсөн ул интернет, социаль селтәрҙәр аша блогерҙар ярҙамында ауыл тормошон популярлаштырыуҙы тәҡдим итә. Күпкә һуңлап булһа ла, Рәсәй Федерацияһы етәкселегенең өсөнсө позицияһын биләгән кешенең ауылды исҡә төшөрөүе һәр йәһәттән хуплауға лайыҡ. Әммә:**

Йәштәрҙе саҡырыу, ауыл тормошон популярлаштырыу ярҙамында ғына бөгөнгө ауылды күтәреү, үҫтереү, һаҡлап ҡалыу, ай-һай, мөмкин дә түгелдер. Был - ауыл тормошон романтика итеп күргән кешеләрҙең бойомға ашмаҫ хыялы. Быны хәҙерге ауылға ҡайтып, бер-ике көн йәшәп ҡараған кеше шундуҡ аңлай. Һуңғы утыҙ йылда ауыл танығыһыҙ булып үҙгәрҙе. Тап утыҙ йыл элек "Ҡаланы маҡта ла, ауылды йәшә" тигән һүҙ модала булһа, бөгөн нәҡ киреһе: "Ауылды маҡта ла, ҡалала йәшә". Хәҙер ундағы һуңғы пенсионер баҡыйлыҡҡа күскәндән һуң ауыл тормошобоҙҙоң бер күренеше булараҡ та юҡҡа сыҡмаҫ тимә!

Ауыл тормошон аяҡҡа баҫтырыу дәүләт кимәлендә ҡабул ителгән закондар, программалар ярҙамында ғына мөмкиндер. Дәүләттең ауылға йөҙө менән боролоуы лазым. "Ауылда эш юҡ тигән һүҙ дөрөҫ түгел, ялҡау булмаһаң..." тиеүселәр ҙә бар. Дөрөҫ һүҙҙәр, әммә бөтә кеше лә ауылда үҙ эшен аса алмай. Икенсенән, тик шәхси хужалыҡ алып барыу кимәлендә генә хәҙерге заман шарттарында ғаиләңде тәьмин итеү мөмкин дә түгелдер. Ауылда йәшәһәң, ялҡау булмаһаң, тамағың туҡ булыр, өҫтөң бөтөн булыр ул, тик заманға ярашлы интеллектуаль һәм социаль яҡтан үҫешә алырһыңмы?

Бер заманда, һәр дәүләттә ауыл ҡаланы аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүсе генә түгел, ә һәр дәүләттең стратегик-демографик мәсьәләһен хәл итеүсе урын да. Нимә генә тимә, ҡалала йәшәүсе ғаиләләрҙә балалар һаны 1-2-нән артманы һәм артмай, был демографик үҫештең нуль кимәле. Шуға күрә ауыл хужалығын дотациялауҙы дәүләт тап ошо стратегик мәсьәләне хәл итеү кимәлендә күтәрергә бурыслы. Ауыл ҡаланы ғына туйҙырып ҡалмай, дәүләтте, милләтте кеше менән тәьмин итә. Илебеҙҙең демографик мәсьәләһен ситтән ағылыусы гастарбайтерҙар иҫәбенә генә хәл итергә тырышыу үҙе ултырған ағас ботағын бысҡы менән бысып ултырыусының хәтерләтә. Ситтәр илебеҙгә күпләп килә, гражданлыҡ ала, бер көн килеп уларҙың һаны критик массанан артһа, улар сәйәси хоҡуҡҡа дәғүә белдерәсәк. Был йәһәттән бөгөн ауылды һаҡлап ҡалыу Рәсәй, Башҡортостан дәүләтселеген һаҡлап ҡалыуға тиң мәсьәлә булыуы мотлаҡ.

"Мәктәп бөтһә, ауыл бөтә" тигән аңлатма тулы түгелдер. Ни өсөн тигәндә, мәктәптәр уҡырға балалар ҡалмау сәбәпле ябыла, ә балаларҙың ҡалмауы уларҙың атаәсәһенә ауылда эш булмауына туранан-тура бәйле. Шулай уҡ ауыл мәктәбенә уҡытыусылар табыу ҙа проблемаға әүерелә бара. Ауылда эш булмаһа, унда йәштәр ҡалмай, йәштәр ҡалмаһа, балалар булмай, балалар булмаһа - мәктәптәр ябыла. Мәктәптәр ябылыуы ла үҙ нәүбәтендә тиҫтәләгән эш урындарын юҡҡа сығара. Ҡыҫҡаһы, ауыл да, ундағы мәктәп тә дәүләттең ярҙамына мохтаж. Ауылда тик күпләп эш урындары ойоштороп ҡына мәктәпте, ауылдың үҙен, дәүләтте һаҡлап ҡалып була. Был - аксиома!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ХЕҘМӘТ ДӘРЕСЕ ҠАЙҘА БУЛҒАН?



(Башы 1-се биттә).

Рәсәй музейҙары ассоциацияһы ағзаһы булып торабыҙ һәм шәхси музейыбыҙға уҡыусылар экскурсияға килеп йөрөй, Ауырғазы районы белем усаҡтары менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. Шау-гөр килеп ингән балаларға ата-бабаларыбыҙҙың көнкүреш кәрәк-ярағын, ҡоралдарын, һауыт-һабаларын, кейемдәрҙе күрһәтеп һөйләйем. Бына элек нисек йәшәгәндәр, тимерлектә нимәләр эшләгәндәр. Ағастан соҡоп яһалған тәпәндәрҙе күрһәтәм дә: "Һеҙ ҙә эшләр инегеҙме?" - тигән һорау бирәм. Әлбиттә, яуаптары "Юҡ!" була. Араларында бик һирәктәре генә шөрөп бора белә. Һөйләшкән арала өлкәнерәктәренә "Өйләнәһеңме, кейәүгә сығаһыңмы?" тигәнерәк тә һорауҙар бирәм. Һәр кеме ғаиләһ ҡорорлоҡ йүнле пар таба алмауын әйтә. Сөнки ҡыҙ балаһы - әсәй, ҡатын булырға, хужалыҡ алып барырға, ирҙе ир итеп йәшәтергә, ә егет кешене донъя көтөргә, ғаилә аҫрарға өйрәтмәйҙәр. Үҙҙәренең уйҙарында тик иномарка ла башҡаһы. Оҙаҡламай ғаилә институты бөтәсәк былай барһа. Төймә таҡҡаның, йыртылған кейемендә теккәнең бармы, салбар үтекләгәнегеҙ бармы, тип ҡыҙыҡһынғаным да бар, береһе: "Нимәгә ул, джинсыны хәҙер үтекләмәйҙәр", - тимәһенме.

Бындай хәлдәрҙә балаларҙың һис бер гәйебе юҡ, бар яуаплылыҡ атай-әсәйҙәрҙә. Бына минә атайым һәр ваҡыт: "Һинең ҡулыңдан килмәһә, минән көләсәктәр", - тип әйтер ине. Әсәй ҙә апай-һеңлекәштәрҙә: "Ашарға бешерә, йөн илəй, бәйләй белмәһән, тимәк, әсәйең ялҡау булған, тип әйтәсәктәр", - тип тәрбиәләне. Ғаилә генә түгел, урам да тәрбиәләне беҙҙе: урамдан берәйһе менән иҫәнләшмәй үтеп ҡара! Кискегә атай белә, сыбыҡ менән ҡаршы ала. Колхоз эшендә йөрөгәндә лә берәй эште белмәй торһаң, "Кемден малайы? Исмәгилдеке, балаһын эшкә өйрәтмәгән", тигән һүҙ сыҡһа, атайҙың ҡулында - сыбыҡ. Шуға үҙебеҙ эшләргә, атай-әсәйҙең йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәскә тырышып үҫкәнбеҙҙер инде. Балта һабы һынһа, утын яра алмай, атайҙы көтөп торманыҡ, үҙебеҙ эшләп ҡуя инек. Хеҙмәт ярҙамында кеше яһанылар беҙҙән.

Бөгөн бөтә ерҙә эшсе ҡулдар, оҫталар етмәгәндә, халыҡтың мәшғүллек үҙәктәрендә йөҙәр-меңәр кеше теркәлеп, хөкүмәттән бушлай аҡса алып ятыуҙары ғәжәйеп күренеш. Имеш, эш юҡ.

Быларҙың барыһын да зарланыуҙан түгел, күңелем әрнеп һөйләйем. Шул тиклем борсолдорған, әрнеткән күренеш бит! Балаларҙы эшкә өйрәтеп, хеҙмәтте һөйҙөрөп үҫтерһәк ине. Быһың өсөн йәш ғаиләләр үҙҙәре белмәгәндәрен өйрәнеп, шуны балаларына өйрәтеп тәрбиәләһендәр. Ә мәғариф системаһында ер-яңынан ҙур үҙгәрештәр талап ителә был йәһәттән: мәктәптәргә рәсем һәм һыҙым (черчение) дәрестәрен тулы күләмендә кире ҡайтарыу, хеҙмәт дәрестәрен элеккеә файҙалы итеп уҙғарыуҙы тергеҙеү мотлаҡ. Сөнки балалар уй-ниәттәрен ҡағыҙға төшөрә лә белмәй бит хәҙер. Шуғалыр ҙа, бәлки, ауылдарҙа ла бөтә ерҙә тик тәстәре менән генә айырылған профнастилдар, элекке кеүек күңелләшерлек матур семәрле ҡойма, тәҙрә ҡапҡастары, кәрниз, фронтондар юҡ. Ижадсылар тәрбиәләнмәй. Шуға педагогтарҙың абруйын күтәреү, уларҙың эшмәкәрлеген ҡағыҙ тултырыуҙан арындырып, тәрбиәүи юҫыҡҡа йүнәлтеү бик мөһим. Былар, әлбиттә, бөтә Рәсәй кимәлендә бойомға ашырылырға тейеш бурыстар һәм теләктәр, шулай ҙа, бәлки, боҙ ҡуҙғалыр.

**Зәки НАҒАЕВ,**
**"Ҡурай даны" милли телевизион премияһына лайыҡ булыусы һөнәрсе, нәфис керамика оҫтаһы, Ауырғазы районы.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ГӘЗИТЕБЕҘ МЕНӘН...
## бәхетлебеҙ

(Башы 1-се биттә).

Ауылда йәшәгән кеше булараҡ, баҡса, ауыл хужалығы темаларын яҡтыртҡан мәҡәләләр күңелгә яҡын. Мул итеп баҡса үҫтергән, үҙенең тыуған еренән айырылмайынса, шунда эш табып, игенселек һәм малсылыҡ менән булышҡандар тураһында уҡып, беҙҙең дә күңелдәр күтәрелә, әллә ниндәй ҙур эштәр башҡарғы килеп китә. Гәзит уҡыусыларығыҙҙы шулай дәртләндерен тороуығыҙға рәхмәт. Артабан да ауыл хужалығын күҙ уңынан ысҡындырмағыҙ берүк.



Беҙҙең республикала биш тиҫтәнән ашыу район һәм 21 ҡала. Уларҙың хакимиәт етәкселәре, райондарҙың ауыл советтары етәкселәре бар. Халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыу, Башҡортостаныбыҙҙың яҡшы бөгөнгөһө һәм яҡты киләсәге өсөн тәғәйенләнгән власть вәкилдәренең дә һүҙҙәрен, төрлө һорауҙарға ҡараштарын уҡырға ине гәзит биттәрендә. Бәлки, "Киске Өфө"ләр ошо мәсьәләне күҙ уңында тотоп эш башлар?

Ағымдағы уҡыу йылы тамамланды. Шуға күрә гәзит битендә Өфө һәм, ғөмүмән, Башҡортостандағы уҡыу йорттары тураһында ғына түгел, ә тотош Мәскәү, Санкт-Петербург һәм илебеҙҙең башҡа ҙур ҡалаларындағы, шулай уҡ сит илдәрҙәге уҡыу йорттары тураһында ла мәғлүмәт бирелһә ине. Иң беренсе ниндәй һөнәрҙәр барлығы һәм уларҙы ҡайҙа уҡытыуҙары хаҡында уҡығы килә. Донъяла уҡытыусы, табип, юрист, журналист һәм башҡа күҙ уңындағы һөнәрҙәрҙән тыш, тағы әллә күпме яңы, заманса һөнәрҙәр бихисап. Улар хаҡында һәр кем белергә тейештер, тип уйлайым.

Дөйөмләштереп әйткәндә, "Киске Өфө" бөтә яҡлап та килгән баҫма. Мәғлүмәт тә бирә, уйландыра ла, хисләндерә лә, өмөтләндерә лә, күңелдәрҙе күтәрә, йөрәктәрҙе дәртләндерә.

**Зифа АҠМАНОВА,**
**Әбйәлил районы Асҡар ауылы.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Һамар өлкәһендә хәрби әҙерлек үткән "Башҡортостан" мотоуҡсылар полкы хәрбиҙәре менән аралашты. "Өфөлә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам итәсәк дәүләт фондының филиалы астыҡ. Дүрт ҡала ошондай филиал эшләй. Вәғәҙә иткәнебеҙсә, һеҙҙең туғандарығыҙ һәм яҡындарығыҙ - ата-әсәләрегеҙ, хәләл ефеттәрегеҙ, балаларығыҙ тураһында хәстәрлек күрербеҙ", - тине Радий Хәбиров, полк яугирҙарына мөрәжәғәт итеп.

✓Башҡортостанда апрелдә сәнәғәт производствоһы индексы былтырғы йыл менән сағыштырғанда 110 процент тәшкил итте. Ғинуар-апрель айҙарында был һан 101,9 процент. Был дөйөм Рәсәйҙәге уртаса күрһәткестәргә ҡарағанда яҡшыраҡ. "Тышҡы факторҙарға ҡарамайынса, сәнәғәт үҫә. Беҙ яңы импульстар табабыҙ, инвесторҙар йәлеп итәбеҙ, ярҙам күрһәтәбеҙ. Һөҙөмтәлә, яңы эш урындары, бюджет һалым менән тулылана", - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәрҙә.

✓Башҡортостан власы "Алға" айырым махсус зонаһы территорияһында импортты алыштыра алырлыҡ биологик әүҙем матдәләр етештереүсе юғары технологиялы производство булдырырға тәҡдим итә. Иҫәпләүҙәр буйынса, проекттың бюджеты 226,8 млн һум тәшкил итәсәк, 38 яңы эш урыны барлыҡҡа киләсәк. Эшен "Алға" зонаһында башлаусы инвесторҙарға һалым ставкаһын түбәнәйтеү мөмкинлеге, аренда өсөн льготалар ҡаралған.

✓Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев Бохара ҡалаһының башҡорт-татар милли-мәҙәни үҙәгендә Башҡортостандан тыуып үҫкән яҡташтарыбыҙ менән осрашты. Бөгөн унда 23 меңдән ашыу башҡорт йәшәй. Осрашыуҙа хеҙмәттәшлектең көнүҙәк мәсьәләләре тикшерелде, артабанғы пландар билдәләнде. Башҡортостан менән Үзбәкстан һәр ваҡыт ышанyслы партнерҙар булып ҡала. Республикалар иҡтисадтың төрлө өлкәләрендә хеҙмәттәшлек итә, берлектәге социаль, белем биреү, мәҙәни, спорт проекттарын тормошҡа ашыра.

✓Башҡортостанда Берҙәм дәүләт имтиханының тәүге имтихандары уҙҙы. География, химия, әҙәбиәт буйынса БДИла бөтәһе 3,5 меңдән ашыу сығарылыш уҡыусыһы ҡатнашты, уларҙың 408-е - географиянан, 802-һе - әҙәбиәттән, 2388-е химиянан һынау тотто. Рус теленән имтиханда берҙәм дәүләт имтиханында - 14 786, дәүләт сығарылыш имтиханында 197 кеше ҡатнашты.

*✓ Ресторандарҙың береһендә ролл ризыҡтарында хатта листерия бактерияһы табылған. Уны, ғәҙәттә, шәхси гигиена талаптарына күҙ йомоп ҡараған кухня хеҙмәткәрҙәре йоҡтора.*



*БАШҠОРТОСТАНЫМ!*

**Гәзиттә даими баҫылып килгән "Баш ҡалам" рубрикаһын уҡып барам. Өфөгә ҡағылышлы бик күп күренештәр сағылдырыла унда. Ҡайһы берҙә уҡып сығам да, "Ысынлап та шулай шул, нисек күҙгә эленмәгән был хәл", тип аптырайым. Ошо рубриканы нигеҙ итеп алып, республикабыҙ тураһында күҙәтеү эшләргә булдым. Баш ҡалабыҙ менән бер рәттән, Башҡортостаныбыҙ хаҡында ла мәҡәләләр ҡыҙыҡлы булыр, тип ышанам.**

# ТУРИСТАР АРТЫНАН...

## сүптәр ҡала өйөлөп



Башҡортостан, минә ҡалһа, иң хозур тәбиғәтле ерҙә урынлашҡан. Сит илдәрҙә лә күп булдым, күрше төбәктәрҙә лә әллә күпме урап сыҡтым, беҙҙәге матурлыҡҡа еткәне юҡ, иллә мәгәр. Әлбиттә, һәр төбәктең үҙенә генә хас үҙенсәлеге, билдәле урындары күп һәм улар, һис шикһеҙ, һоҡланыу тыуҙыра. Шулай ҙа беҙҙең урман-ҡырҙар, ялан һәм болондар, тауҙар һәм йылғалар үҙҙәренә күрә айырым матурлыҡҡа эйә. Был хозурлыҡты күрергә теләүселәр ҙә күп, әлбиттә. Һуңғы йылдарҙа ғына туристик йүнәлештең нисек әүҙемләшеүен һәр кем күреп, белеп тора. Тауҙар эргәһендә лә, йылға-күлдәр буйлап та ял итеү урындары, кемпингтар һәм башҡа әллә күпме урындар төҙөлдө. Был, минеңсә, яҡшы күренеш, сөнки ул урындар хәҙер ҡараулы, таҙа. Ләкин минең ошоға ярашлы тәҡдимем дә бар. Ошондай ял итеү урындары тотоусыларҙан үҙҙәренән 5-10 саҡрым алыҫлыҡтағы ерҙәрҙә лә күҙ һалып тороуҙы һорағанда, нисек булыр икән? Башҡортостандың йәмле тәбиғәтендә эшмәкәрлек асып, уның файҙаһын күрә икән, үҙенең күңел талабы буйынса ла тирә-яғын таҙа тотоуы урынлы булыр ине. Йәйгә аяҡ баҫыр-баҫмаҫ тәбиғәткә менәрләгән кеше ағылды, ҡырағай ял итеүселәрҙән һуң әллә күпме сүп-сар ятып ҡалды. Урман ҡараусылар, ауыл советтары ғына был хәлде контролдә тота алмай, уларға ярҙам кәрәк.

Водитель булараҡ, юлда күп йөрөгәс, төрлө хәлдәргә иғтибар итәлә. Шулай һәр район, бер республикала булһаҡ та, юлдарын да төрлөсә ҡарай, тәбиғәткә лә ҡараш төрлөсә, ауылдарға күҙ һалғанда ла айырмалар бар. Шулай уҡ ҡайһы бер райондарҙың да йылдар дауамында йә алға китеш күҙәтелә, йәки киреһенсә, үҫеш туҡтап, булғаны емерелә башлай. Район етәкселегенән, урындағы хакимиәт башлыҡтарынан күп нәмә тора, әлбиттә. Мәҫәлән, күпселек ерҙә зыяраттар юл ситендә урынлашҡан һәм уларҙың хәл-торошона шунда уҡ күҙ төшә һәм ауыл тураһында теге тәьҫоратты булдыра. Миҫал итеп Белорет районының Сермән - Баймаҡ юлында ятҡан ауылдарҙы алырға була. Уларҙың ҡайһы берҙәрендә бөтә ерҙә тәртип: зыярат булһынмы, юл, автобус туҡталҡаларымы, юл ситтәреме, картә менән уратып алынған бесәнлектәр - һүҙ тейҙерерлек түгел. Ләкин был тарафтарҙа хәүефкә һалған мәлдәре лә етерлек. Шуларҙың береһе - юл буйлап иркен йөрөгән йылҡы көтөүе. Тау артынан тау булған, ҡатмарлы юлды ҡапыл ғына юлға килеп сығыусы аттар тағы ла ҡурҡынысыраҡ итә. Ә уларҙың күбеһенә төнөн яҡтыртып тороусы таҫма һалынмағанлығын иҫәпкә алғанда, был юл бөтөнләй ҡатмарлыға әйләнә. Водитель һәм уның пассажирҙары ғүмерен хәүефкә ҡуйған өсөн был аттар хужалары ниндәйҙер яуаплылыҡ тойорға тейештәр, тип уйлайым. Әбйәлил районы яҡтарында ла шул уҡ хәл, әйткәндәй.

Бер ваҡыт республикала, тотош ил кимәлендәге кеүек үк, ауыл хужалығы бик ауыр хәлдә ине. Буш ятҡан баҫыуҙарҙы, емерелеп бөтөп барған элекке ферма биналарын, йәмһеҙ булып ятҡан йәйләү урындарын күреү күңелдә әйтеп бөткөһөҙ ауыр хистәр уятыр ине. Хәҙер иһә был өлкәлә хәлдәр бермәбер яҡшырҙы. Баҫыуҙар сәселә, күпләп мал тотоусылар арта - бик тә яҡшы күренеш. Шулай уҡ умартасыларға ҡарата булған иғтибар ҙа ҡыуандыра. Мәҫәлән, республикала башҡорт бал ҡортон һатып алыуға, балдың сифатын тикшереү өсөн экспертиза үткәреүгә һәм башҡа ошондай эштәргә умартасыларға субсидия буленеүен уҡып шатландым. Былтыр 7 мең тоннанан ашыу бал етештерген умартасыларға ҙур ярҙам буласаҡ был.

Башҡортостан тураһында күп яҙырға була, шуға күрә минең башланғысымды республика халҡы һәм ситтә йәшәүсе миләттәштәребеҙ ҙә күтәреп сығыр, тип ышанам. Үҙебеҙҙең республикала ҡыуандырған, күңелдә ҡырған, уйландырған хәлдәр һәм мәлдәр тураһында "Киске Өфө" биттәрендә уртаҡлашайыҡ.

**Нәгим САФИУЛЛИН,**
**Өфө районы**
**Булгаково ҡасабаһы.**

*ИҪКӘРТӘБЕҘ!*

# СИТ РИЗЫҠТАРҘЫҢ...

## хәүефе лә бар



**"Роскачество" япон кухняһы ресторандарында, махсуслашҡан кафеларҙа, сауҙа үҙәктәрендә һатылған "Филадельфия" ролл ризыҡтарын тикшергән һәм уларҙың хәүефһеҙлек күрһәткестәре буйынса талаптарға яуап бирмәүен асыҡлаған.**

Ойошма етәксеһе Максим Протасов белдереүенсә, "Филадельфия" ролдарының 40 процентында эсәк таяҡсаһы табылған. Иң ҡыҙығы, тикшереүҙәрҙә ҡатнашҡан өлгөләр премиум класындағы ресторандарҙан да, ғәҙәти сауҙа үҙәктәренән дә, махсус ролл ризыҡтары әҙерләү менән шөғөлләнеүсе селтәрҙәрҙән дә алынған. 100 процент осраҡта микроорганизмдар иҫәбе буйынса тайпылыштар бар, улар рөхсәт ителгәндән күпкә юғары. Тимәк, һығымта бер: хатта үҙенең атамаһына тап төшөрөргә ҡурҡҡан ресторандарҙа ла был ризыҡ дөрөҫ һаҡланмай, уны әҙерләүселәр санитар-гигиена нормаларын үтәмәй.

"Роскачество" хатта ролл ризыҡтарында бактерия табылған нөктәләрҙең исемен дә асыҡтан-асыҡ атай. Улар - "ВкусВилл" һәм "Spar" магазиндар селтәре, "Суши-Маркет", "Суши Wok", "Pizza Sushi Wok" һәм "Yami Yami" килтереп биреү хеҙмәте. Бында ролдар әҙерләгәндә санитар-гигиена талаптары үтәлмәй. Норманан артыҡ микроорганизмдар "Азбука Вкуса", "ВкусВилл", "Globus" һәм "Spar" сауҙа селтәрҙәрендә, "Суши-Маркет", "Сушисет", "Суши Wok", "Pizza Sushi Wok" япон кухняһы магазиндарында, "Yami Yami" килтереп биреү хеҙмәтендә, шулай уҡ "Нияма", "Планета суши", "Тануки", "Якитория" ресторандарында осраған. Был аҙыҡтарҙы һаҡлағанда температура режимы күҙәтелмәүе тураһында һөйләй. Ресторандарҙың береһендә ролл ризыҡтарында хатта листерия бактерияһы табылған. Уны, ғәҙәттә, шәхси гигиена талаптарына күҙ йомоп ҡараған кухня хеҙмәткәрҙәре йоҡтора. Йәки ул уларҙың аяҡ кейеменә эйәреп инә һәм һеҙ ятҡан ролдың уртаһына төшөп тә итә. Шулай уҡ ике магазинда алтын кеүек стафилококк бактерияһы булған.

Был яңылыҡтарҙың барыһы ла Мәскәүҙә күҙәтелгән. Тик миҙалдың икенсе яғы: бындай атамалы магазиндар, ресторандар Өфөлә һәм хатта республиканың һәр ҡалаһы, район үҙәгендә бар. Уларҙы тикшерә башлаһаң, алда һаналған бактерия һәм микроорганизмдар ваҡ-төйәк кенә булып тойолор, тәүбә! Һәр хәлдә, беҙҙә хәлдәр яҡшыраҡ, тип бер кем дә раҫлай алмай. Бигерәк тә эш араһында ураған һайын урамға сығып, тәмәке тартып торған кухня эшселәренең сәләмәтлеге, унан ингәс, ҡулын йыуыу-йыумауы тураһында һүҙ йөрөтә лә алмайбыҙ. Ышанмаһағыҙ, үҙегеҙ теләгән берәй кафеның артҡы ишеге тирәһен байҡағыҙ, унда тәмәке тартмаған хеҙмәткәр юҡ та, ахыры.

"Роскачество" эксперттары хәҙер ошо төр ризыҡтарҙа сәләмәтлек өсөн зыянлы булмаған микробиологик күрһәткестәрҙең нормаһын билдәләргә тәҡдим итә. Әлегә тиклем бындай бизнес менән шөғөлләнеүселәрҙе бер кем дә тикшермәй һәм улар өсөн бер ниндәй талаптар ҙа юҡ кимәлендә ине. Рәсәй Медицина фәндәре академияһының Туҡланыу институты тәҡдименә лә "Эсәк таяҡсаһы төркөмө бактерияларын булдырмаҫҡа тырышырға кәрәк", тигәнерәк мәғәнә һалынған. Максим Протасов иһә, үҙебеҙҙең ерлеккә, йолаларға хас булмаған ризыҡтарҙы ашарға теләүселәр үҙ сәләмәтлегә өсөн хәүефләнергә тейеш, тигән фекерҙә.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфө-Инйәр-Белорет юлының 193-сө саҡрымында Һүрениәк һәм 139-сы саҡрымында Ҡамайылға аша ике күпер ремонтлана. Эштәр октябрь-ноябрь айҙарында тамамланасаҡ, тип хәбәр итәләр республиканың Транспорт һәм юл хужалығы министрлығынан. Юлдың был өлөштәрендә хәрәкәтте сикләү ҡаралған. Һүрениәк йылғаһы аша күперҙе ремонтлауға - 49,5, Ҡамайылға күперенә 33,2 млн һум бүленгән.

✓Башҡортостандың 14 фермеры ғаилә фермаларын үҫтереү өсөн грантҡа эйә булды. Уларға 1,5-19 миллион һум күләмендә дәүләт ярҙамы күрһәтелә. Дәүләт ярҙамының дөйөм суммаһы 95,2 миллион һум, тип хәбәр итте Башҡортостан премьер-министры Андрей Назаров. Башҡортостандың ауыл эшҡыуарҙары яңы эш башлаған фермерҙар өсөн "Агростартап", шулай уҡ "Агротуризм", ауыл хужалығы кооперативтарының матди-техник базаһын үҫтереү программалары сиктәрендә дәүләт ярҙамынан файҙаланырға мөмкин.

✓2-6 июндә Мәскәүҙә илдең иң ҙур әҙәби фестивале - IX "Ҡыҙыл майҙан" китап фестивале ойошторола. 3. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте быйыл да унда ҡатнаша. Нәшриәт хеҙмәткәрҙәре 2 мең дананан ашыу китап - фәнни-популяр, балалар өсөн, тарихи, нәфис әҙәбиәт, һүҙлектәр, календарҙар тәҡдим итергә йыйына.

✓Башҡортостанда быйыл денге биҙгәген йоҡтороуҙың тәүге осрағы теркәлгән. Өфө кешеһе Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренән ҡайтҡандың икенсе көнөнә температураһы күтәрелеүгә, башы ауыртыуға зарланып, медицина учреждениеһына мөрәжәғәт иткән. Сирҙе башлыса тропик илдәрҙә йәшәгән серәкәйҙәр тарата. Вирус кешенән кешегә йоҡмай. Белгестәр сит илдәргә барыр алдынан төбәктәге эпидемиологик хәл менән мотлаҡ ҡыҙыҡһынырға кәңәш бирә.

✓Башҡортостанда "Иң яҡшы остаз" республика конкурсына ғаризалар ҡабул итеү башланды, тип хәбәр иттеләр төбәк хеҙмәт министрлығынан. Конкурс Башҡортостан Хөкүмәте, Профсоюздар федерацияһы һәм БР Эш биреүселәр берлеге ярҙамында уҙғарыла. Конкурста 10 йылдан ашыу хеҙмәт стажы булған һәм бер үк эш биреүселә 3 йылдан ашыу остазлыҡ менән шөғөлләнгән Рәсәй граждандары ҡатнаша ала. Ғаризалар дүрт номинация буйынса 2023 йылдың 1 октябренә тиклем ҡабул ителә.

✓ *Инвестициялар күләме 82 млрд һумға еткән. Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының Үҙйылға яткылығын эшкәртеү һәм "Учалы элеваторы" компанияһының ашлыҡ киптереү комплексы ла шулар иҫәбендә.*



ҠЫҪҠАСА

# ЯҢЫ ТӘРТИП

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы депутаттары Йәштәр көнөн байрам итеү датаһын күсереү һәм һабантуйҙар ойоштороуҙың яңы тәртибе тураһында закон ҡабул итте.** Быға тиклем 27 июндә билдәләнгән Йәштәр көнө Рәсәй Президенты бойороғона ярашлы июндең һуңғы шәмбеһенә күсерелде. "Ошоға бәйле алкоголь продукцияһын ваҡлап һатыу тәртибе тураһындағы законға ла үҙгәрештәр индерелде. Хәҙер мөһим датаны билдәләгән көндә генә спиртлы эсемлектәр һатырға ярамай. Байрам саралары ҡайһы көндә ойоштороуҙы муниципаль берәмектәр 1 июнгә тиклем үҙҙәре хәл итә ала", - тип белдерҙе Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев. Бынан тыш, киләһе йылдан республика ҡалалары һәм районлары һабантуй көндәрен үҙҙәре һайларға мөмкин. Парламент спикеры фекеренсә, яңы тәртип уларға иркен эш итергә мөмкинлек бирергә һәм алкоголгә ҡаршы сикләүҙәрҙе мотлаҡ үтәүгә булышлыҡ итергә тейеш.

✓ **"Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһына үҙгәрештәр индерелде.** Түләүҙе квалификациялы, профилле белемле, мәҙәниәт өлкәһендә эшләгән, 2021 йылдан мәҙәниәт өлкәһендә белем биреү эшмәкәрлеген алып барған, бер һәм унан күберәк ставкаға эшкә урынлашҡан 35 йәшкәсә белгестәр алырға хоҡуҡлы. Муниципалитеттарҙа "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһы буйынса мәҙәниәт белгестәренә был ярҙам бер тапҡыр күрһәтелә. Башҡортостан Хөкүмәтендә билдәләүҙәренсә, быйыл йәнә 30 белгес дәүләт ярҙамы аласаҡ. Хәҙер түләүҙең күләме 1 миллион һумға тиклем арттырылды. Түләү торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн бирелә. Шулай уҡ Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса быйылдан аҡсаны шәхси автотранспорт һатып алыуға йүнәлтергә мөмкин.

✓ **Рәсәй Президенты Владимир Путин "Рәсәй Федерацияһында дәүләт пенсия тәьминәте тураһында" һәм "Страховка пенсиялары тураһында" федераль закондарға үҙгәрештәр индереү тураһында" законға ҡул ҡуйҙы.** Документ рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. Үҙгәрештәр ҡараусыһын юғалтҡан осраҡта страховка һәм социаль пенсияларҙы, шулай уҡ ике ата-әсәһе лә билдәһеҙ балаларға социаль пенсияны ғаризаһыҙ тәғәйенләүҙе күҙ уңында тота. Законда ҡаралғанса, былдай пенсиялар ҡараусыһы вафат булған көндән алып пенсия тәьминәтен ғәмәлгә ашырған орган ҡарамағындағы мәғлүмәттәр нигеҙендә тәғәйенләнә. Ошондай пенсиялар тәғәйенләү тураһында ҡарар биш эш көнө эсендә ҡабул ителергә тейеш. Шулай уҡ документта "эшкә һәләтһеҙ граждандар" төшөнсәһенә аныҡлыҡ индерелә, атап әйткәндә, уларға 18 йәше тулған һәм төп дөйөм йәки урта дөйөм белем биреү программалары буйынса уҡыуын тамамлағандар ҡарай.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯҢЫ ПРОЕКТТАР

**Сибайҙа үткән "Урал арьяғы" Бөтөн Рәсәй инвестиция һабантуйында быйыл 9 илдән, Рәсәйҙең 14 төбәгенән вәкилдәр ҡатнашҡан һәм ҡатнашыусылар иҫәбе 3500-гә еткән.**

Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров билдәләүенсә, был сара тап ошо төбәккә ярҙам итеү маҡсатынан ойошторола. Һуңғы 4 йыл эсендә Урал арьяғында 200 инвестиция проекты тормошҡа ашырылған, уларҙың 87-һе - 2022 йылда. Инвестициялар күләме 82 млрд һумға еткән. Улар араһында иң билдәле проекттар булып Әбйәлилдәге "Цемикс" заводы тора, ул ҡоро төҙөләш ҡатнашмалары етештерә. Шулай уҡ Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының Үҙйылға яткылығын эшкәртеү һәм "Учалы элеваторы" компанияһының ашлыҡ киптереү комплексы ла шулар иҫәбендә. V Бөтөн Рәсәй инвестиция һабантуйында дөйөм суммаһы 172, 5 млрд һум булған 32 килешеүгә ҡул ҡуйылған.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров брифингта был сараның һөҙөмтәләрен юғары баһалауы тураһында белдерҙе. "Был инвестициялар һабантуйы йылдан-йыл ҡатнашыусыларҙы күберәк йыя. Күп һөйләштек, ҡыҙыҡлы тәҡдимдәр ҙә күп булды. Быйыл Ҡытайҙан 48 кешенән торған ҙур делегация килде. Илдең төрлө төбәктәре ҙур ҡыҙыҡһыныу белдерә, был тәҡдимдәр ҙур бизнесҡа ла ҡарамай, әммә беҙгә Урал арьяғында тап урта эшҡыуарлыҡты үҫтерергә кәрәк. Шуға ла улар килтергән һәр проектҡа шатбыҙ. Сибай ҙа ҡунаҡтар ҡаршылауға яҡшы әҙерләнгән, ҡала таҙартылған, яңыртылған. Дөйөм алғанда, ошо барлыҡ тырышлыҡтар һөҙөмтәһендә ошондай уңайлы мөхит барлыҡҡа килә лә инде", - тине Радий Фәрит улы.

"Ҡул ҡуйылған килешеүҙәргә килгәндә, уларҙың иң ҙур өлөшө Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты эшмәкәрлеге менән бәйле. Ҙур проекттарҙың береһе - тимер юлы тармағы төҙөлөшө. 4 млрд һум торған "Шифа" проектына ла ҡул ҡуйылды. Тәҡдимдәр күп, уларҙың күпселеге туризмдың урта кимәленә ҡарай: глэмпингтар, турбазалар, ял базалары. "Морат" проекты 6 млрд һумдан башланғайны, хәҙер 8 млрд һумға етте. Уның буйынса оҙайлы анализ өләшө, бизнес-план төҙөү эштәре һаман да дауам итә", - тип билдәләне республика Башлығы.

# СИГЕЛГӘН КАРТА



**Өфөлә "Китап байрамы" Халыҡ-ара китап йәрминкәһендә "Башҡортостандың сигелгән картаһы" республика проектының презентацияһы уҙҙы. Проект менән Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров танышты. Ул картала үҙенең тыуған Ишембай районын эҙләп тапты.**

Картала республиканың 54 муниципаль районы һүрәтләнгән. Эштә ярым аҫыл таштар, сәйләнм, таҫмалар, күн, кейеҙ, алтын, көмөш ептәр һәм сигеү техникаһы файҙаланылған. Туҡымала муниципалитеттарҙың тәбиғәт ҡомарткылары, уларҙа йәшәгән халыҡтарҙың уникаль традицияларын да күрергә мөмкин. Рәсми асыу тантанаһында сәләмләү һүҙе менән Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры Салауат Кирәев сығыш яһаны. Сигелгән карта ҡыҫҡа ваҡыт эсендә әҙер булды, тип билдәләне ул.

- Сигелгән карта менән эш тулыһынса тамамланмаған, проекттың каталогын әҙерләйбеҙ. Августа Башҡортостандың сигелгән картаһы Сыуаштан Республикаһының Чебоксар ҡалаһында "Сигелгән Рәсәй" фестивалендә ҡатнаша, - тине Салауат Илгиз улы һәм проектты бойомға ашырыуҙа ҡатнашыусыларҙың барыһына ла рәхмәт белдерҙе. Республика халыҡ ижады үҙәгенән сигеү оҫталарына рәхмәт хаттары тапшырылды.

"Башҡортостандың сигелгән картаһы" - Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, республика районлары һәм сигеү оҫталарының Башҡортостан Республикаһы Башлығы грантына тормошҡа ашырған проекты.

# ТИМЕР ЮЛЫ ТӨҘӨЙӘСӘКТӘР



**Башҡортостанда яңы тимер юлы төҙөү ҡарала. Ул 160 км оҙонлоҡта булып, Сибай ҡалаһы менән Ырымбурҙың Яңы руда станцияһын тоташтырырға тейеш. Был турала "Урал арьяғы" инвестиция һабантуйында БР транспорт һәм юл хужалығы министрлығы менән "ИнфраВЭБ" акционерҙар йәмғиәте араһында килешеү төҙөлгән.**

Яңы тимер юлы Силәбе тимер юлын урап, Урта һәм Төньяҡ Уралдың көнсығыш районларын Ҡаҙағстан, Урта Азия, Ҡытай, Түбәнге Волга һәм Кавказ районлары менән тура тоташтырасаҡ. Башҡортостан һәм Ырымбур территорияларында тимер юл Подольское, Төньяҡ Подольское, Юбилейный төҫлө металл яткылыҡтарын эшкәртеүсе предприятиелар, шул иҫәптән Сибай һәм Бүребай эшкәртеү предприятиелары аша үтәсәк. "Бында перспективалы ятҡылыҡтарҙың дөйөм запастары 200 млн тонна тирәһе мәғдән тәшкил итә. Уларҙы иҡтисади ҡулланылышҡа индерергә була. Был магистраль Ҡаҙағстан һәм Ҡытайға яңы юл асасаҡ һәм сауҙа-иҡтисади мөнәсәбәттәрҙе хәл итеүгә яңы көс өҫтәп, тауарҙы алып барып еткереү юлын 250 километрға ҡыҫҡартасаҡ", - тине Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров.

Әлегә проекттың техник-иҡтисади нигеҙе эшләнгән һәм 9 йыл эсендә бойомға ашырыу күҙаллана. Инвестицияларҙың дөйөм күләме 116 млрд һумдан артып китәсәк, тип фаразлана. 2035 йылда тимер юлының йөк ташыу әйләнеше йылына 14 млн тоннаға етергә тейеш. Күпселек нефть, ҡара металл һәм төҙөләш материалдарынан торған йөктәр ташыласаҡ, тип күҙаллана.

# ИСТАНБУЛДА...



**Истанбулда Башҡортостан Республикаһының этнографик йорто төҙөкләндерелде. Ул Зейтинбурну районында, төрки халыҡтарының "Топкапы" этнографик ҡаласығы биләмәһендә урынлашҡан. Был хаҡта социаль селтәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров яҙҙы.**

Проекттың бурысы - төрки телле илдәрҙең һәм республикаларҙың мәҙәниәте, йолалары һәм ғөрәф-ғәҙәттәре менән таныштырыу. Бында милли байрамдар, концерттар ойоштороло, фильмдар күрһәтелә, һөнәрселәр күргәҙмәләре эшләй. Көн һайын бында 800-гә яҡын кеше килә. Инеү бушлай. "Эштәргә Рәсәйҙең сауҙа вәкиллеге ҡарамағындағы Башҡортостан вәкиллеге ҡатнашлығында беҙҙең Тышҡы иҡтисади бәйләнештәр министрлығы етәкселек итте. Йорттоң тышҡы яғы төҙөкләндерелде, экспозиция яңыртылды - иң яҡшы экспонаттар тупланды. Әске яғын "Ағиҙел" предприятиеһы төрлө йыһаздар менән биҙәне. Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһынған Истанбул халҡына һәм ҡунаҡтарына бына шундай бүләк. Әлбиттә, унда барған яҡташтарыбыҙға ла", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓12 июндә, Рәсәй һәм Өфө көнөндә, Башҡортостандың баш ҡалаһында байрам салюты була. Ул төнгә сәғәт 11-ҙә Ленин исемендәге майҙанда башлана, тип хәбәр итә Өфө хакимиәте матбуғат хеҙмәтенең ТГ-каналы. Байрам уңайынан республика халҡы 10, 11 һәм 12 июндә ял итә. Шулай уҡ июндең 28 ял көнө, был көнгә Ҡорбан байрам тура килә.

✓Республика йыйылма командаһы 15-се тапҡыр насар ишетеүсе спортсылар араһында дзюдо буйынса Рәсәй чемпионатында еңеү яуланы. Турнир Өфөнөң 32-се спорт мәктәбендә уҙған, унда 29 төбәктән 140 спортсы ҡатнашҡан. Башҡортостан спортсылары 12 миҙал яулап, беренсе урынға сыҡҡан. Хәҙер улар баш ҡалала 23 июлдән 3 августа тиклем үтәсәк "Беҙ бергә. Спорт!" сурдолимпия йәйге уйындарында ҡатнашасаҡ.

✓Ағиҙел ярын төҙөкләндереү дауам итә. Баш ҡаланың "Инвестиция сәғәте"ндә аттракциондар паркын булдырыу проекты тәҡдим ителде һәм муниципалитет тарафынан яҡлау тапты. "Йәшлек" спорт комплексы эргәһендә 12 аттракцион урынлашасаҡ, улар яртылаш әҙер ҙә инде. Бынан тыш, кафе һәм сәхнә лә буласаҡ.

✓Башҡортостанда күп балалы ғаиләләргә 57 миллион һумлыҡ транспорт һалымы буйынса ташлама бирелде. Льгота менән өс һәм унан күберәк балаһы булған 20030 граждан файҙаланды. 2019 йылдан алып Башҡортостанда күп балалы ғаиләләр двигатель ҡеүәте 150 ат көсөнә тиклем булған еңел машинаға, 125 ат көсөнә тиклем автобусҡа транспорт һалымы түләүҙән азат ителде. Әгәр ишле ғаиләнең автотехникаһы 150-нән 200 литрға тиклем яғыулыҡ һыйҙырышлы булһа, уларға 50% ташлама ҡаралған.

✓РФ Юл хәрәкәте ҡағиҙәләренең 2.7-се пунктында ҡаралыуынса махсус техник ҡоролма менән йыһазландырылмаған осраҡта рулдә саҡта телефондан һөйләшеү тыйыла. Былдай ғәмһеҙлек етди аварияның сәбәпсеһе булырға мөмкин. Иң яҡшыһы - юл ситенә туҡтап, йыйлап һөйләшеү, был йәйәүлеләргә лә ҡағыла. Китеп барған ваҡытта телефондан һөйләшкән йәки смс яҙған күренеш йыш осрай. Был водителдең иғтибарын, реакция тиҙлеген, юл торошон контролдә тотоу һәләтен кәметә. Телефонға бәйле ҡағиҙә боҙоу осрағында водителдәргә 1500 һум күләмендә штраф ҡаралған.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӘЙТӘГҮР!

# БЕЛЕМ БИРЕП КЕНӘ ҠАЛМАЙҘАР...



**Уҡыу йылы тамам. Ниндәй борсолоуҙар, проблемалар, ҡаҙаныштар, яңылыҡтар менән иҫтә ҡалды ул?**

***Шайморат ТИМЕРБУЛАТОВ, Күмертау ҡалаһы Башҡортостандың беренсе Президенты Мортаза Рәхимов исемендәге 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры:*** 2022-2023 уҡыу йылы беҙҙең гимназия-интернат өсөн иҫтәлекле ваҡиғаларға бай булды.

Февралдә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың Указына ярашлы, уҡыу йортона Башҡортостандың беренсе Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов исеме бирелде. Был беҙҙең өсөн ғорурлыҡ, оло мәртәбә һәм яуаплылыҡ. Шул ваҡиға айҡанлы Рәхимов исемендәге кабинет-музей астыҡ, 12 майҙа I "Рәхимов уҡыуҙары" республика фәнни-ғәмәли конференцияһын уҙғарҙыҡ. Конференцияла республиканың райондары, ҡалалары, Ырымбур өлкәһе, Ҡаҙағстан Республикаһынан 125 уҡыусы ҡатнашты. Киләсәктә Рәхимов исемендәге премия булдырыу һәм бюсын эшләүҙе планлаштырабыҙ.

Былтырғы уҡыу йылы менән сағыштырғанда, олимпиада, конференция, конкурс, спорт ярыштарында еңеүҙәр ике тапҡырға артты. Ҡаҙағстан Республикаһы Аҡтау ҡалаһындағы Назарбаев исемендәге интеллектуаль мәктәп менән меморандум төҙөп, онлайн форматта уҡытыусылар һәм уҡыусылар өсөн файҙалы осрашыуҙар үткәрҙек. Хәҙер иһә уҡыу сифатын тағы ла яҡшыртыу, уҡыусыларҙың һәләтен төрлө яҡтан асыу, рухлы, илһөйәр итеп тәрбиәләү өсөн түңәрәктәр һанын арттырыу һәм ошо йөнәттән эшмәкәрлекте көсәйтеү бурысы тора. Әлеге уҡыу йылында 9-сы, 11-се класты 130 уҡыусы тамамлай. Балаларҙың имтихандарҙы уңышлы тапшырып, юғары һәм махсус уҡыу йорттарына инеүҙәрен теләйбеҙ. Тик шуныһы бер аҙ борсолдора: яңы 5 көнлөк уҡыу планы буйынса башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре кәмей. Шуға күрә уларҙы өҫтәмә дәрес итеп уҡытырға ниәтләйбеҙ.

***Марат ҒИЛМАНОВ, Дыуан районының Тимер Йосопов исемендәге республика лицей-интернаты директоры:*** Лицейыбыҙ республика мәғариф һәм фән системаһы тормошонда әүҙем ҡатнаша һәм лайыҡлы урын алып тора. Әле 2023 йылда мәктәптәрҙе комплекслы ремонтлау федераль программаһы буйынса ремонт-төҙөлөш эштәрен башланыҡ.

Мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан ойошторолған төрлө фәнни-ғәмәли эҙләнеү эштәрендә тәрбиәләнеүселәребеҙ юғары һөҙөмтәләр күрһәтә. М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ойошторған Халыҡ-ара кимәлдәге конференцияла тәрбиәләнеүсебеҙ Наил Мәжитов менән Нурислам Ғәлиуллин (етәкселәре - Марат Ғилманов) еңеүсе булдылар. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса ойошторолған олимпиадаларҙа ла уҡыусыларыбыҙ уҡыу йорто намыҫына тап төшөрмәне. Төньяҡ-көнсығыш төбәк уҡыусыларын бер ҡорға туплаған "Йәш сәсәндәр кисәһе" проекты ла интернатыбыҙҙың рухи һәм мәртәбәле сараларының береһе булып тора. "Урал батыр" эпосын һәм башҡа ҡобайырҙарҙы яттан һөйләү, сәхнәләштереү буйынса үткәрелгән милли проект йәш сәсәндәребеҙҙе, фольклор коллективтарын әҙерләүҙә ҙур роль уйнай.

Уҡытыусы һәм остаз йылында ижад, спорт түңәрәктәренең эше йәнләнде. Ҡышҡы полиатлон буйынса Донья чемпионатында илебеҙҙең йыйылма командаһы өсөн сығыш яһап, үҙ категорияһында беренсе урын яулаған Вилдан Нурыев (тренеры - А. Каиров) лицей-интернаттың ғына түгел, Рәсәйҙең данын күтәрҙе. Шулай уҡ милли көрәш түңәрәгендә шөғөлләнеүсе егеттәребеҙ (тренер - Р. Хужин) батырҙар майҙанында һәр ваҡыт призлы урындар яулай. "Һыйыҡай" балалар бейеү һәм "Хазина" фольклор коллективтары ла (етәкселәре - Р Солтанова, А. Кәримова) республикала ойошторолған ижади бәйгеләрҙә призлы урындар яулап, юғары кимәлдә сығыш яһай, тамашасы һөйөүен яулай.

***Гөлнар МӨСӘЛИМОВА, Белорет районының Оло йылға мәктәбе директоры:*** Һәр уҡыу йылы беҙҙең өсөн үҙенсәлекле, сөнки һәр йыл артабан үҫәбеҙ, яңы маҡсаттар ҡуябыҙ һәм һөҙөмтә алабыҙ. Тәү сиратта, 2022-2023 уҡыу йылы, башҡа ҡаҙаныштарыбыҙ менән бер рәттән, ауылыбыҙҙың "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыуы менән иҫтә ҡаласаҡ. Ишле ауыл биләмәһе башлығы Фәнис Даньянов конкурста ҡатнашырға теләк белдергәс, Оло йылға мәктәбе ситтә тороп ҡалманы: уҡытыусылар менән уҡыусылар бик әүҙем ҡатнашты. Ошо конкурс сиктәрендә йәштәр һәм балалар ҡоролтайы ойоштороҡ. Улар төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнаша.

Туҡан мәктәбе менән берлектә социаль видеороликтар конкурсында ҡатнаштыҡ. Иң әүҙем уҡыусыларыбыҙ ҡиммәтле сертификаттар менән бүләкләнде. Мартта район мәктәптәре, крайҙы өйрәнеүселәр, ҡыҙыҡһыныусылар өсөн "Рәсәй халыҡтарының туған телдәрен үҫтереүҙә Википедияның роле" темаһына семинар үткәрҙек. Семинарҙа ҡатнашыусылар сайтта теркәлеп, әүҙем эшләй башланы.

Мәктәптә тыуған ил алдындағы бурысын үтәп, 2000 йылда Чечен Республикаһының Грозный ҡалаһын штурмлағанда батырҙарса һәләк булған Рауил Закиров исемендәге "Герой партаһы" астыҡ. Ҡышҡы Паралимпия уйындары чемпионы, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Ирек Зарипов, район хакимиәте башлығы Андрей Иванюта менән осрашыу ойоштороҡ. Сараға районның Шығай, Туҡан, Инйәр, Сермән, Тирлән, Тимер юл, Мәхмүт, Абҙаҡ, Ҡаһарман, Исмаҡай һәм Ломовка мәктәптәренән уҡыусылар килде. Улар легендаға әүерелгән замандашыбыҙ менән күҙгә-күҙ ҡарап аралашты.

Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам ойоштораbыҙ. Мәктәп уҡыусылары ҡалай банкалар йыйҙы, ауыл халҡы менән берлектә окоп шәмдәре эшләнек. Бынан тыш, маскировка селтәре, бейәләй-ойоҡбаштар бәйләп ебәрҙек. Уҡыусылар һалдаттарға хаттар яҙҙы, талисмандар, бетеү эшләне.

Заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, хәҙер дәресте бер китап менән генә үткәреү мөмкин түгел. Уҡытыусыға заман менән бергә атларға, заманса технологиялар менән эш итә белергә кәрәк. Бынан тыш, улар атаәсәләр менән эшләй, ул арала төрлө сараларҙа, конкурстарҙа ҡатнашырға, отчеттар эшләп өлгөрөргә тейеш. Был йөнәттән, уҡытыусы ғына "тейеш" булып ҡалмаһын, йәмғиәттә уҡытыусыларҙың абруйын күтәреү буйынса ла эштәр эшләнһен ине.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# КАДРҘАР ТӘРБИӘЛӘҮ МӨҺИМ!

**Башҡортостан Республикаһында тәүге "АСТ" электр селтәрҙәре компанияһы ярҙамында мәктәп уҡыусыларының физика буйынса асыҡ олимпиадаһы үтте, унда Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән 1000-дән ашыу уҡыусы ҡатнашты. 200-ҙән ашыу еңеүсе һәм призер физика өлкәһендә юғары белем кимәлен күрһәтә алды.**

- Бындай сараларҙы үткәреүҙең мөһимлеге мәктәп, юғары уҡыу йорто һәм предприятие араһында бәйләнештәрҙе нығытыуға ҡайтып ҡала. Күп кенә уҡыусылар өсөн олимпиадаларҙа ҡатнашыу мәктәптән университетҡа күсеү осоро, уҡыу эшмәкәрлегендә төп йүнәлештәрҙәге предметтарҙы өйрәнеүгә стимул булып тора. Мәктәп, юғары уҡыу йорто һәм предприятие араһында үҙ-ара эш итеү мөмкинлектәре лә мөһим аспект. Һис шикһеҙ, уҡыусыларға артабан белем алыу һәм карьера яһау өсөн үҙ белемдәрен, оҫталыҡтарын күрһәтеү һәм файҙалы тәжрибә туплау мөмкинлеге лә, - тип һөйләне Башҡортостан Республикаһының мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин.

Олимпиадала 7-11-се класс уҡыусылары ҡатнашты. Уларҙың бөтәһенә лә Физика буйынса асыҡ олимпиадала ҡатнашыусы сертификаты һәм киләһе йылға ла олимпиадаға саҡырыу тапшырыласаҡ, ә еңеүселәр һәм призерҙар грамоталар, смартсәғәттәр, пауэрбанктар һәм башҡа призлар менән бүләкләнәсәк.

Электр энергетикаһы - иң мөһим тармаҡтарҙың береһе, уның техник торошона, ҡулланыусыларҙың электр селтәрҙәренә ваҡытында тоташа алыуына һәм уларҙы конкурент хаҡы буйынса энергия менән тәьмин итеүгә Рәсәйҙәге йәшәү сифаты, илдең инвестициялар йәлеп итә алыу мөмкинлеге һәм, ғөмүмән, милли иҡтисадтың үҫеш кимәле бәйләнгән.

- Рәсәй электр энергетикаһы компаниялары тарафынан хәл ителгән мәсьәләләр араһында квалификациялы кадрҙар әҙерләү һәм тәрбиәләү беренсе урында тора. Был айырыуса ҡулланыусылар менән тығыҙ бәйләнештә эшләргә тейеш муниципаль электр энергетикаһы өсөн актуаль һорау. Беҙҙең компания бының мөһимлеген үҙ тәжрибәһендә аңлап, кадрҙар резервын ойоштороrға тырыша, - тип һөйләне "АСТ" компанияһының директорҙар советы рәйесе Андрей Зензин.

Әйткәндәй, компания бынан алда Өфөнөң Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһы өсөн интерактив ҡорамал һатып алды, 2,8 миллион һумдан ашыу аҡсаға профилле класты ремонтланы. Шулай уҡ ҡатнашыусылар өсөн олимпиада бушлай үткәрелде, ә онлайн-платформа ойоштороу буйынса бөтә сығымдарҙы һөнәри йүнәлеш эше сиктәрендә профилле ойошма үҙ өҫтөнә алды.

Олимпиаданы Өфө фән һәм технологиялар университеты, Өфөнөң Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһы һәм "Технология системаларын автоматлаштырыу" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт ойоштороҙо.

Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Тарамыш тартылғанда

❖ Ҙур булмаған 1 баш һуғанды ваҡ ҡырғыстан үткәрергә. Килеп сыҡҡан буткаға шул уҡ күләмдә шәкәр ҡомо өҫтәргә һәм иҙгәнсе болғатырға. Ҡатышманы целлофанға һалып, ауыртҡан ерҙе ҡапларға. Иртәнсәккә һыҙланыу баҫылырға тейеш.

❖ Тарамыш тартылғанда һәм быуындар сыҡҡанда йомортҡа һарыһы һәм һарыҡ йөнө ярҙам итә. Ауыртҡан урынға йомортҡа һарыһын һөртөргә, тирә-яғына уратып һарыҡ йөнөн (йыуылмаған булһа, яҡшыраҡ) һалып сығырға һәм бинт ярҙамында нығытып бәйләргә. Бәйләмәсте тәүлегенә 1 тапҡыр яңыртырға. 2-3 көндән хәл яҡшырыр.

## Кипкән тире

❖ Тире кибеп, ярылып торған осраҡта кишерҙе ҡырғыстан үткәреп, 2 ҡалаҡ картуф оно һәм 1 йомортҡа һарыһы ҡушып, килеп сыҡҡан ҡатышманы биткә һыларға. 20 минуттан һуң йылы һыу менән йыуып төшөрөргә. Был сараны йыш ҡулланырға мөмкин.

❖ Кипкән бит тиреһенең торошон яҡшыртыу өсөн 1 ҙур булмаған помидорҙың йомшағын ҡырғыстан үткәреп, бутҡа килеп сыҡҡансы картуф крахмалы ҡушырға һәм 4-7 тамсы үҫемлек майы өҫтәргә. Яҡшылап бутағас, биткә һылап, 15-20 минут тоторға, аҙағынан ҡайнатылған һыу менән сайырға. Был рәүешле 10-15 тапҡыр битлек эшләгәндән һуң, бит тиреһе яҡшыра.

❖ Тигеҙ өлөштә бал һәм һөттө (йә ҡаймаҡ) бутап, биткә һөртөргә. Был уны йомшарта.

❖ 100 грамм бал, 2 йомортҡа һарыһы, 100 мл үҫемлек майын бергә ҡушып болғарға һәм утта тотоп йылымыслатырға. Битлекте бер нисә ҡат итеп һөртөргә. Аҙаҡ йүкә төнәтмәһенә сылатылған мамыҡ киҫәге менән һөртөп таҙартырға.

## Сәс ҡауаҡлаһа

❖ 2-шәр ҡалаҡ кесерткән япрағы һәм үгәй инә үләне алып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Ҡайнап сыҡҡас, төнәтергә һәм һөҙөргә. Шуның менән сәсте сайҡатырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



## БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Сәфәр ауылы. Оҙонлоғо 44 см, өҫкө киңлеге 20 см, аҫҡы киңлеге 29 см. Биҙәүестә барлығы 278 элемент. Шуларҙың 157-һе - көмөш.



**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Рысай ауылы. Оҙонлоғо 44 см, өҫкө киңлеге 18 см, аҫҡы киңлеге 29 см, ауырлығы 1202,2г. Биҙәүестә барлығы 244 элемент. Шуларҙың 24-е - көмөш.



**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Сәфәр ауылы. Оҙонлоғо 38,5 см, өҫкө киңлеге 18 см, аҫҡы киңлеге 29 см, ауырлығы 1199,5г. Биҙәүестә барлығы 312 элемент. Шуларҙың 53-ө - көмөш.



**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# КИТАП ТАНТАНА ИТТЕ



**Баш ҡаланың Совет майҙанында донъяны гөрләтеп, өс көн буйы Китап байрамы уҙҙы. Тәүге көндә Республика Башлығы Р. Хәбировтың тәҡдиме менән Өфөгә ҡайтарылған Ҡөрьәндең күсермәһен тапшырыу тантанаһы үтте, был ваҡиға "Китап-байрам" халыҡ-ара китап йәрминкәһен асҡан мәлгә тура килтереп ойошторолғайны.**

Әлеге изге яҙма - Усман Ҡөрьәненең алты боронғо ҡульъяҙма күсермәһенең береһе. Ә тарихы шулайыраҡ: 20-се быуат башынан алып 1923 йылға тиклем республикала өсөнсө хәлиф - Усмандың ҡаны менән һуғарылған изге китаптың төп нөсхәһе һаҡлана. Изге китаптың артабанғы яҙмышы Үзбәкстан менән бәйле булһа, хәҙер Башҡортостанға алтын хәрефтәр менән теғелгән ҡульъяҙманың күсермәһе ҡайтарылды: ул БР Милли музейында һаҡланасаҡ, һуңынан Евразия күсмә цивилизациялар музейына тапшырыласаҡ. "Беҙ Башҡортостандың ҡайтанан Усман Ҡөрьәненең күсермәһенә эйә булыуына шаһитбыҙ. Мосолмандар бының беҙҙең өсөн ниндәй юғары намыҫ эше һәм яуаплылыҡ икәнлеген белә", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

- Бөгөн Китап байрамының башында бөтә китаптарҙың, бөтә яҙмаларҙың әсәһе тора. Ошо ваҡиғаны Ҡөрьән менән бәйләүебеҙ бик ҡыуандыра. Ҡөрьән - китаптар араһында рекордсмен: ул 3 миллиардтан ашыу күсермәлә таралған, донъяның бөтә телдәренә лә тиерлек тәржемә ителгән, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Айнур хәҙрәт Бирғәлин.

Сарала шулай уҡ Рәсәй Президенты ярҙамсыһы, Рәсәй тарих белеме буйынса ведомство-ара комиссияһы рәйесе Владимир Мединский һәм башҡа саҡырылған ҡунаҡтар ҡатнашты.

Халыҡ-ара китап байрамы, бер һүҙһеҙ, рухи-мәҙәни донъяға оло ваҡиға булып инде, ул авторҙарға, китап магазиндарына, нәшриәттәргә, китапханаларға, әҙәбиәт уҡыусыларға тәжрибә уртаҡлашыу һәм китап таратыу буйынса яңы мөмкинлектәр асты. Совет майҙанында әҙиптәр, әҙәбиәт белгестәре менән аралашыу мөмкинлеге булдырылды. Беларусь Яҙыусылар союзы рәйесе урынбаҫары Елена Стельмах: "Беҙ бөгөн һүҙ һәм һүҙ дипломатияһы тураһында һөйләшәбеҙ. Башҡортостан яҙыусылар союзы менән килешеү төҙөп, әҙәби дуҫлыҡты тағы ла нығытасаҡбыҙ. Был килешеү яңы китаптар нәшерләүгә, мәҙәниәттәребеҙҙең берберեһенә йоғонтоһон үҫтерергә булышлыҡ итәсәк, сөнки бары тик китап ҡына һәр халыҡты, уның йолаларын, булмышын һәм асылын нығыраҡ аңларға ярҙам итә", - тип билдәләне.

Халыҡ-ара китап йәрминкәһе сиктәрендә Бөтә Рәсәй сәсәндәр фестивале үтеүен дә әйтергә кәрәк. Дағстандың атҡаҙанған артисы Шемшир Магомедов унда Башҡортостанға арналған шиғырын уҡып ишеттерҙе. Был Башҡортостанға арналған берҙән-бер шиғыр булманы, әлбиттә, ҡаҙаҡ яҙыусыһы, тәржемәсе, нәшриәт директоры Саят Ҡамшыгергә "Ете ҡыҙ" һәйкәлен күреү шулай уҡ ныҡ тәьҫир итә, һәм кисерештәр шиғри юлдар булып теҙелә. Ул үҙенең сығышында ижадында Башҡортостанға арналған айырым тематика буласағын әйтте.

Һис шикһеҙ, иң ҙур яңылыҡтар төрлө республика, илдәрҙән килгән нәшриәттәрҙең тәжрибә уртаҡлашыуы, ундағы сағыу проекттарҙы киңерәк донъяға сығарыу һымаҡ етди мәсьәләләр хаҡында һөйләшеүҙәр менән бәйлелер. Рәсәй Китап нәшриәтселәр ассоциацияһы президенты Константин Чеченев "Түңәрәк ҡор"ҙоң модераторы булараҡ сығыш яһаны. Татарстан Китап нәшриәтенең директоры Илдар Сәғдәтшин Ҡаҙанда уңышлы эшләп килгән төрлө осрашыуҙар өсөн ойошторолған әҙәбиәт кафеһы һәм әҙәбиәт рестораны тураһында һөйләне. Был ҙур сараның йомғаҡлау өлөшө нәшриәттәр араһында килешеү төҙөүгә арналды. Ҡыҫҡаһы, бынан һуң Башҡортостан Яҙыусылар союзы һәм Беларусь Республикаһы союздары, шулай уҡ "Китап" һәм "Беларусь" нәшриәттәре, "Китап" һәм "Тәғлим" (Ҡырғыҙстан), "Китап" һәм "Алтын цака" (Ҡаҙағстан) нәшриәттәре араһында килешеү нигеҙендә мәҙәни хеҙмәттәшлек нығынасаҡ, тип билдәләнде.

- Килешеү беҙҙең өсөн ҙур әһәмиәткә эйә, сөнки был авторҙарыбыҙҙы халыҡ-ара киңлеккә сығарыу тигән һүҙ. Беларусь Республикаһы менән ижади хеҙмәттәшлегебеҙ яҡшы дауам итә. Ундағы РФ Сауҙа вәкиллеге эргәһендәге Башҡортостан Республикаһы вәкиле Константин Климинға рәхмәт, уның ярҙамы ҙур булды, - тине З.Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте директоры вазифаһын башҡарыусы Эльмира Хәйретдинова.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Айгиз Баймөхәмәтов Беларусь яҙыусыларының антологияһы - беҙҙә, ә башҡорт яҙыусылары антологияһы Беларусь Республикаһында нәшерләнәсәген әйтте. "Алдағы байрамда уның исем туйы ла үтеүе ихтимал", - тип өҫтәне.

БР мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова билдәләүенсә, китап йәрминкәһендә - 206 нәшриәт, ә төрлө сараларҙа - күргәҙмәме, конкурстамы - Рәсәйҙең 16 төбәге һәм алты сит ил ҡатнашҡан. Китап йәрминкәһенә 162,5 мең Өфө халҡы һәм ҡунаҡтар килгән. Шәхси букинистар, китап магазиндары өҙлөкһөҙ эшләне. Бында ҡайҙа ниндәй китап сығарыла, ниндәй йөкмәткегә өҫтөнлөк бирелә, ҡайҙа ниндәй хаҡтар - бөтәһе тураһында ла тулы мәғлүмәт алырға була ине. Өс көн эсендә 52 меңдән ашыу китап һатылған, бигерәк тә нәфис һәм уҡыу-методик әҙәбиәткә ихтыяж ҙурлығы асыҡланған. Модель китапханалары, музейҙар яҙыусылар, рәссамдар, драматургтар, блогерҙар, сәнғәт белгестәре, артистар, кинематографистар, журналистар, психологтар, аш-һыу оҫталары - ҡыҫҡаһы, майҙансыҡтар гөрләп торҙо, һәр ҡайһыһы тураһында сәғәттәр буйы һөйләргә булыр ине.

Ҡырғыҙстан Мәғариф министрлығының мәктәп әсбаптары һәм китап сығарыу сәйәсәте бүлеге начальнигы Ҡыялбек Аҡматов әҙәбиәтте балаларҙың уҡыуы, Айгиз Баймөхәмәтовтың китаптары үҙҙәрендә ете тапҡыр нәшер ителеүен әйтте.

- Ҡырғыҙ теләндә ике китап баҫтырып сығарҙыҡ: "Көчө балдары" һәм "Жомоксуз балалыҡ". Һәр береһе меңәрләгән дана менән сыҡты һәм шунда уҡ бестселлер булып китте. Мәктәптәр һәм юғары уҡыу йорттары был китап буйынса конференциялар, конкурстар ойоштора. Тимәк, балалар һәм үҫмерҙәр китап уҡымай тигән фекер дөрөҫ түгел! - ти Ҡыялбәк Аҡматов. Китаптар алмашыу, әҙиптәр менән таныштырыу йәһәтенән киләсәктә лә ҙур эштәр эшләнәсәк.

Китап йәрминкәһе эсендә "Урал батыр ерендә йыл китабы" тип аталған конкурс үтте. Унда төрлө номинацияларға 80-дән ашыу ғариза ҡабул ителгәйне. Шулай уҡ илленән ашыу ижадсы ҡатнашҡан драматургтар семинарының уңышлы үтеүен әйтергә кәрәк. Унда "Современная драматургия" журналының баш мөхәррир урынбаҫары, танылған драматург (150-нән ашыу пьесаһы төрлө илдәрҙә сәхнәләштерелгән) Родион Белецкий етәкселегендә айырым сценарий авторҙары өсөн "Сценарий бүлмәһе" тип аталған интенсив курстар үҙенә йәш ижадсыларҙы ылыҡтырҙы. Йәнә лә драматургтар Владимир Жеребцов һәм Наталья Мошина оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙе.

Китап байрамын ябыу тантанаһында Республика Башлығы Радий Хәбиров һәм Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова сығыш яһанылар.

- Был сараны ябып, алдағы йылда майҙың һуңғы көндәрендә ошо уҡ майҙанда үтәсәк байрамға саҡырам, ул тағы ла ҙурыраҡ, сағыуыраҡ буласаҡ. Беҙҙең ил өсөн еңел булмаған көндәрҙә тап ошондай яҡтылыҡ, яҡшылыҡ, гүзәллек тураһында һөйләшеү бик-бик кәрәк, - тине республика Башлығы.

Эйе, өс көн буйы майҙанда интерактив форумдар барҙы, эшлекле осрашыуҙар үтте, авторҙар менән аралашыуҙар дауам итте, улар сығыштарында өҙөклөк булманы. Иң мөһиме, барыһы ла хистәрҙе нескәртер, кисерештәрҙе яңыртыр ғәжәйеп бер донъяға саҡырған матур китап донъяһы эсендә йәшәнеләр.

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА.**

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Дүртенсе бүлек. Көньяҡ Урал гун эпохаһында



### Дала зонаһы күскенселәре. Юэчжи

Беҙҙең эра сиктәрендә Көньяҡ Урал ҡәбиләләре менән юэчжи этнонимы аҫтында билдәле булған, Үҙәк Азияла көн иткән өсөнсө күп һанлы ҡәбиләләр төркөмө тығыҙ бәйләнештә була. Тикшеренеүселәр араһында ошо халыҡтың этносәйәси тарихы буйынса бер ни тиклем камилдә фекер айырымлығы бар, әммә уларҙың күбеһе б.э. тиклем VII-VI быуаттарҙа юэчжилар Эске Монголияла һәм уға йәнәш булған Алтай тауҙары итәгендә, күмәк ҡәүем булып, киң арауыҡта таралып йәшәгән, тип иҫәпләй. С.И. Руденконың һәм уның ҡарашы яҡлыларҙың фекеренсә, Алтай тауҙарының бейек түбәләрендәге мәңгелек туңлыҡ шарттарында һаҡланып ҡалған пазырык тибындағы бай ҡурғандар юэчжиларҙыҡы булған. Ҡытай сығанаҡтарына ярашлы, Юэчжи державаһының сәскә атыуы б.э. тиклем V-III быуаттарға ҡараған, уларҙың сәйәси хакимлығын хатта Үҙәк Азия гундары ла танырға мәжбүр булған. Юэчжиларҙың һәм гундарҙың бер-береһенә ҡаршы тороуы хаҡында бөйөк Ҡытай тарихсыһы Сыма Цань бик аныҡ итеп яҙып ҡалдырған: "Элекке замандарҙа (юэчжилар) бик ҡеүәтле булған һәм сюннуларға мыҫҡыллы мөнәсәбәт менән ҡараған". Ҡытай авторҙары ошо дәүерҙә йәшәгән юэчжиларҙың ҡыҙыҡлы ғөрөф-ғәҙәттәре хаҡында мәғлүмәт ҡалдырған. Үҙҙәренә буйһонорға теләмәгән юлбашсыларҙы үлтереп, уларҙың баш һөйәктәренән алтынланған кәсәләр яһағандар. Ошоға бәйләп, Алтайҙың бер пазырык ҡурғанында табылған ат йүгәнен иғтибарға алырға була: ул ағастан яһалған, алтынланған кеше баштары менән биҙәлгән, быны тикшеренеүселәр киҫеп алынған кеше баштарының "моделе" итеп ҡарай.

Б.э. тиклем III быуат аҙаҡтарында юэчжиларҙың элекке ҡеүәте бүҫкәрә бара, шул уҡ ваҡытта гундар дәүләте көс йыя, ул шаньюй Маодун хакимлыҡ иткәндә сәскә атыу осорон кисерә. Хәҙер инде улар алыштарҙа бер нисә тапҡыр юэчжилар ғәскәрен тар-мар итә, һәм уларҙың ролдәре алышына: гундар юэчжиларҙың киҫеп алынған баштарынан алтынланған һауыттар яһай башлай.

Б.э. тиклем II быуат уртаһында юэчжилар, гундарҙан (сюнну) тамам еңелеп, үҙҙәренең тарихи ватанын - Алтай тауҙары бассейнын ташлап китергә мәжбүр була. Уларҙың иң күп һанлы төркөмө союздаш ҡәбиләләр менән көньяҡҡа йүнәлә. Юэчжилар, Усунь һәм Кангюй илдәре аша үтеп, Бактрия дәүләтенә (Урта Азияның көньяҡ тарафтары, Афғанстан, Көнсығыш Иран) баҫып инә, унда улар урындағы элитаны еңә һәм үҙ власын урынлаштыра. Һөҙөмтәлә, һис көтмәгәндә, күскенсе ҡәүем бай һәм үҫешкән ҡала мәҙәниәте булған илгә хужа булып китә.

Был саҡта юэчжиларҙың икенсе бер төркөмө Кангюй иленә (Һырдаръя бассейны һәм Арал буйы) үтеп инә. Ҡытай сығанаҡтарында ошо ваҡиға тураһында ошолай яҙылған: "Кангюйҙа хаким асылда Вынь тип атала; юэчжи йортонан сыҡҡан, тәүҙә ул Цилянь-шань һыртының төньяғында Чжаову ҡалаһында көн иткән; әммә хундарҙан еңелгәндән һуң Һуған (Луковые) тауҙары аша көнбайышҡа сыға һәм үҙ батшалығын булдыра". Ҡытай сығанаҡтары комментаторы Ю.А. Зуев б.э. тиклем I быуатта уҡ Кангюй менән юэчжи мөхитенән сығыусылар идара иткән, тип иҫәпләй. Бер сығанаҡта был хаҡта ошондай һүҙҙәр бар: " Кан дәүләте (Кангюй. - **Н.М., А.С.**) - Вень нәҫеле ғаиләһенән, ул юэчжи кешеһе". Тимәк, көнбайышҡа табан миграция ваҡытында юэчжилар Кангюйҙа власты яулап алыуға өлгәшә һәм Һырдаръя буйы һәм Арал буйы далалары ҡәбиләләренең этносәйәси тормошона әүҙем ҡушылып китә.

Был ваҡиға Көньяҡ Урал халҡы тормошонда ла ҡайтауаз кеүек сағылыш таба. Беҙҙең эраның тәүге быуаттарында (I - III бб.) Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең мәҙәниәте асыҡтан-асыҡ ҡатнаш характерҙа була: унда, бер яҡтан, көньяҡтың гун-усунь ҡәбиләләре ҡомартҡыларына, икенсе яҡтан, элекке быуаттарҙың урындағы дах-массагет ҡәбиләләре вариҫтарына хас булған һыҙаттар бик аныҡ билдәләнә. Быға Һаҡмар йылғаһы ярындағы Темәс ҡурғаны һәм башҡа ошондай ҡомартҡылар материалдары дәлил. Бында бейек булмаған ер өйөмдәре аҫтындағы күмәк кеше ерләнгән ҙур һәм тәрән ҡәберҙәрҙә Көньяҡ Урал өсөн ғәҙәти булмаған әйберҙәр: көмөштән ҡойолған массив "ҡытай көҙгөләре", бронза ҡыңғырауҙар, шул иҫәптән ике йөҙлө кеше һүрәттәре булғандары ла, ҡалҡансығында ҡуян һәм башҡа йәнлектәр һынландырылған балдаҡ-мисәттәр, муйынсаҡтар, фибулалар, Үҙәк йә иһә Урта Азияла ҡыҙыл балсыҡтан яһалған һауыт-һаба табылған.

Ошо ҡәберлектәрҙә урында етештерелгән әйберҙәрҙең булмауы, Ҡыҙыл-Адыр тибындағы ҡомартҡылар табылдыҡтары бында көньяҡтан килгән, асылда гун-кангюй сығышлы гун ҡәбиләләре менән бәйле. Улар Ырымбур өлкәһенең Ҡыҙыл-Адыр ауылы янындағы мәмерйәлә II - IV быуаттарға ҡараған ҡәберлектән алынған әйберҙәр: бронза ҡаҙан, тимер уҡ башаҡтары, йәйәнең һөйәк ҡапламалары, ҡылыс һәм башҡа предметтарҙан тора. Улар араһында айырыуса бронза ҡаҙан, тимер уҡ башаҡтары ҡыҙыҡлы, уҡтарҙың ҡаурый беркетелгән нигеҙенә тишекле һөйәк муйынсаҡ мәрйендәре беркетелгән була, улар уҡ осоп барғанда йәмһеҙ тауыш сығарған. Был әйберҙәрҙе Үҙәк Азия өсөн типик тип әйтергә була, һәм уларҙы бында тап гун ҡәүемдәре йәшәүенә дәлил итеп ҡарап була. Әйткәндәй, тикшеренеүселәр гундарҙың көнбайышҡа хәрәкәтен Ҡаҙағстан һәм Көньяҡ Урал территорияһында, Темәстә табылғаны кеүек үк, көмөштән ҡойолған көҙгөләр таралыуы менән бәйләй. Гун тибындағы ҡаҙандар Көньяҡ Уралдың башҡа пунктгарында ла табылған. Ҡабатлап раҫларға була: Темәстекендәге ише көньяҡта яһалған күп предметтар (гун көҙгөләре, һырғалар, ҡаҙандар һәм башҡа әйберҙәр) беҙҙең эраның тәүге быуаттарына ҡараған ҡурғандарҙа, шул иҫәптән Көньяҡ Урал арьяғында ла табыла.

Шулай ҙа II - IV быуат ҡомартҡыларының төп өлөшөн ябай ғына ҡәберҙәр өҫтөндәге ҙур булмаған ер ҡурғандар тәшкил итә, бында үлгәндәрҙе бынан алдағы быуаттарҙа йәшәгән дах-массагет ҡәбиләләре өсөн традицион булған йола һәм әйберҙәр йыйылмаһы менән ерләгәндәр. Бындай предметтар иҫәбендә яҫы һәм түңәрәк төплө, ҡулдан һылап яһалған һауыттар, хәнйәрҙәр, ат йә иһә һарыҡ һөйәктәренән торған ит ризыҡтары ҡалдыҡтары һәм башҡа деталдәр бар. Был материалдар беҙҙең эра сиктәрендә һәм уның тәүге быуаттарында Көньяҡ Урал далаларында һәм тау алды зонаһында йәшәүсе халыҡтың тулыһынса алышынмауын асыҡ аңлата. Әммә яңы шарттар йоғонтоһонда уларҙың мәҙәниәте һиҙелерлек үҙгәрештәргә дусар була: уларҙың ҡомартҡыларында йыш ҡына Ҡытайҙа яһалған көмөш көҙгөләр осрай; мәйеттәрҙе көньяҡҡа ҡаратып күмеү төньяҡҡа ориентациялау менән алышына башлай. Бындай яңылыҡтар Көньяҡ Урал ҡәбиләләрендә кешенең үлеме һәм теге донъялағы тормошо хаҡындағы ҡараштарының үҙгәреүен сағылдыра.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ*

# ЕГЕРМЕНСЕ БЫУАТ БАШЫ ТЕЛЕФОНЫ

**1928 йылда сығарылған телефон Башҡортостандың Милли музейы - Дүртөйлө тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейында ДИКМ ОФ 834 иҫәп һаны аҫтында һаҡлана, Рәсәйҙең Музей фонды дәүләт каталогына индерелгән.**



Стационар өҫтәлдең бейеклеге 33 сантиметр. Ул башлыса "Красная Заря" дәүләт ойошмаларында ҡулланылған. Телефондағы "ЦБ" аббревиатураһы "Үҙәк батарея" тигәнде аңлатҡан, сөнки был моделдәр телефон станцияһының үҙәк батареяһынан туҡландырылған.

Телефондың ағас ҡумтаһы эсендә индуктор урынлаштырылған. Шылтыратыу өсөн телефон трубкаһын алып, индуктор тотҡаһын бер нисә тапҡыр бороорға кәрәк булған.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Шайморатовсылар - Гомель-Речица операцияһында

13-14 ноябрҙә гв. майоры М.Г. Маркарян командалыҡ иткән 62-се гв. полкы Смогорино ауылын алыр өсөн алышҡа инә. Смогорино немецтар өсөн үтә мөһим булған терәк пункттарҙан һанала, сөнки уның аша Овруч - Речица - Гомель шоссе юлы уҙа. Ауылдан төньяҡтараҡ Калинковичи - Гомель тимер юлы уҙа. Немец командованиеһы, юғалтыуҙарға ҡарамай, нисек итеп булһа ла беҙҙең частарҙы сигенергә мәжбүр итергә уйлай. Дошман автоматсылары цептары, бер-бер артлы күтәрелә тороп, беҙҙең позицияларға яҡын уҡ килеп етә. Шул саҡта алғы һыҙыҡтан уларға беҙҙең эре калибры ДШК пулеметтарынан көслө ут асыла. Тәжрибәле хәрби офицер Мисак Маркарян алыштың иң ҡыҙыу мәлдәрендә яугирҙары менән бергә була, ошо көслө рухлы командир уларҙы үҙ өлгөһөндә ябырылып килгән дошманға ҡаршы тора алып була икәненә инандыра ала. Был осраҡта ла ул пулемет артына үҙе ята, мәргән атып, яҡын уҡ килеп еткән дошманды ҡырып һала. Совет командованиеһы уның ҡаһарманлығын юғары баһалай: Мисак Гевандович Маркарян Ленин, дүрт Ҡыҙыл Байраҡ, III дәрәжәләге Суворов, Александр Невский, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары, бик күп боевой миҙалдар менән бүләкләнә.

Барса эскадрондар ҙа, дошман улар биләгән позицияларға яҡынайыу менән, көслө ут аса. Немецтарҙың атакаһы кире ҡағыла. Төн уртаһында немец автоматсылары яңы атакаһын башлай, улар беҙҙең яугирҙарыбыҙға ҡара яу булып ябырыла. Беҙҙең окоптарға етергә ни барыһы 20 -30 метр ҡалғас, немец һалдаттары өҫтөнә гранаталар яуа, дошмандың байтағы йә үлеп, йә яраланып, ергә ауа. Ә 1-се эскадрон контратакаға күтәрелә. Бөтөнләйгә ҡаушап ҡалған йөҙҙән ашыу немец һалдаты әсиргә алына. Смогорино ауылы азат ителә.

15 ноябрҙә армия командованиеһы бойороғо буйынса беҙҙең атлы корпус үҙе биләгән оборона һыҙығын 18-се уҡсы корпус частарына тапшыра, улар үҙҙәре Тишовка ауылынан төньяҡ-көнсығыштараҡ булған урманда туплана. 16 ноябрҙә корпус частары Короватичи, Красная Дубрава ауылдарын, Бабичи тимер юл станцияһын дошмандан азат итә. Беҙҙең атлылар Речица-Калинковичи шоссе юлын киҫә, дошмандың Гомелдән резерв ғәскәрен килтереү юлы ябыла, ә был 48-се һәм 65-се армия соединениеларына Речица ҡалаһына уңышлы һөжүм итеү мөмкинлеген бирә. 1943 йылдың 18 ноябрендә Речица ҡалаһы дошмандан азат ителә. 7-се гвардия атлы корпусының личный составына Юғары Баш командующийҙың рәхмәте белдерелә.

19 ноябрҙә 16-сы гв. атлы дивизияһы 15-се гв. атлы дивизияһының 55-се гв. атлы полкы менән берлектә Кобылово ауылы йүнәлешендә һөжүм итә, дошман ошо ауылды ҡалдырып китергә мәжбүр ителә. Артабан дивизия Василевичи - Обруч тимер юлының шоссе юлы менән киҫешкән тапҡырында урынлашҡан Защебье торлаҡ пункты йүнәлешендә хәрәкәт итә. Защебье ауылы дошмандың ошо тарафтағы терәк пункты булып, немец командованиеһы уға айырым иғтибар бүлә. Дошман ғәскәренә ярҙамға танкылар килтерелә, алыш ике тәүлек буйына дауам итә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

# УҠЫТЫУСЫ,

## статусын аңлау-таныу

**Тормош күп яҡлы һәм ул даими үҙгәреп тора. Һәр йылыбыҙ, мәҫәлән, ниндәй ҙә булһа исем аҫтында үтә. Быйылғы Педагог һәм остаз тип нарыҡланған йыл иһә йәмғиәтебеҙҙең уҡытыусы һөнәре статусын, уның айырым дәрәжәгә эйә булыуын таныуы ул. Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаттары - филология фәндәре докторы, профессор Фәнил Тимерйән улы КҮЗБӘКОВ һәм филология фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Фәнзил Бүләк улы САНЪЯРОВ менән ошо хаҡта әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Тик бер генә Указ ҡабул итеп, йылды уҡытыусы менән остаздарға бағышлап ҡына был йүнәлештәге, был өлкәләге проблемаларҙы хәл итеп булырмы икән?**

**Ф. Күзбәков:** РФ Президенты В.В. Путин Указына ярашлы, 2023 йылды Педагог һәм остаз йылы тип иғлан итеү ҡарарын тормош талабы, заман талабы тип ҡабул итергә кәрәк. Сөнки болғауыр 90-сы йылдар солғанышында донъяла алдынғы иҫәпләнгән, ысынында ла алдынғы булған совет мәғариф системаһы яңы стандарттар флагы аҫтында емертелде. Алмашҡа Көнбайыштың рациональ иҫәп-хисапҡа ҡоролған системаһы индерелде. Ижади фекерләү урынына тест һорауҙарына уйһыҙ-ниһеҙ, ныҡлап, нигеҙле белмәйенсә, тоҫмаллап ҡына, уйын урынына күреп, теге йәки был һанға төрткөләп кенә сығыу китте. Нисек тә булһа Берҙәм дәүләт имтиханын йырып үтергә тигән генә маҡсат өҫтөнлөк алды.

Ә ошоға тиклем белем биреүҙән айырылғыһыҙ булған тәрбиә мәсьәләләре тотошлай тиерлек онотолдо, дөрөҫөрәге, үҙ ағышына ҡуйылды һәм энтузиастар, йөрәге ҡушыуы буйынса ғына эшләгәндәр ҡарамағында ҡалды. Бөгөн, ҡыуанысҡа күрә, иң юғары етәкселек кимәлендә тәрбиә эшенең ни тиклем мөһим булыуын аңлау бара. Юҡһа, рациональ белемгә эйә булһаң, бөтә мәсьәләләр ҙә еңел хәл ителәсәк, тигән ҡараш Хөкүмәт кимәлендәге сәйәсәткә әйләнгәйне бит. Эйе, был өлкәләге проблемаларҙы хәл итеү өсөн ныҡышмалы, дауамлы эш кәрәк. Уҡытыусының был һөнәргә яуаплы ҡарауы ла, халыҡтың уны тейешенсә күтәрмәләй белеүе лә бик мөһим. Эш хаҡы ла, әлбиттә, йөҙгә оят килтерерлек булмаһын! Указда уҡытыусының, тәрбиәсе-остаздың махсус статусын, юғары дәрәжәгә эйә булыуын аңлау-таныу йылы булһын, тигән ҡараш үткәрелә. Был ысынында ла бик кәрәкле йүнәлеш. Бит элек-электән халыҡ уҡытыусыны ныҡ юғары баһалаған. Балаһын мәҙрәсәгә илткәндә тикмәгә генә: "Ите һиңә, һөйәге миңә", - тип һүҙ уйнатмаған: ғәзиз балаһын, белемле булһын тип, ышанып тапшырған.

**Ф. Санъяров:** Был Указ алданыраҡ ҡабул ителһә лә һәйбәт булыр ине. Әммә беҙ алдараҡ икенсе маҡсат ҡуйғайныҡ, һәм шул арҡала Болон системаһына инеп киттек. Ә беҙ бит уға әҙер түгел инек. Ул, ғөмүмән, беҙҙең менталитетҡа, Рәсәй менталитетына бөтөнләй тап килмәгән әйбер ине. Магистратураға конкурс нигеҙендә инәләр. Беҙгә был фән менән шөғөлләнер өсөн кәрәк, тип аңлаталар ине. Ә ҡалғандар, магистратураға инмәгәндәр, өс-дүрт курс белем нигеҙендә генә тормош диңгеҙенә инеп китергә тейештәр. Бакалавр белеме етәксе булырға мөмкинлек бирмәй. Тимәк, киләсәге булмаған системаға ҡоролған белем алыу ине был, ләкин бөтә донъя шуның менән йәшәй. Беҙ ҙә шалтырауыҡлы һүҙҙәргә ышандыҡ. Ә бит заманында был системаға иң атаҡлы ғалимдарыбыҙ ҡаршы сыҡты. Мәҫәлән, МДУ ректоры, академик Виктор Садовничий ризалашманы, мин уның яҙғандары менән танышып барҙым. Владимир Путиндың Мөрәжәғәтнамәһендә лә: "Беҙгә хәҙерге системаны совет системаһындағы мәғариф менән берләштереү кәрәк", - тип асыҡ итеп әйтелде. Ә бит инглиздәр биш-алты йыл элек үк беҙҙең совет мәғариф системаһына күскән булған.

Фәнил Тимерйән улы, һеҙ ризамы-юҡмы, мин тағы ла бер алама күренеште күҙәтәм. 90-сы йылдарҙан һәм ошо быуат башынан: "Беҙ потребителдәр әҙерләйбеҙ",- тигән һүҙҙәр йыш ишетелде. Әҙергә - хәҙер. Алма беш - ауыҙға төш. Ир-егет, әйтәйек, ҡырҡ йәшенә еткән, һаман өйләнмәй. Утыҙға еткән ҡатын-ҡыҙ һаман күңел асып йөрөй. Бына ошо мөнәсәбәттән ҡотолорға кәрәк. Юғиһә, дәүләтебеҙ именлеге, халҡыбыҙҙың киләсәге ауыр хәлгә ҡуйыласаҡ. Бөтөн нәмә хеҙмәт күрһәтеүгә генә әйләнә бара. Беҙ хәҙер профессор ҙа, доцент та, уҡытыусы ла түгел, ашханалағы ашнаҡсы һымаҡ, хеҙмәт күрһәтәбеҙ. Ә мәғариф уҡытыусы етәкселегендә студенттың - белем алыусының маҡсатлы берҙәм эшләүенә ҡоролған булырға тейеш.

**Был тәрбиә системаһының ниндәйҙер кимәлдә ҡаҡшауының һөҙөмтәһе түгелме? Ниндәй мөнәсәбәттәр һеҙҙе борсоуға һала?**

**Ф. Күзбәков:** Тормошҡа, кешеләргә ҡарата бары тик ҡоро рационализмға, меркантиль мәнфәғәттәргә нигеҙләнгән мөнәсәбәттәр ныҡ тамыр йәйеп ебәрҙе. Ни өсөн? Сөнки кеше тәрбиә, үҙтәрбиә аша ғына ысын мәғәнәһендәге шәхес булып формалаша. Был өҙлөкһөҙ, көндән-көнгә башҡарыла торған эш. Ул һис ҡасан да үҙағышына ҡуйылырға тейеш түгел. Туҡһанынысы йылдарҙа студенттарыма: "Һеҙ бында биш йыл уҡыйһығыҙ, уның тәүге йылында уҡығанығыҙҙы йыл буйы ҡабатламаһағыҙ, онотолоп юҡҡа сығасаҡ. Әгәр ҙә үҙ аллы эшләмәһәгеҙ, үҙ аллы ғилемегеҙҙе арттырыуҙы дауам итмәһәгеҙ, биш йыл эсендә алған белемегеҙ ҙә юҡҡа сыға, тигән һүҙ", - тип әйтә торғайным. Тимәк, белем алыу маҡсатлы, өҙлөкһөҙ алып барылырға тейеш. Ә ҡәҙимге әҙәм балаһы нисек? Балыҡ - тәрәнде, кеше еңелде ярата! Һәйбәтме был? Яҡшымы? Яҡшы булһа, ҡайһы яғы менән яҡшы? Әллә насармы? Ә нимәһе менән насар?



Әмир Әминевтың һуңғы сыҡҡан повесында төп герой - яҙыусы студенттарға белем бирергә, йәштәр менән эшләп алырға килә. Университет журнал сығара. Тик унда баҫылыр өсөн түләргә кәрәк. Ул аптырай, нисек инде автор мәҡәләһен үҙ иҫәбенә сығара? Киреһенсә, һеҙ миңә түләргә тейешһегеҙ, ти ул.

**Ф. Санъяров:** Әмир Әминев - тормошто иң ныҡ өйрәнгән әҙиптәребеҙҙең береһе. Күтәргән проблеманың бөтөн сәбәптәрен, нигеҙен асмайынса, әҫәр туҡымаһына индермәй. Вуз уҡытыусыһына бәйле повесына килгәндә, бөтәһен дә беҙҙән һорап, белешеп яҙған һымаҡ. Мәҫәлән, минән һораһа, тап ул яҙғанса яуап бирер инем. Ни өсөн тигәндә, минең быуындан докторлыҡ диссертацияһын яҡлай алмай ҡалған фән кандидаттары бар, сөнки улар докторлыҡҡа тотонған саҡта ғына бөтәһе лә түләүлегә әйләнде. Һәм ғалимдарҙың кәрәкмәгәнен икенсе Президентыбыҙ ап-асыҡ итеп әйтте: уҡытыусыға аҡса етмәһә, бизнесҡа китегеҙ. Нимәгә беҙгә ул тиклем ғалимдар, производствола эшләһендәр, тигән фекер яңғыраны. Һәм ғалимдарҙың мәҡәләләре түләүле була башланы. Ун биш диссертация баҫтырырға кәрәк, минең менән тел, әҙәбиәт кафедраһында эшләгән ҡайһы берәүҙәрҙең диссертация яҡлай алмай ҡалыуын шунан күрәм. Һис кенә лә һәлкәүлектән түгел. Шул яҡтан ҡарағанда, тормош тәжрибәһе һәм ысынбарлыҡтың художестволы ысынбарлыҡҡа әйләнеүе ошо әҫәр нигеҙендә бик асыҡ күренә.

**Уҡытыусы менән тәрбиәсе тигән төшөнсәләр бер-береһенә бәйләнгәнме? Әгәр ҙә шулай икән, һеҙ уны нисегерәк аңлатыр инегеҙ?**

**Ф. Санъяров:** Уҡытыусы, беренсе сиратта, үҙе тәрбиәсе. Ул һәр көн ыҫпай итеп кейенеп, үҙен сәхнәгә сыҡҡан актер итеп тоймаһа, балала матурлыҡҡа ынтылышты ҡайҙан тыуҙырһын! Уҡытыусының үҙ-үҙен тотошо ғына түгел, һәр бер һүҙе тәрбиәләй баланы. Уҡытыусы туҡтауһыҙ үҙ өҫтөндә эшләргә тейеш. Бөгөнгө ваҡытлы матбуғатты көн дә уҡып, яңы сыҡҡан әҫәрҙәр менән танышып бармаһа, заман менән бергә атламаһа, ул заман балаһын тәрбиәләй ҙә алмай. Был минең фекерем түгел: әгәр ҙә уҡытыусы уҡыуҙан туҡтай икән, ул уҡытыусы булыуҙан да туҡтай.

**Ф. Күзбәков:** Ата-әсәнең үҙенең ата-әсә булып тәрбиәләнеүе мөһим. Әйтәйек, ул башҡортса һөйләшһә лә, башҡорт теленең нимәгә кәрәклеген белмәй. "Балам юғары уҡыу йортона инһә, шул еткән, өҫтәмә башҡорт теле уға нимәгә кәрәк", тип уйлай. Телдең башҡорт ҡына итеп түгел, ғөмүмән, кеше итеп формалаштырыуҙағы әһәмиәтен ул белмәй. Аллаға шөкөр, минең ейәндәр башҡортса һөйләшә. Шуға ҡыуанам. Мин ситуациянан нисек сыҡтым, бигерәк тә ейәндәр бәләкәй саҡта эргәлә йәшәттем. Мифтахетдинға ла бит халыҡ тарафынан "Аҡмулла" тигән исем ғәҙеллек, хаҡлыҡ, аҡлыҡ илсеһе булған өсөн бирелгән. Тиккә генә ул киң билдәле "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк" тигән шиғыры менән йәнәш тап тәрбиә мәсьәләләре менән бәйле "Нәсихәттәр"ҙе тәкрарламаған, күрәһең. Совет осорондағы мәғариф системаһында белем алыу менән тәрбиә биреү йәнәш барҙы. 20-се йылдарҙан шулай барлыҡҡа килгәйне. Уҡытыусылар тәрбиәсе булараҡ, мәктәптә генә эшләмәй, улар ата-әсәләр менән дә эшләй.

**Һеҙҙең тормоштағы остаздарығыҙ?**

**Ф. Күзбәков:** Тәүге уҡытыусыларың мәңгелеккә иҫтә, йөрәк түрендә ҡала, мәктәптекеләр бигерәк тә. Минең, мәҫәлән, хәреф танытҡан Фәһимә апай Абдрахманованы онотаһым юҡ. Юғары синыфтарҙа Рим Хәйретдин улы Әпсәләмов әҙәбиәт донъяһына һөйөү уятты. Университеттарҙағы уҡытыусыларым... Әхмәт Мөхәммәтвәли улы Сөләймәнов менән аҙаҡ коллегалар булараҡ аралашырға насип булды. Юғары мәҙәниәтле, тәрән ғилемле, уғата итәғәтле булыуы, үҙен тотошо менән генә лә миңә өлгө ине ул.

Бер кем дә айырым утрауҙа Робинзон Крузо һымаҡ йөрөмәй. Уның кеше булараҡ формалашыуы ана шул бәйләнеш арҡаһында барлыҡҡа килә. Ғаиләлә башланған аралашыу артабан йәмғиәттә дауам итә. Нимәләр эшләй алағанһың икән, ул һинең генә һәләтеңә бәйле түгел, тотош һинең менән аралашҡан кешеләрҙең дә хеҙмәте.

**Ф. Санъяров:** Әхмәт ағай Сөләймәновты телгә алдығыҙ. Миңә уның менән бик оҙаҡ йылдар аралашырға, фольклор буйынса уҡырға насип булды. "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр, йәки республикала үткән башҡа конкурстарҙа гел ҡатнашып йөрөнөк. Әхмәт ағай үҙенә һалынған миссияны аңлағандыр. Китер алдынан балаларына һәм халҡына үҙенең васыятын яҙҙырып ҡалдырған. Әхмәтзәки Вәлиди ҙә шулай бит, мәңгелеккә эмиграцияға китер алдынан, башҡорт халҡына хат яҙа. Миссияны аңлау нишләтә!

Һәр ваҡытта ла мин алынған тәрбиәнең, белемдең, минең үҙемдән дә бигерәк, остаздарыма бәйле икәнен тойоп йөрөйөм. Ябай ғына миҫал, минең бик яҡын ағайым, әсәйемдең бер туған ҡустыһы Рим Сәйетбаттал улы Искәндәров танылған педагог һәм ғалим, ғүмер буйы ауылда йәшәне, илле йыл мәктәп директоры булды. Өфөлә генә йәшәйһе остаз, тип уйлайым мин уның тураһында. Беҙҙең халҡыбыҙҙа ер тойғоһо ла көслө бит. Шул ер тойғоһон еңеп, ул баш ҡалаға эшкә килмәне, әммә бик юғары рухлы кеше булды.

Беҙ бәхетле быуын - остаздарыбыҙ бөтәһе лә затлы булды. Дуҫым, етәксем Марат Вәли улы Зәйнуллинды ғүмер буйы хәтерләйәсәкмен. Яҡташым Тимерғәле Килмөхәмәтов күҙ алдынан китмәй. Ауылдашым, яҡташым Роберт Байымов, Стәрлетамаҡтан Тикеев, Ишбаевтар филологтарға остаз булдылар.

**Ф. Күзбәков:** Кешелек донъяһы алдағы быуындан һәр ваҡыт өйрәнә. Үҙенән алда килгән быуын башлаған эштәрҙе артабан да-

***Белем алырға, һәләтеңде үҫтерергә мөмкинлектәр киң. Ә тормош, әҙәм балаһына ҡуйылған талаптар бик йылдам үҙгәрә. Ваҡиғаларҙа ҡатнашыу түгел, улар хаҡында хәбәрҙар булыу ғына ла еңелдән түгел. Миңә ҡалһа, бөгөнгө йәштәр мәғлүмәт, мөмкинлектәр аҙ булғандан түгел, ә уларҙың күплегенән юғалып ҡала кеүек. Парадокс. Йәш кешене ҡыҙыҡтырыр нәмәләр күп. Уларҙың ҡайһыһы уға кәрәгерәк? Айырыуса бөгөн нимәгә күберәк иғтибар итергә? Тәбиғәтең менән талантлы булып та бик алыҫ китә алмауың бар. Заманың менән бер ҡатарҙан атлайым тиһәң, һин был киң мөмкинлектәрҙән дөрөҫ файҙалана белергә тейешһең.***

***✓ Уҡытыусыға элек-электән, ололоҡлап, "мөғәллим, хәлфә" тиерҙәр ине. Белем-ғилемле, тәрбиәле, тәҡүәлеләргә дини вазифаға эйә булмаһа ла "хәҙрәт" тип өндәшеү ғәҙәте булған. Беҙҙең заманда ла шулай өндәшеү бар ине.***

# ТӘРБИӘСЕ-ОСТАЗДЫҢ... йылы булһын!

***90-сы йылдарҙан һәм ошо быуат башынан: "Беҙ потребителдәр әҙерләйбеҙ",- тигән һүҙҙәр йыш ишетелде. Әҙергә - хәҙер. Алма беш - ауыҙға төш. Ир-егет, әйтәйек, ҡырҡ йәшенә еткән, һаман өйләнмәй. Утыҙға еткән ҡатын-ҡыҙ һаман күңел асып йөрөй. Бына ошо мөнәсәбәттән ҡотолорға кәрәк. Юғиһә, дәүләтебеҙ именлеге, халҡыбыҙҙың киләсәге ауыр хәлгә ҡуйыласаҡ. Бөтөн нәмә хеҙмәт күрһәтеүгә генә әйләнә бара. Беҙ хәҙер профессор ҙа, доцент та, уҡытыусы ла түгел, ашханалағы ашнаҡсы һымаҡ, хеҙмәт күрһәтәбеҙ.***

Ҡул менән эшләрҙәй, күрһәтеп башҡарырҙай осраҡтарҙа кешене өйрәтеү еңелерәк һымаҡ. Ә бына ижади эшмәкәрлектә: мәғарифта, сәнғәттә, әҙәбиәттә был йүнәлештә ниҙәр эшләп була? Назар Нәжми: "Яҙыусыны бер ниндәй институт та әҙерләй алмай!.." тигәйне. Был фекергә күпмелер төҙәтмә индереп әйтеү кәрәктер: эйе, әҙипте бер генә лә юғары уҡыу йорто ла етештерә алмай, әммә, һәләтең булһа, уны үҫтерергә ярҙам итә, донъяға ҡарашынды киңәйтә, белемеңде камиллаштыра...

**Шулай булғас, бөгөнгө һөйләшеүҙә "Ниндәй һуң беҙҙең заманыбыҙ?" тигән һорауҙы бирмәһәк, яҙыҡ булыр.**

**Ф. Күзбәков:** Бер һүҙ менән генә уны ҡылыҡһырлауы мөмкин түгелдер. Интернет, мәғлүмәти йәмғиәт формалашҡан, мәғлүмәт технологиялары киң ҡолас алған заманда йәшәйбеҙ. Белем алырға, һәләтеңде үҫтерергә мөмкинлектәр киң. Ә тормош, әҙәм балаһына ҡуйылған талаптар бик йылдам үҙгәрә. Ваҡиғаларҙа ҡатнашыу түгел, улар хаҡында хәбәрҙар булыу ғына ла еңелдән түгел. Миңә ҡалһа, бөгөнгө йәштәр мәғлүмәт, мөмкинлектәр аҙ булғандан түгел, ә уларҙың күплегенән юғалып ҡала кеүек. Парадокс. Йәш кешене ҡыҙыҡтырыр нәмәләр күп. Уларҙың ҡайһыһы уға кәрәгерәк? Айырыуса бөгөн нимәгә күберәк иғтибар итергә? Тәбиғәтең менән талантлы булып та бик алыҫ китә алмауың бар. Заманың менән бер ҡатарҙан атлайым тиһәң, һин был киң мөмкинлектәрҙән дөрөҫ файҙалана белергә тейешһең. Ә был еңелдән түгел. Бына тап ошо мәлдә бай тормош тәжрибәһе булған, дәүеренән артта ҡалмаған остазың булһа икән!.. Был осраҡта һин - бәхетле...

уам итә алғанда ғына ул камиллаша бара. Ньютон: "Мин гиганттарҙың яурынына баҫып торғанға ғына башҡаларҙан алыҫыраҡ күрәм", - тиер булған. Был афоризм цивилизацияның, прогрестың эҙмә-эҙлекле булыуын, техник, фәнни асыштарҙың үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә тороуын бик теүәл, образлы асып һала.

Совет осоронда завод-фабрикаларҙа тәжрибәле оҫтаға йәш кешене беркетеп ҡуйыу традицияһы бар ине. Уңышлы файҙаланылған, киң таралған, яҡшы һөҙөмтәләр биргән алым булды ул. Йәштәр менән эшләүселәр үҙ-ара тәжрибә лә уртаҡлаша торғайны. Уларҙы ваҡытлы матбуғат та иғтибарһыҙ ҡалдырманы, радио-телевидение ла ситләтеп үтмәне. Үҙенә күрә "Өйрәнсек мәктәбе" формалашты, йәшәп килде тиергә мөмкин. Бына шулай производствола, ауыл хужалығында, башҡа шундай тармаҡтарҙа билдәле тәжрибә тупланған, әммә онотола төштө, буғай.

Һуғыштан һуңғы осорҙа башлап яҙыусыларҙы олораҡтарға, танылған яҙыусыларға беркетеп ҡуйыу традицияһы бар ине. Мостай Кәримгә Әсхәл Әхмәт-Хужаның тәғәйенләнеүен ишетә беләм. Мин, әлбиттә, тап ошондай башланғыстарҙы тергеҙәйек, тигән саҡырыу ташлауҙан алыҫмын, әммә ижади лабораториялар, оҫталыҡ дәрестәре ойоштороу, әҙәбиәт-сәнғәт әһелдәренең генә түгел, башҡа һөнәр эйәләренең дә йәнле аралашыуҙары кеүек формалар ыңғай һөҙөмтәләр биреренә шикләнмәйем.

**Ф. Саньяров:** Фәнил Тимерйән улы һөйләгәндәр барыһы ла "рухи институт" тигәнгә тап килә. Ә ул ғүмер буйына булған. Башҡортта, айырыуса. Беҙҙең халыҡ тәрбиә институтына шул тиклем яуаплы ҡараған. Беҙҙең йөҙәрләгән эпосыбыҙ бер ҙә юҡтан ғына тыумаған да, юҡтан ғына һаҡланып килмәгән. Юғиһә, үткән бер нисә мең йыл эсендә юғалған булыр ине. Тәүге эпосты ижад иткән атаҡлы ата-бабаларыбыҙ уны кемгә ҡалдырыу институтын да булдырған бит. Мираҫ быуындан-быуынға тапшырыла килгән. Бөгөн атаҡлы фольклорға эйә халыҡтың балалары икәнбеҙ, шул тәрбиә институтының ни тиклем юғары булғанын раҫлай. Сәсәнлек институты ла шул тиклем көслө булған. Исемле сәсәндәр янында һәр саҡ йәш быуын йөрөгән. Әгәр ҙә кешелә тәбиғәттән бирелгән һәләт бар икән, ул быны ғүмер буйы уртаҡлашҡан, балаһына өйрәткән. Атанан күргән уҡ юнған, әсәнән күргән тун бескән, тигән афоризм кимәлендәге бик матур мәҡәл шуны күрһәтә. Нәфис әҙәбиәт кимәлендә лә бик күп миҫалдар килтерергә була.

Бөгөн иһә теге йәки был яҙыусының ижадын өлгө итеп алыу мәсьәләһенә килгәндә, заманында бер дуҫ шағирым: "Бер кемдең дә шиғырын уҡымайым, кәрәкмәй, сөнки һин теләһәң дә, теләмәһең дә уларҙы ҡабатлаясаҡһың", - тигәйне. Был оло хата! Беренсенән, башҡаларҙы уҡып, һин рухи кимәлеңде күтәрәһең. Икенсенән, кешеләр нисек фекерләй, ниндәй поэтик образдар таба, ниндәй ысул менән уҡыусыға еткерә, шуларҙы өйрәнәһең.

Башҡаларҙы уҡырға кәрәк! Бөгөн үҙен ижадсы тип танырға теләгән йәштәр Рәми Ғариповтың, Рауил Бикбаевтың көндәлектәрен, шиғриәтен яҡшы белергә тейеш, сөнки улар һинең күҙҙәреңде аса. Философик планда үҫеш кәрәк икән, Мостай Кәримдең көндәлектәрен уҡырға кәрәк. Унда шул уҡ поэзия, ижади лаборатория философик ҡағыҙға төрөп бирелә.

**Ф. Күзбәков:** Мин бүтәндәрҙе уҡымайым, ул үҙенең артынан эйәртеп алып китә, тиеү, үҙеңдең көсөңә ышанмауҙан килә, тип уйлайым. Был бер. Икенсенән, уның яғынан ҡыланыу ҙа бар. Сөнки был кеше лә мәктәптә белем алған, тәүге аҙымдарын шунда яһаған. Һәм ул дөйөм әҙәби солғанышта йәшәй. Әҙәби мөхит бар.

**Башҡортта кемдәрҙе "остаз" тип йөрөтәләр?**

**Ф. Күзбәков:** "Остаз" тигән һүҙ, минең ҡарамаҡҡа, әҙәбиәттә күпмелер дәрәжәлә электән осраштырһа ла, һөйләш теленә һуңыраҡ осорҙа, күп булһа, ике-өс тиҫтә йыл әүәле килеп инде. Ауылда хөрмәткә лайыҡ, кәңәш һорарҙай, ил ағаһы, ил инәһе булырҙай шәхестәр "аҡһаҡал, ағинәй" булды. Әбйәлил, Баймаҡ яҡтарында бындай ир-уҙамандарҙы "апа" тип дәрәжәләү ҙә билдәле.

**Борондан килгән "Абыҙ" тигән һүҙ ҙә бар бит әле....**

**Ф. Күзбәков:** "Абыҙ" уҡымышлы тигәнде аңлата.

**Ф.Саньяров:** "Апа" халҡыбыҙҙың, башҡорт теленең боронғолоғоноң бер күренеше. "Апа," "бала" һүҙҙәре һиндтың санскрит әҙәби теленә барып тоташа. Ләкин беҙ уны бөгөн диалект тип иҫәпләйбеҙ.



Әбйәлил районында Кәрим апа, Хәким апа, тип һөйләйҙәр. Илештән алып, Борайға тиклем дә ул ҡулланыла. Телебеҙҙә боронғо һүҙҙәр бик күп, әллә ниндәй боронғо күренештәр ята. Был байлыҡты туҡтауһыҙ ишеттереп торорға ғына кәрәк.

**Ф. Күзбәков:** Уҡытыусыға элек-электән, ололоҡлап, "мөғәллим, хәлфә" тиерҙәр ине. Белем-ғилемле, тәрбиәле, тәҡүәлеләргә дини вазифаға эйә булмаһа ла "хәҙрәт" тип өндәшеү ғәҙәте булған. Беҙҙең заманда ла шулай өндәшеү бар ине. XIX быуатта Өфөлә мөғәллимлек иткән, яҙыусы, публицист булараҡ та билдәле Василий Зефиров, мәҫәлән, "Ырымбур губернаһы ведомостары" газетаһы менән даими бәйләнеш тота. Киң билдәле "Йәнтүрә хикәйәһе" әҫәрен ул тап ошо баҫмала баҫтыра. Хикәйә геройҙары: башҡорт старшинаһы ла, Йәнтүрә лә авторға "хәҙрәт" тип өндәшә. Был уларҙың уға ҡарата булған ихтирам, хөрмәт билдәһе... Лев Толстойға "хәҙрәт" тип өндәшмәһәләр ҙә, ололоҡлап ҡабул итеү булған. "Мои башкиры меня узнали", тип яҙа бит үҙенең хаттарында.

**"Мои башкиры", тип өндәшеүе генә ни тора!**

**Ф. Күзбәков:** "Башҡорттан Геродот еҫе килә", тип бик образлы әйтә ул. Ни өсөн? Сөнки башҡорт тарихы бик тәрәнгә китә. Башҡортостан периферияла һымаҡ булһа ла, Салауат Юлаев, Зәки Вәлиди кеүек шәхестәрҙе бирә алған. Сөнки беҙ әле генә әйткән сәсәнлек традициялары халыҡ ижадына һалынған тәрбиәүи саралар аша еткерелгән. Вәлиди ауыл мәҙрәсәһен бөткән, артабан үҙаллы эшләп йөрөй. Аҙаҡ, заманы ҡушҡас, сәйәсәткә бирелеп, иң юғары дворян балалары, Ленин менән фекер алышырлыҡ, уны тәнҡитләрлек кимәлгә етә. Ул ғына түгел, аҙаҡ Европа илдәренә сығып киткәс, уларҙа аҡыл эйәләре менән осрашып-һөйләшеп йөрөрлөк дәрәжәлә була. Был феноменаль күренеш. Уның нигеҙендә шул башҡорт мөхите ята - борондан килгән тәрбиә биреү мәктәбе.

**Ф. Саньяров:** Был үҙе ҙур тема. Мин әле шулай тип кенә әйтер инем, беҙ бик бәхетле быуын, беҙҙең арттан килгән быуын да бәхетле булыр, тип уйлайым. Әле халҡыбыҙға һынау өсөн төшөрөлгән мәлдәр бар. Шул һынауҙы беҙгә аҡыл һәм берҙәмлек менән, бер-береңде аңлау һәм ярҙам итеү менән үтергә кәрәк. Бөгөнгө булған халыҡ-ара мөнәсәбәттәге ҡатмарлыҡтан тиҙерәк сыҡһаҡ ине, тип теләйем, һеҙ ҙә шулай уйлайһығыҙҙыр. Бына шул мәсьәләлә, Фәнил Тимерйән улы, беҙгә үткәнгә әйләнеп ҡарарға кәрәк. Ысынлап та, остазлыҡ, абыҙлыҡ - ул халҡыбыҙҙа борондан килә. Салауат, Аҡмулла, Өмөтбаев, Ғафури, Бабичтарҙың ижады ғына ни тора! Суфый шағирҙарҙың ижадынан да донъя хаҡында күпме мәғлүмәт алырға була. Шәмсетдин Зәкиҙең, Аҡмулланың тәрбиәләү педагогикаһын өйрәнеп кенә беҙ әллә ниндәй фекерҙәр тыуҙыра алабыҙ. Аҡмулла: "Шәмсетдин Зәки булмаһа, мин шағир булмаҫ инем", - тип әйтә. Мин бөгөн уҡыусыларға йыш ҡабатлайым: Ҡарғалы, Балыҡлыкүл, Стәрлебаш, Иҫке Ҡыйышҡылағы мәҙрәсәләребеҙ күпме уҡымышлылар биргән. "Ғәлиә" мәҙрәсәһе 1905 йылда асылып, 1917 йылда ябыла, ләкин ошо ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ул ниндәй аҡыл эйәләрен үҫтергән! Донъя кимәлендә дипломат булып, Йеменгә барған Кәрим Хәкимов үҙе генә ни тора. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев Исмаил Гаспрановты күрер өсөн генә махсус рәүештә Симферополдән Баҡсаһарайға килә. Фәнил Тимерйән улы "Башҡортостан периферияла һымаҡ булһа ла", тип ысҡындырҙы. Мәскәү шулай иҫәпләгәндер, ләкин Башҡортостан бер ҡасан да периферия булмаған. Беҙ бит Евразияның уртаһында, йөрәгендә. Беҙҙең аша Ебәк юлы, Һиндостанға тиклем сауҙа юлы үткән. Егерме ике ҡалабыҙ булыуы нимә тураһында һөйләй! Шуларҙы уйлаһаң, ысынлап та, беҙ бәхетле халыҡ.

**Бөгөн мәғлүмәт күп, технология заманы бындай мөмкинлек бирә. Ләкин уның кәрәк-кәрәкмәгәнлеген, файҙалымы-түгелме икәнен бала ғына түгел, оло кеше лә белеп бөтмәй...**

**Ф. Саньяров:** Мәктәптә хәҙер "кибербезопасность" тигән дәрес инә. Ул дөрөҫ тә. Сөнки хәҙер мәғлүмәт бик күп, шуға балаға тейешлеһен, мөһимен һәм кәрәклеһен генә биреү зарур. Уҡытып йөрөгәс, быны үҙем яҡшы беләм. Уҡыусыларға һорау бирәм, береһе лә яуап бирмәй. "Хәҙер тыкалкалырығыҙҙы, йәғни телефонды, алығыҙ әле", тием. Шунан ҡарап, кәрәк мәғлүмәтте табып, ҡул күтәреп, яуап бирә башлайҙар. Ә баштарында был мәғлүмәт юҡ. Уларҙа фекерләү, ижади фекерләү юҡҡа сыҡты. Бына һүҙ башында әйткән потребителдең һөҙөмтәһе шулай сағыла. Үҙҙәрендә таяныр база һалынмаған. "Киске Өфө" ҙур проблема күтәргән. Айырыуса, Педагог һәм остаз йылы иғлан ителгәндә, ошо проблеманы гәзит биттәренә сығарып, дөрөҫ эшләйһегеҙ. Беҙ ошо йылды файҙаланып яңынан-яңы уҡытыу системаһы парадигмаһы тыуҙырырға, шуға этәреш бирергә тейешбеҙ. Уны мәғариф академиялары, мәғарифты үҫтереү институттары ишетергә тейеш. Шул йүнәлеште башлаһаҡ, йәш быуынды һаҡлап ҡына ҡалыу түгел, уны рухи яҡтан бай итеп тәрбиәләй алыр инек.

**Ф. Күзбәков:** Башҡорт остаздары етерлек, шуларҙы күрергә, күрһәтә белергә һәм йәштәргә аңлата белергә кәрәк.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмәләште.**

✓ *Ос һәнәген ҡайынға һөйәлгән еренән иплəп кенә ҡулыма алдым. Һәлмәк кенә ине ул. Алып ҡайтып етеп булырмы? Әй, тауыш сығармау өсөн ҡыуыштан алыҫлашҡансы күтәрһәм, арьяғына һөйрәтеп алыр ҙа китермен.*




* * *

Эштәр бына шулай көйләнеп китте. Күбәләрҙе һис тә ҡолатмай тарттыра башланым. Ат өҫтөндә лә ныҡ ултырам. Әхәт менән яландың осонан-осона йән-фарманға туҙҙырып сабыштыуҙан да ҡурҡып торған юҡ. Унан һис тә ҡалышмайым.

Көн буйына һыбай йөрөү арыта икән шулай ҙа: кисен эштән туҡтағас, бил, беләктәр ауырта, иртәнсәк ҡабат атҡа менер килмәй тора. Ләкин һыр бирмәҫкә тырышам. Тағы ике көндән ауылға ҡайтып китәсәкбеҙ бит, аҙына ҡалған, нинә туҙмаҫҡа? Эшләгәнем өсөн хаҡ та бирәсәктәр. Тоҡ менән әллә нисәмә карауай бойҙай икмәген күтәреп алып ҡайтып, уларҙы урындыҡҡа теҙеп һалып ҡуйһам, әсәйем ҡайһылай шатланасаҡ! Ошо уйҙан ғына ла күңелгә рәхәт булып китә.

Әсәйем менән апайым хәҙер бесән сабыуҙы еткерәләрҙер ҙә инде. Мин ҡайтҡас, йыйырға йөрөй башларбыҙ, моғайын. Күбәне иһә быйыл үҙем тарттырасаҡмын. Минең атта елеп йөрөгәндә күреп, әсәйем тағы бер тапҡыр ҡыуанып әле.

Кис эштән туҡтағас, башты күҙҙе йыуып алыу өсөн, йылға буйына киттем. Көн буйы тирләп йөрөгәндән аҙаҡ һалҡын ҡаран һыуында йыуынһаң, шул тиклем рәхәт булып ҡала, хатта арығаның бөткәндәй онотола.

Инде йыуына башлағайным, үҙемдән өҫтәрәк өйкөм тал арьяғында көңгөр-ҡаңғыр һөйләшкән кешеләрҙең тауышына ҡолаҡ һалдым. Кәбән ҡойоп ҡайтып килеүселәр йыуынырға туҡтаған, күрәһең.

- Бөгөн мин йөҙ күбәнән артыҡ ырғыттым, әй, - ти берәһе.

- Эш ырап барҙы бөгөн, - ти икенсеһе. - Иллә һиндәге ос һәнәге шәп. Иртәгә кәбән ослағанда миңә биреп торорһоң әле.

- Һәнәкте - әйтәһе лә түгел. Бесәнде күрәп кенә ала! Күтәргәндә һис тегеләй-былай әйләнмәй. Былдай һәнәкте ҡайҙан эҙләп тапҡан әйһе.

- Табыуын да тапҡан, шартына килтереп эшләй ҙә белгән...

Бәй, былар беҙҙең ос һәнәген маҡтай түгелме һуң? Теге икәүҙең һөйләшеүенә ныҡлабыраҡ ҡолаҡ һалдым.

- Нажар ағай, һатманылар, бик инәлтеп бирҙеләр, һындыра-фәлән ҡуймағыҙ, тине бит. Шәп булған өсөн дә ҡыҙғанғандарҙыр инде.

- Ҡара әле... - Береһе шулай тине лә һүҙен осламайынса туҡтап ҡалды. Шунан тауышын әкренәйтеп өҫтәне: - Әллә, мин әйтәм...

Аҙаҡҡы һүҙҙәр бөтөнләй шым әйтелде, бер ни ҙә аңлашылманы.

- Шәп булыр ине, - тип яуап бирҙе икенсеһе. - Былдай һәнәкте ҡулға төшөрөү - үҙе бер бәхет. Ғүмереңә буйы рәхәтләнәсәкһең.

- Һынғайны, ырғытып киттек шунда, тиһәк, һыныған таптырҙармы икән?

- Һәй, юҡҡа башың ҡатҡан тағы. Берәй ергә йыйып ҡуяһың да, ҡайтҡан саҡта...

- Тәүәккәлләйек...

Үҙ ҡолаҡтарыма үҙем ышанмай торҙом. Беҙҙең ос һәнәген бирмәү, үҙҙәренә һеңдереү тураһында һөйләшә бит былар!

- ...Урманда һәнәк тапмаҫтар тиһеңме ни? Ҡулға эләккәнде ыҫҡындырырға ярамай.

Минең хәҙер үк ошо һүҙҙәрҙе әйтеүсенең алдына барып баҫҡым, "Ул бит - атайымдан ҡалған ҡомарткы! Үлһәм - үләм, һәнәкте бирмәйем!" - тип ҡысҡырғым килде. Тик урынымдан ҡыбырлай алманым, һеңгәҙәгән кеүек ҡатҡанмын да ҡалғанмын. "Ни эшләп ҡарарға? Һәнәкте былар ҡулына нисек итеп бирмәҫкә?" - Ошо уйҙар мейемде өҙләкһеҙ сүкей. Ул арала теге икәү ҡыуыштар яғына китеп барҙы. Ярай әле, минең йылға буйында ултырғанды күрмәнеләр. Кискелеккә рәтләп ашағы ла килмәне. Башымда - ос һәнәге тураһындағы ғына уй. Әллә Нажар бабайға әйтеп ҡарайһымы икән был хаҡта? Бәлки, теге кешеләр менән һөйләшеп, насар уйҙарынан кире дүндерер. Ул бит һәнәкте атайымдан ҡомарткы булып ҡалыуын белә. Йәноҙаҡ бабай ҙа киҫәтеп ебәрҙе үҙен. Әгәр ул да теге икәү яҡлы булһа?.. Кешенең күңелендә нимә ятҡанын ҡайҙан беләһең? Һатмағайныгыҙ, ҡулға эләккәс, былай ҙа бирмәйбеҙ уны, тиер ҙә... Әхәт менән кәңәш итһәм инде... Ул ни эш ҡыра алыр тиһең?

Ҡараңғы төштө. Кешеләр берәм-һәрәм йоҡларға ятып бөттө. Әхәт күптән инде рәхәтләнеп йоҡлай, ә миндә йоҡо ҡайһылы юҡ. Ҡараңғылыҡҡа төбәлгәнмен дә тик ятам. Шулай уҡ һәнәкте ошо әллә ниндәй кешеләр әллә ҡайҙарға алып ҡайтып китерме икән ни? Атайымдан ҡалған һәнәк менән кәбән дә ҡоя алмаммы?

Ҡайҙалыр, йылға арьяғындағы урманда, өкө ҡысҡырғаны ишетелә. Ниндәйҙер ҡош һирәк-мирәк ҡыйҡылдап ҡуя. Был тауыштар төнгә хәүеф өҫтәгән кеүек. Мин бишмәтемде башым аша бөркәнеп ятып ҡарайым, ләкин барыбер йоҡо алмай. Шулай итеп, һәнәкте күрәләтә кеше ҡулына биреп ебәрергәме ни? Был хаҡта ҡайтып һөйләһәм, әсәйем ҡайғырыр инде. Алдан белмәнең - бер хәл, ниңә мәүешләндең, тип әрләр.

Юҡ, былай ятып түҙеп булмай. Шым ғына торҙом да, бишмәтемде алып, ҡыуыштан сыҡтым. Аяҙ күкте йондоҙҙар сыбарлаған. Ҡаршылағы урман стена һымаҡ ҡарайып күренә. Шул яҡҡа арҡанлап ҡуйылған аттарҙың гөршләтеп ашанғаны ишетелә.

Ҡыуыш артындағы ҡайынға һөйәп ҡуйылған һәнәктәр эргәһенә килдем. Бына ул беҙҙең һәнәк. Башҡаларҙан әллә ни тиклем оҙон. Уктай төҙ һаплы, дүрт йөплө. Ҡасандыр атайым кәбән ҡойоп йөрөгән, Йәноҙаҡ бабай маҡтап бөтә алмаған һәнәк. Их, теге көндә Йәноҙаҡ бабайға ниңә, биреп торайыҡ, тип әйттем икән? Йәнәһе, берәү кешеләргә изгелек күрһәтә. Бына хәҙер ни эшләргә белмәй йөрө инде. Был кеше тигәнең һинең яҡшылығына ниңә этлек менән яуап бирә икән? Ит изгелек - көт яуызлыҡ, тигәндәре ошолор инде...

Юҡ, бирмәйем мин атайымдың һәнәген ят кешеләргә! Бирмәйем! Һәнәкте алырға ла хәҙер үк ауылға ҡайтып китергә кәрәк.

Ос һәнәген ҡайынға һөйәлгән еренән иплəп кенә ҡулыма алдым. Һәлмәк кенә ине ул. Алып ҡайтып етеп булырмы? Әй, тауыш сығармау өсөн ҡыуыштан алыҫлашҡансы күтәрһәм, арьяғына һөйрәтеп алыр ҙа китермен. Туҡта, ҡыуышта ботинка менән тоҡ ятып ҡала бит. Әсәйем, икмәгеңде тоҡҡа һалып алып ҡайтырһың, тигәйне. Икмәкһеҙ ҡайтып инергәме ни инде? Икеләнеп туҡтап ҡалдым. Аҙыраҡ шулай уйланып торғас, бөтәһенә лә ҡул һелтәнем: иҫке ботинкаһы ла, тоғо ла, икмәге лә кәрәкмәй! Һәнәкте генә алып ҡайтып еткерһәм...

Бына мин, һәнәкте күтәреп, арба юлына төштөм. Ярты саҡрым самаһы барһам, оло юлға сығасаҡмын. Унан ауылға биш саҡрым тирәһе ҡала шикелле. Нисек тә ҡайтып етермен әле.

Ҡыуыштар ҙа, уның алдында һүнер-һүнмәҫ янған ут та күҙҙән юғалды. Һәнәктең бер сатынан тоттом да артабан һөйрәп алып киттем. Тирә-яҡ дөм ҡараңғы, юлдан тоҫмал менән генә атлайым. Ҡыуыштарҙан алыҫлашҡан һайын, күңелгә әллә ниндәй шик йүгерә. Аҙыраҡ барам да әйләнә тирәмә ҡолаҡ һалам. Йәнәшемдә генә низер йөрөгән һымаҡ ине, туҡтағайным, һис ниндәй тауыш-тын юҡ. Тағы аҙыраҡ барғас, юлда ниндәйҙер ҡараҫҡы күренде. Төбәлеп ҡарайым - ҡыбырлаған һымаҡ. Юл эргәһендәге йыуан ағас олонона һыйындым. Айыумы икән әллә? Был уйҙан тәнем әҫелеһыуыҡлы булып китте. Уҡлытаҙы айыу ояһы тиҙәр. Ни эшләргә? Әллә ҡысҡырып ебәрергәме? Улай итһән, әле бит йыраҡ китмәнем, ҡыуыштағылар йүгерешеп килеп етерҙәр. Әлеге ҡараҫҡы яғына ныҡлабыраҡ ҡарайым - ул баяғы урынында. Айыу булһа, шулай тик торор ине тиһеңме ни? Батырайып, алға ҡуҙғалдым, үҙем, тамаҡ ҡырып, тауыш биреп маташам. Яҡыная төшкәс кенә уның бейек түңгәк икәнен күрҙем. Күңелгә йылы инеп, рәхәт булып ҡалды.

Оло юлға сыҡҡас, ҡараңғылыҡ шыйыҡая төшкәндәй тойолдо. Һәнәкте дыңғырҙатып һөйрәп, таш юлдың уртаһынан атлайым. Тирә-яғыма ҡарамаҫҡа тырышам: йә күҙгә тағы әллә нимә күренер.

Ауыл осона килеп ингәс кенә, еңел тын алып ҡуйҙым мин. Арыуымды, аяҡ табандарым ауыртыуын шунда ғына тойҙом. Таш юлда яланаяҡ көйө атлау шаңҡыҫҡан, күрәһең. Йә инде, ете төн уртаһында шул тиклем ерҙән йәйәү ҡайттым бит. Малайҙарға һөйләһәм, ышанмаҫтар әле.

Ҡапҡабыҙҙан инеп, һәнәкте өй мөйөшөнә һөйәнем. Ләкин төнөн кем дә булһа алып китер һымаҡ күреп, һарай эсенә үк индереп ҡуйҙым. Әсәйем, йоҡоһонан уянып, ишек асҡас бөтөнләй аптырап ҡалды.

- Китсе, ниңә көндөҙ килтермәнеләр? - ти.

- Мине килтермәнеләр... Үҙем ҡайттым, - тинем дә әллә ниңә иланым да ебәрҙем.

Әсәйем тағы ла нығыраҡ ҡаушап төштө.

- Ни булды? Ниңә илайһың? Ниңә ҡайттың?

Тынысланып, ниңә ҡайтыуымдың сәбәбен һөйләп биргәс, әсәйем байтаҡ ваҡыт өндәшмәй ултырҙы, шунан мине ҡосаҡлаһы ла башымдан һыйпаны.

- Икмәктәре ары торһон. Дөрөҫ эшләгәнһең, улым.

Миңә рәхәт булып ҡалды. Тик шул саҡта ғына бик нык арыуымды, бөтә тәнем ҡойолоп килеүен, күҙемә йоҡо төйөлөүен тойҙом. Әсәйем алдыма ҡуйған ҡатыкты эсеү ҡайһыны ла юҡ. Йомшаҡ мендәргә башым тәртөлөү менән үлек кеүек йоҡлап киткәнмен.

Иртәгеһенә бесән йыя барайыҡ тип ҡапҡанан сыҡһаҡ, урамдан Нажар ҡарт һыбай елеп килә. Алыҫтан уҡ мине күреп:

- Бына ҡайҙа икән ул, ҡаҫҡалаҡ малай! - тип ҡулындағы сыбыҡ остоғо менән янай.

Мине юғалтып, эҙләргә сыҡтымы икән ни? Нажар ҡарт эргәбеҙгә килеп етте лә доп итеп ергә һикерҙе. Яланбаш, күлдәксән көйө генә бит әле. Уның алдында үҙемде ниңәлер гәйепле һиҙеп, башымды түбән эйҙем.

- Ҡотто алдың бит, улым. Ни булды һиңә? Ниңә әйтмәйнитмәй төнөн ҡайтып киттең? - Ул әле миңә, әле әсәйемә ҡарай. - Тәҡәт ҡороно бит. Уйламаған уй ҡалманы, ахырыһы, бында тороп саптым.

Ни эшләйһең инде, бөтәһен дә һөйләп бирергә тура килде. Әсәйем:

- Ҡайтып ингәс, үҙем дә ҡурҡып киттем, - тип һүҙ ҡыҫтырҙы. Мине ҡурсаларға әҙер ҡиәфәттә өҫтәне : - Ҡуй инде, ағай, изгелеккә яуызлыҡ менән яуап бирәме шулай кеше...

Нажар ҡарт:

- Бына әй, йә инде, - тип һөйләнеп торҙо ла ҡапыл ғына ҡыҙҙы ла китте. - Йәндәрен алам мин уларҙың! Йөҙөмә оят килтерҙе бит ишһеҙҙәр. Тәүбәгә килтермәһәмме шуларҙы!..

Ул атына менеп китергә йыйынған ерәнән туҡтаны, миңә боролоп ҡараны.

- Ә һин, улым, маладис. Эш хаҡынды Әхәт алып ҡайтып бирер.

Уға бер ауыҙ һүҙ ҙә ҡайтарып әйтә алманым. Тәү ҡарашҡа ҡырыҫ, һөймәлекһеҙ күренгән ошо кешегә үҙемдең кәңәш-төнәш итмәүем, уға артыҡ мәшәҡәт тыуҙырғаныма өсөн уңайһыҙланыу тойғоһо күңелемде тырнап тик тора ине.

* * *

Ваҡыт тигәнең ғәләмәт тиҙ үтеп тик тора икән дә. Кешеләргә тормош ауырмы, еңелме - унда ла эше юҡ. Уҡлытау һыртына минең күбә тарттыра барыуыма ла тағы бер йыл үтеп китте. Хәҙер инде минең кеүек ун ике йәштәге малайҙарҙың уйын ҡайғыһы юҡ. Үҙебеҙгә күрә эш табылып ҡына тора.

Былтыр етенсе класты бөтөп сыҡҡан һуҡыр Шәһит беҙҙән бөтөнләй айырылды. Артель кәләтендә эшләй ул, бөтә тауарҙы ҡабул итә, тейәтеп, ҡалаға оҙата. Үҙенсә ҡып иттереп кейенеп алған да әллә кем булып йөрөй. Беҙҙе күҙенә лә элмәй. Әй, ҡыланһын да, беҙ ҙә үҫеп киләбеҙ ҙә инде...

Бесән ваҡыты еткәйне, тағы эш күбәйә төштө. Мин инде быйыл бесәнгә ныҡлап тотонорға уйлап йөрөйөм: бесән сабырға иҫәп бар. Хәшейә апайым былтыр уҡ салғы алды, миндә уның тиклем генә көс юҡмы ни?..

- Сабыуын сабып йыйырбыҙ, кемдән кәбән ҡойҙорорбоҙ инде, - тип ҡайғыра әсәйем.

Йәноҙаҡ бабай сәләмәт булһа, улай хәсрәтләнмәҫ ине, бәлки. Бабайым ҡыш көнө бүрәнә тарта йөрөгәндә, билен биртендереп, һаман төҙәлә алмай ыҙалана. Шулай ҙа бер бәләкәй генә иҫке салғы һаплап бирергә хәләнән килде уның.

- Мин дә һинең кеүек саҡта - ун ике йәшемдә саба башланым, өйрән. Егет кешенең биле йәштән ныныирға тейеш, - тип салғыны сүкеп, ҡулыма тоттороп ҡайтарҙы.

**(Дауамы. Башы 15-20-се һандарҙа).**

✓ *Ҡәләмемә тотоноуымдың төп сәбәпселәре Рауил менән Әнисә генә түгел, ә уларҙың икеһенең дә ана шул элекке ҡайны-ҡәйнәләре - һәр нәмәгә айныҡ күҙ менән ҡарап, ғәҙел баһа бирә, башҡаларҙың хәленә инә ала торған кешеләр ине бит.*



ӨЛГӨЛӨ ҒАИЛӘЛӘР

**Бөгөнгө көндә Баймаҡ ҡалаһында йәшәгән бәхетле бер пар тураһында һүҙем. Рауил менән Әнисә улар. Икеһе лә үҙҙәренең тыныс холҡо, кешелеклеге, кеселеклеге менән күптәргә үрнәк булырлыҡ. Инде үҫеп еткән бала-сағалары, ейән-ейәнсәрҙәре лә бар. Тик баштан уҡ бергә тормош ҡороп йәшәмәгән был парҙың балаларының берәүҙәре "атаһыныҡы" булһа, икенселәре - "әсәһенеке". Күптәребеҙҙеке һымаҡ уҡ, уларҙың да тормош юлы ябайҙан булманы. Ғаиләләре башҡа-башҡа ине уларҙың...**

# КЕШЕЛЕКЛЕ КЕШЕЛӘР ХАҠЫНДА



Бала-сағa үҫтереп, етеш тормош көтөп, һин дә мин йәшәп ятҡанда, Рауилдың ғаиләһенә ҡайғы килә. Кинәт кенә ауыр сиргә һабышып, тәүге ҡатыны Гөллирә йәшләй донъя ҡуя. Инде үҫмер йәштәге балалары менән яңғыҙы ҡалған ир кеше ғәзиздәрен аяҡҡа баҫтырыу юҫығында йәшәүҙе, тырышыуҙы дауам итә. Әле йәш булыуына, хатта бәғзе берәүҙәрҙең өгөтләүҙәренә лә ҡарамаҫтан, башҡа ҡатын-ҡыҙға өйләнергә лә ашығып бармай Рауил. Баһадир кәүҙәле, етди ҡарашлы, өлгөлө атай хәмер-маҙарға ла ҡырҡа кире мөнәсәбәттә була. "Яратҡан кейәү" булараҡ, инде олоғайған ҡәйнәһе, ҡатынының туғандары менән дә элеккесә тығыҙ бәйләнеш тотоуын дауам итә. Бер нисә йылдан уның тормош юлында ире вафат булып, бер улы менән яңғыҙы тороп ҡалған зифа буйлы мөләйем, һылыу ҡатын - Әнисә тап була. Икеһе лә күптән түгел ҡырҡты аша атлаған йәш ир менән ҡатын бер-береһен оҡшата. "Үлгән артынан үлеп булмай, алда әле йәшәйһе бар бит" тип, туғандары һәм таныштары ла уларҙың береһен икенсеһенә димләй башлай. Әммә үҙ ғаиләһен, балаларын ҡурсалаусы атай һәм әсәй булараҡ, башҡа кеше менән тормош ҡороп ебәреү мәсьәләһенә Рауил да, Әнисә лә ифрат һаҡ ҡарай. Халҡыбыҙҙа "Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ" тиҙәр бит әле. Һәр яҡлап ентекләп уйлап, инде үҫеп еткән балалары менән кәңәшләшкәндән һуң ғына, улар бергә ғаилә ҡороу мәсьәләһен хәл итә.

Икеһен дә электән белгән кеше булараҡ, мин үҙем, шәхсән, уларҙың бына ошо ҡарарына ифрат ныҡ шатландым. Ә инде никах атҡарыуҙа минең шаһит булып ҡатнашыуымды һорағас, йәш бала һымаҡ ҡыуанып, ихлас риза булдым. Бынан тыш, Әнисәнең атаһы яғынан туған булараҡ, никах уҡығанда "вәли" ролен үтәнем (динебеҙ ҡануны буйынса, ҡатын-ҡыҙҙың никахына атаһының йә башҡа берәй ир туғанының ризалығы мотлаҡ). Был яҡындарымдың бер-береһен ихтирам итеп йәшәп китеүҙәренә икеләнмәнем һәм бик дөрөҫ уйҙа булғанмын. Улар, ысынлап та, күптәрҙе һоҡландырып, туғандарын ҡыуандырып, етеш, татыу йәшәй башланы.

Әммә мине, байтаҡ тормош тәжрибәһе лә булған кешене (бында йәшерен-батырыны юҡ) баштан алып бер һорау борсоно. Рауил үҙенең ҡайны-ҡәйнәләре менән тиҫтәләгән йылдар аралашып, уларҙың улдары һымаҡ булып киткән, шул яҡшы кешеләр менән туғандарса йылы мөнәсәбәттәре лә һаҡлана килде. Ҡайны-ҡәйнә йортонда ул һаман булһа көтөлгән ҡәҙерле ҡунаҡ ине. Артабан ни булыр?.. Башҡа ҡатын, йәғни Әнисә менән тормош ҡорғас, "элекке кейәүгә" ҡарата оло кешеләрҙең мөнәсәбәте ҡырҡа үҙгәрмәгәйе, тип борсолдом. Икенсенән, "Әнисәгә лә хәҙер мәрхүм иренең туғандарының ҡарашы үҙгәрер, улар менән аралашып йәшәй алыр микән?" тигән шигем дә булманы түгел. Сөнки балаларының араһы өҙөлгәс, башҡа кеше менән тормош ҡорған кейәүенән йә килененән ҡырҡа ситләшкән бәғзе ғаиләләрҙе беләм. Шулар менән дә сағыштырыуым.

Күпмелер йыл үткәс, бер аҙ унайһыҙыраҡ булһа ла, Рауилдан үҙемде борсоп торған ана шул мәсьәлә хаҡында һораштым. Беләһегеҙме, ул мине нисек ҡыуандырҙы! "Гөллирәнең әсәһе, туғандары ла Әнисәне үҙҙәренең ҡыҙы һымаҡ күреп, яратып ҡабул итте. Башҡа алыҫ районда йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, йыш ҡына икәүләшеп уларға барып торабыҙ..." Бер юлы икенсе һорауымды ла бирергә баҙнат иттем: "Ә Әнисәнең ҡайны-ҡәйнәләре бармы, һеҙҙең яңы никахығыҙға нисек ҡарай?" "Беҙ өйләнешкәндә, Әнисәнең ҡәйнәһе, йәғни, Хәкимйән мәрхүмдең әсәһе бар ине. Ул да беҙҙең менән иң яҡшы мөнәсәбәттә булды, хатта ҡунаҡҡа саҡырып, ҡәҙер-хөрмәт күрһәтте. Ҡайнаға, ҡәйенбикәләре менән дә аралашабыҙ".

Заманында үҙҙәренең гүзәл сифаттары, холоҡ-фиғеле менән ҡайны һәм ҡәйнә ихтирамын, хатта һөйөүен яулап алырға ирешкән был пар өсөн шатлығымдың сиге булманы. Ҡәләмемә тотоноуымдың төп сәбәпселәре Рауил менән Әнисә генә түгел, ә уларҙың икеһенең дә ана шул элекке ҡайны-ҡәйнәләре - һәр нәмәгә айныҡ күҙ менән ҡарап, ғәҙел, объектив баһа бирә, башҡаларҙың хәленә инә ала торған кешеләр ине бит (хәҙер улар мәрхүмдәр инде. Аллаһы Тәғәлә Ахирәттә уларға еңеллек бирһен).

Рауил менән Әнисәнең шөғөлдәре хаҡында ла бер аҙ һөйләп китеү кәрәктер. Бөгөнгө көндә улар икеһе лә инде етенсе тиҫтәһен ҡыуа. Рауил Исмәғил улы Иҫәнов - Баймаҡ ҡалаһында танылған фотограф. Байтаҡ йылдар инде уның шәхси фотосалоны уңышлы эшләп килә. Әнисә Әхмәтсафа ҡыҙы оҙаҡ йылдар Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында уҡытыусы булып эшләне. Биология фәндәре кандидаты. РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы алдынғыһы. Бер нисә фәнни монография авторы. Быйыл "Шәмселмәғариф Юнысбаев шәжәрәһе" исемле китабы донъя күрҙе. Урал аръяғы райондарының экологик торошо, уларҙы яҡшыртыуға йүнәлтелгән тәҡдимдәре сағылған күп кенә ғилми мәҡәләләре матбуғат биттәрендә лә әленән-әле баҫылып сығып тора. Хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан, тормошҡа дәртле ҡараштағы, хәләл ефетенең фотосалонында яңы һөнәр үҙләштерә. Бер-береһенә ҡарата һәр саҡ иң яҡшы мөғәмәләлә булған был ғаилә башлыҡтары күптән түгел үҙҙәренең ыҡсым юбилей датаһы айҡанлы ҡорбан салып, туғандарын йыйып, хәләл мәжлес яһаны. Юнысбаев Ниғмәт хәҙрәт унда Ҡөрьән аяттары уҡыны, вәғәздәр һөйләне. Юбилярҙарҙың адресына бик күп яҡшы һүҙҙәр әйтелде. Хәйер, улар өсөн ниндәй генә матур һүҙҙәр әйтһәң дә аҙ һымаҡ. Арабыҙҙа бына шундай гүзәл яҡташтарыбыҙҙың булыуына һөйөнәм, уларҙы Аллаһы Тәғәлә гел генә үҙҙәре кеүек үк кешелекле әҙәмдәр менән һәр саҡ тап итһә ине, тип һорайым. Тормошобоҙҙо йәмләүсе шундайҙар арабыҙҙа күберәк булһа, донъябыҙ тағы ла матурыраҡ булыр ине.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ПРЕМЬЕРА!

# ӨФӨ ЮБИЛЕЙЫНА...

**Ошо көндәрҙә Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры кескәй тамашасыларын "Ҡыйыу һыуһар" тигән яңы спектакль менән һөйөндөрҙө. Спектакль баш ҡаланың 450 йыллыҡ юбилейына арнап Светлана Чураева пьесаһы буйынса сәхнәләштерелгән.**



Спектаклдә үҙенә хәүеф янаусын белһә лә, ҡиәмәтлек ағаһын ҡотҡарырға тип юлға сыҡҡан һыуһар малайы тураһында һүҙ бара. Был юлда уны ауырлыҡтар, һынауҙар көтә, әммә Бәхет көстө атаһы һәм ағаһына тоғролоҡ, тыуған еренә һөйөүҙән ала. Яуызлыҡты еңгәндән һуң, һөйгән йәре менән ул ошо урында - таҙа йылғалар менән уратып алынған убаларҙа, бөгөн гүзәл Өфө ҡалаһы торған ерҙә йәшәргә ҡалырға хәл итә.

Идея авторы һәм ҡуйыусы режиссер Ольга Штырляева. Спектакль милли үҙенсәлектәрҙе сағылдырыуы менән айырылып тора: башҡорт милли кейемдәре һәм ҡуйыусы режиссер Илнур Силәүсин тыуҙырған биҙәлеш үҙендә тыуған яҡ һулышын туплаған. Спектаклдең хореографы Рөстәм Имамов, композитор Марат Фәйзуллин да Башҡортостанды һәм баш ҡалабыҙҙы яратҡан тамашасыларҙың күңелдәрен арбарлыҡ эш башҡарған.

- Спектакль ҡаланың юбилейы айҡанлы өфөләргә бүләк булараҡ уйлап әҙерләнде. Ул береһен дә битараф ҡалдырмаҫлыҡ сюжетҡа ҡоролған. Һабантуй, байрам, яуыз, ағайынды яҡлап алышыу, мөхәббәтендә осратыу һәм, ниһайәт, тау башында яңы йорт - унда беҙ күп милләтле Башҡортостаныбыҙҙа ҙур бер татыу ғаилә булып йәшәйбеҙ", - тинеләр театрҙың матбуғат хеҙмәтендә.

Ҡуйыусы режиссер Ольга Штырляева спектаклдең премьераһынан һуң, уның 12 йәштән өлкән балалар өсөн тәғәйенләнеүе тураһында һөйләне. Сөнки тамаша ике сәғәттән ашыуыраҡ бара һәм бәләкәйерәк тамашасылар өсөн мәғәнәһе лә аңлашылып етмәүе бар. Унда бик күп етди темалар күтәрелә.

- Илһөйәрлек, тыуған яҡҡа ҡарата сәнғәт, ваҡиғаларҙы күңелендән үткәреү аша һөйөү тәрбиәләүсе тарих килеп сыҡты. Бәхет атаһын һәм ҡиәмәт ағаһын юғалтһа ла, улар Таң, Ҡояш, Ай, тыуған яҡ, сәскәле болондар кеүек образдарға бәйләнеп, мәңгелеккә уның эргәһендә ҡала. Был тарих үлем, хыянат тураһында ла. Йыш ҡына тарихтар ҡыҙҙар өсөн яҙыла, ә был юлы тулыһынса үҫмер малайҙар өсөн ижад ителгән - экшн, көрәш, ярыш, йәберләүҙәр бар. Курикот тигән персонажда йәмғиәт ҡабул итмәгән кеше сағылышын таба, ул башҡаларға оҡшамаған. Курикот - һыуһар һәм бесәйҙән тыуған бала. Унан көләләр, йәберләйҙәр һәм ул береһенә лә кәрәк түгелмен, тигән һығымтаға килә. Ә бит шулай уйлаған үҫмерҙәр ҙә юҡ түгел. Артистар йәнлектәр образында сығыш яһаһалар ҙа, бында кешеләр тураһында һүҙ барыуы ап-асыҡ, - ти ҡуйыусы режиссер Ольга Штырляева.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҡыйыу һыуһар" спектакле йәш тамашасыларҙы туғанлыҡ, тыуған ер тураһында уйландырыр, яҡшылыҡҡа әйҙәр тамашаларҙың береһе булмаҡсы. Уны инде Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының киләһе ижад миҙгелендә генә күреп буласаҡ. Ә быйылғы 91-се ижад миҙгелен театр 25 июндә "Муха-цокотуха" әкиәте менән ябасаҡ.**

✔ *Физик күнекмәләр организмда митохондрийҙарҙың күләмен арттыра. Митохондрийҙар энергия бүленеп сығыу өсөн яуаплы булғанлыҡтан, спорт менән шөғөлләнгәндән һуң көс һәм ихтыяр көсө арта.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КӨНӨНӘ - ИКЕ АЛМА

■ Йорт хайуандары кеше һаулығының торошона яҡшы тәьҫир итә, ти белгестәр. Европа университеттары ғалимдары йорт хайуандары ярҙамында стрестан ҡотолорға, хатта психиканы нығытып, иммунитетты ла яҡшыртырға мөмкин, тип дәлилләй. Медиктар фекеренсә, бесәйҙе бер нисә минут буйына һыйпау баш ауыртыуынан ҡотолдора. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә алынған статистик мәғлүмәттәргә ярашлы, өйҙәрендә эте йәки бесәйе булғандар уртаса биш йылға оҙағыраҡ йәшәй. Дөйөм алғанда, зоотерапия бөгөн күп кешеләргә сәләмәтлеген нығытырға булышлыҡ итә. Белгестәр әйтеүенсә, бесәй ауыртҡан урынды үҙе табып, дауалау һәләтенә эйә.

■ Һуңғы осорҙа сәләмәт йәшәү рәүешен өҫтөн ҡуйыусылар һаны артҡан. Әммә психологтар сәләмәт туҡланыу менән бәйле булған орторексия сиренең артыуын да билдәләй. Бәҡтиһәң, ҡамыр аштары, май, сөпрәле аҙыҡтар, кофеиндан тылыһынса баш тартыу кешене бәхетһеҙ яһай икән. Психологтар әйтеүенсә, туйғансы ашамау һәр ваҡыт депрессияға алып килә, хроник сирҙәр ҡыҫкенләшә.

■ Үпкәләү оҙаҡ ваҡыт дауам итһә, йөрәккә насар тәьҫир итеүен беләһегеҙҙәр. Насар тойғоларҙы, ваҡиғаларҙы үткәреп ебәрә белмәү ҡан баҫымын күтәрә, был иһә гипертония менән инсультҡа килтерә. Иҫке эмоциональ яраларҙың кешенең сәләмәтлегенә нисек йоғонто яһауын тикшергәндән һуң, Калифорния университеты белгестәре ошондай фекергә килгән. Тәжрибәлә ҡатнашыусы 200 кешене махсус приборҙар менән тикшереп ҡарағандан һуң, кем үҙен ҡасандыр бушҡа рәнйетеүҙәрен онота алмай, уларҙың ҡан баҫымы йыш үҙгәреп тороуы һәм йөрәге йышыраҡ тибеүе асыҡланған. Ғалимдар фекеренсә, ҡайһы берҙә ҡан баҫымы үҙгәреүе ҡурҡыныс түгел, әммә был хәл даими дауам итһә, йөрәк ауырыуҙары хәүефе бермә-бер арта.

■ Көнөнә - ике алма: был һәр ҡатын-ҡыҙ рационының мөһим өлөшө. Бигерәк тә, әгәр ҙә гүзәл зат 50 йәште үткән булһа, сөнки алма инсульт һәм инфаркт хәүефен 25 процентҡа түбәнәйтергә мөмкинлек бирә. Һынауҙарҙа ҡатнашыусылар ике төркөмгә бүленгән. Беренсе төркөмдәге ҡатын-ҡыҙҙар көнөнә ике алмаға тиң булған 75 грамм киптерелгән алма ашарға тейеш булған. Икенсе төркөм ошо уҡ күләмдәге слива ашаған. Өс ай һайын уларҙың һәр береһе ҡан анализы тапшырған. Ул күрһәтеүенсә, кем алма ашаған, уның ҡанында "насар" холестерин күләме тәүҙә 16, һуңынан 8 процентҡа кәмегән. Сливалар бындай һөҙөмтә бирә алмаған. Шуға ла тап алма йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртеүсе булып һанала.

■ Ғалимдар физик көсөргәнештең психикаға ыңғай тәьҫир итеүен күптән дәлилләгән. Табиптар әйтеүенсә, физик күнекмәләр организмда митохондрийҙарҙың күләмен арттыра. Митохондрийҙар энергия бүленеп сығыу өсөн яуаплы булғанлыҡтан, спорт менән шөғөлләнгәндән һуң көс һәм ихтыяр көсө арта. Көньяҡ Каролина университеты ғалимдары фаразлауынса, был матдәләр баш мейеһендә лә әүҙемләшә. Һөҙөмтәлә, хәтер яҡшыра, депрессия, күңел төшөнкөлөгө юҡҡа сыға.

Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

# БАШҠОРТТАРҘА ЙОНДОҘҘАР АТАМАҺЫ

**Башҡорттар борон-борондан, башҡа халыҡтар кеүек үк, күк есемдәрен күҙәткән, өйрәнгән. Халыҡта ай, ҡояш һәм йондоҙҙарға бәйле легендалар барлыҡҡа килгән.**

Һәр кемегеҙ төнгө күктә бер-береһенә тығыҙ урынлашҡан, бихисап йондоҙҙар теҙмәһен, һыҙатын күҙәткәне барҙыр. Башҡорттарҙа был йондоҙҙар иләүен Ҡош юлы, тип атайҙар (урыҫса уның исеме Млечный путь, **1-се һүрәт**). Ҡош юлының килеп сығышы тураһында башҡорт легендаһында былай тиелә: *"Бик борон булған хәл. Ул саҡта әле йондоҙҙар ҙа, Ҡош юлы ла булмаған. Ҡайҙандыр алыҫтан, көньяҡтан, Уралға, Һаҡмар, Ағиҙел буйҙарына торналар килеп йәйләр булған. Элек уларҙы Һиндостан тигән ерҙән килә тип һөйләй торғайнылар.*

*Бер йылды торналар теҙелешеп йылы яҡҡа осҡан мәлдә ел-дауыл ҡупҡан. Бала торналар аҙаша башлаған, ҡайһы берҙәре, арып, ергә төшеп ҡала барған. Шул саҡ оло торналар, ҡалғандарына юл күрһәтеү өсөн, ҡауырһындарын сәсеп киткәндәр. Был ҡауырһындар йондоҙға әйләнгән. Торналар осҡан юлда ана шулай йондоҙҙар хасил булған. Тороп ҡалған торналар ошо йондоҙҙарға ҡарап ҡайтыр булғандар. Ҡош юлы тигәндәре ана шунан ҡалған ул".*

Тик 20-се быуатта ғына ғалимдар Ҡош юлы спираль рәүештәге йондоҙҙар иләүе, йәғни галактика икәнлеген асыҡлай. Беҙҙең ҡояш системаһы галактиканың бер ситендә генә урынлашҡан (**2-се һүрәтте ҡарағыҙ**). Ә беҙҙең галактика төнгө күктә йондоҙҙар һибелгән таҫма рәүешендә генә күренә.

Күк йөҙөнөң төньяҡ ярымшарында урынлашҡан ете сағыу йондоҙҙан торған йондоҙлоҡто һәр кемебеҙ белә, әлбиттә. Урыҫса ул йондоҙлоҡ Большая медведица, тип аталһа, башҡортса - **Етегән.** Етегән йондоҙ тураһында легендалар башҡорт халыҡ ижадында байтаҡ ҡына. Бер легендала Етегән Алыптың (дәү кешенен) сүмесе, тиелһә, икенсеһендә ете бүре, тип нарыҡланған. "Етегән тигән ете йондоҙ - ете бүре ул. Етегәндән алыҫ түгел ике йондоҙҙо **Һарат** менән **Буҙат**, тиҙәр. Тегеләр бүре шул Һарат менән Буҙатты баҫтыралар. Инде ҡыуып етеп, тотоп ашаймы, тиһәләр, таң ата ла ҡуя. Таң атһа, ашай алмайҙар. Етегән тигән ете йондоҙҙо бер тында ете уратып әйтһәң, һауап була", - тигәндәр боронғолар.

Был йондоҙлоҡҡа бәйле киң билдәле легенда, әлбиттә, "Етегән йондоҙ - ете ҡыҙ". Унда былай, тип бәйән ителә: *"Элек берәүҙең ете ҡыҙы булған. Етеһе лә матур, етеһе лә батыр икән. Ҡырға сыҡһалар, гел бергә йөрөйҙәр икән. Һоҡланмаған әҙәм заты ҡалмай, ти, быларға, ҡыҙыҡмаған йән эйәһе ҡалмай, ти.*

*Бер саҡ был ҡыҙҙар тауға сыҡҡандар. Дейеү батшаһы быларҙы күреп ҡалған да арттарынан төшкән. Былар етәкләшеп, тау башына менеп киткәндәр. Дейеү улар артынан баҫтырып килгән. Инде тотам, инде электәрем тигәндә, ҡыҙҙар берәм-берәм һикереп күккә ашҡандар. Етеһе ете урынға боҫҡандар. Айырылмаҫ өсөн бер-береһенә яҡын торорға тырышҡандар. Шул ете ҡыҙ ете йондоҙ булып ялтырай башлаған. Аҙаҡ уларҙы Етегән йондоҙ, тип атағандар".*

Башҡорт халҡында был йондоҙға бәйле һынамыштар ҙа бар. Мәҫәлән, Етегән йондоҙ ҡараһыу булып күренһә, ямғыр булыр, тип юрағандар борон. Башҡортостанда Етегән йондоҙҙо йыл әйләнәһенә төньяҡ күктә күҙәтергә була. Йондоҙлоҡтоң офоҡтан иң бейек күтәрелгән мәле (80 градус) март айына тура килә, сентябрҙә, киреһенсә, офоҡҡа яҡын тора (20 градус). Етегән йондоҙҙоң Алып сүмесе,



1



2



3



4



5

тип аталыуын әйткәйнем инде. Ошо сүместең ситендәге ике йондоҙо туптура Тимерҡаҙыҡ йондоҙона күрһәтеп тора (**3-сө һүрәт**). **Тимерҡаҙыҡ** - түңкәрелгән бәләкәй сүмес (тотҡаһынын) формаһындағы йондоҙлоҡтоң иң осондағы сағыу йондоҙ (урыҫса Полярная звезда). Башҡортостан территорияһында был йондоҙ бер ҡасанда байымай һәм үҙ урынынан шылмай. Шуға күрә лә был йондоҙҙо башҡорттар борон-борондан Тимерҡаҙыҡ, тип атап йөрөткән, йәғни тимер ҡаҙыҡ менән ҡатып ҡуйылған, шылмай торған йондоҙ, тигәндәр. Тимер ҡаҙыҡтың ошо уҡ сифаты менән бәйле икенсе исеме - Алтын бағана. Төндә башҡорттар ошо йондоҙға ҡарап, тура юлды билдәләгән, аҙашмаған. "Ҡәнифә юлы" риүәйәтендә ҡаҙаҡтарҙан ҡайтыу өсөн Ҡәнифә исемле ҡыҙға тәрбиәсеһе: "Бар ҡыҙым, тик юл ҡырыйлап төндә генә атла. Тимерҡаҙыҡ йондоҙо һәр саҡ уң яғыңда булһын", - тип кәңәш бирә.

Буға йондоҙлоғондағы ойошоп торған яҡты йондоҙҙар төркөмө (Буға исеме грек мифологияһынан алынған) башҡорттарҙа Иләк йондоҙо йәки Өлкәр йондоҙо, тип атала (**4-се һүрәтте ҡарағыҙ**). **Өлкәр** күктең Төньяҡ ярымшарында урынлашҡан. Ноябрҙән алып ғинуарға тиклем был йондоҙлоҡто күҙәтеү өсөн бик уңайлы осор һанала. Өлкәргә бәйле халҡыбыҙҙа һынамыштар ҙа бар. "Өлкәр ергә төшкәндә, һыйыр һыуға төшәр", - тигән башҡорттар. Йәғни Өлкәрҙең офоҡтан юғалыуы йәйге эҫенең башланыуына тура килгән.

Күк йөҙөнөң төньяҡ ярымшарында башҡорт атамаһы булған тағы бер йондоҙлоҡ бар. Ул **Арҡысаҡ** йондоҙо йәки йондоҙлоғо (**5-се һүрәт**). Арҡыс-торҡос өсәр йондоҙҙан торған өсөн башҡорттар уны Арҡысаҡ тип атаған. Фәндә уның исеме Орион йондоҙлоғо, тип исемләнә. Грек мифологияһы буйынса Орион исемле һунарсы һынланған. Арҡысаҡты төнгө күктә табыуы ҡыйын түгел. Уны бергә генә, әҙерәк ауышыраҡ рәүештә торған өс аҡһыл-зәңгәр төҫтәге йондоҙҙар аша таныуға була. Улар "Орион билбауы", тип атала. Билбау янында сағыуыраҡ йондоҙҙар урынлашҡан. Шулай уҡ бинокль менән ҡарағанда бында Ориондың Оло томанлығын күрергә була. Арҡысаҡ йондоҙлоғоноң иң сағыу йондоҙо - үтә ҙур ҡыҙыл гигант Бетельгейз. Был күк есеменең исеме ғәрәп телендә (Бәйт әл Джаузза) "Үҙәктең ҡулы", тип тәржемә ителә. Әммә уны яңылыш "Култыҡ аҫты" тип тә атайҙар. Был йондоҙ беҙҙең ҡояштан 600-700 тапҡырға ҙурыраҡ, Ерҙән 650 яҡтылыҡ йылы алыҫлығында урынлаш-ҡан.

Тағы ла башҡортса атамаһы булған күк есеме - Венера планетаһы. Ул беҙгә һәр иртән сағыу йондоҙ рәүешендә күренә. Был пленетаны башҡорттар борондан **Сулпан**, йәки **Зөһрә** йондоҙо, тип атай. Шулай уҡ башҡорттарҙа **Аҡбуҙат**, **Күкбуҙат**, **Зөлфәр**, **Яҡты йондоҙ**, **Әнер йондоҙ** тигән йондоҙ исемдәре лә билдәле.

Борон йондоҙҙарҙың исемдәрен белеү, өйрәнеү һәр кемдең бурысы һаналған. Арҙаҡлы башҡорт ғалимы, мәғрифәтсе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев: "Һәр башҡорт үҙенең ете быуынын, риүәйәт, өләндәрҙе һәм йондоҙҙарҙы белергә тейеш", - тип яҙған үҙенең "Йәдкәр" исемле китабында.

**Азат ЯРМУЛЛИН,
тарихсы.**

*ТӘБИҒӘТ БАЛАҺЫ*

# МИН НИҢӘ ҺУНАРСЫ БУЛМАНЫМ?



**Беҙҙең ауыл Мәләүез йылғаһының һул ярында урынлашҡан. Яр аҫтынан ағып сыҡҡан шишмә һыуын үрҙә телгә алынған йылғаға ҡоя. Шишмә сыҡҡан урынды ҡасандыр бында йәшәгән Сөләймән атлы ауылдашым бурап, таҙартып тотҡан. Беҙ бәләкәй саҡта бөтә ауыл халҡы көйәнтә аҫып, һыуға йөрөй торғайны. Бер ун йыл тирәһе элек Сөләймән уҙамандың ейән-ейәнсәрҙәре олаталары башлангысын ҡеүәтләп, шишмә башын яңынан бурап, һыу алыр өсөн уңайлыҡтар булдырҙы, рәхмәт яуғырҙары!**

...Ял көнө ейәнем килеү менән буш һауыттар тотоп, шул шишмәгә һыуға юлланабыҙ. Килеп етеү менән яр башына ултырып, аҙна буйына йыйылған яңылыҡтарыбыҙ менән уртаҡлашабыҙ, йылғаның уң ярындағы тәбиғәт менән һоҡланабыҙ, алыҫтағы тимер юлынан уҙған поезд вагондарын һанайбыҙ.

Бына беҙ шишмә буйына килеп етеү менән ҡаршы ярҙан бер пар һун (беҙҙең яҡта һуна өйрәкте шулай тиҙәр) өйрәк осоп китте. Күп тә үтмәй, яҡындан ғына яңғыҙ ата өйрәк тә күтәрелде, бейектә бер нисә түңәрәк бирҙе лә теге пар артынан ҡайҙалыр осто. Һуңғыһының яңғыҙ булыуына ейәнем дә иғтибар иткән икән, "Әллә уның парын һунарсылар атып алғанмы?" - тип һораны. "Инәһе йоморткаларын баҫып, себеш сығарып ултыра", - тинем. Һорауҙар бының менән генә бөтмәне, тағы: "Ә һин ҡош атҡаның булдымы?"- тип һорау бирҙе ейәнем.

Һорауға яуап итеп, беҙҙең яҡта ҡыр өйрәктәренең ике төрлө булыуын, беҙ күргәне һун икәнен, уларҙың икенсеһе бәләкәйерәк, ни бары 300-400 грамм ауырлыҡтағыһын сүрәгәй тип атауҙарын, уларҙың һәр береһенә төрлөсә һунар ойоштороллоуын аңлаттым. Шунан өйрәккә һунар итеүҙең ҡайһы бер нескәлектәренә туҡталдым. Яҙғы һунар миҙгелендә тик ата өйрәкте генә атырға рөхсәт ителеүен иҫкә алдым. Ә бының үҙ хикмәте бар - ата өйрәк йоморткалы ояны туҙҙыра, тимәк, нәҫелде дауам итеүгә ҡурҡыныс тыуа.

Миңә был һунар серҙәрен күрше ағай өйрәтте. Уның улдары булмаған, минән һунарсы ла, балыҡсы ла, умартасы ла яһарға, үҙенә ярҙамсы итергә тырышты. Яҙлы-көҙлө ҡыр өйрәктәренә һунарға йөрөттө, ҡышын аҡ ҡарҙа ҡуян баҫтырырға алды. Һунарҙан һуң ҡуҡҡа сөйөлгән бүреккә мылтыҡтан атыуҙар ғына ни тора!

Йәй етеү менән икәүләп ау һалырға йөрөйбөҙ. Мине бер яҡ ярҙа ҡалдыра ла үҙе икенсе яҡ ярға сыға. Мин ҡурғаштан яһалған бауҙағы түңәрәкте ырғытһам, ул тартып ала - ауҙы төнгөлөккә шулайтып һалабыҙ, ә иртән үҙе барып ҡарай, мул ғына эләкһә, тейешле өлөшөн беҙгә индерә. Ағай үҙе менән генә йөрөтөп ҡалманы, һунар, балыҡ тотоу серҙәре менән дә мул уртаҡлашты.

Йәй балыҡҡа йөрөйбөҙ, үҙе көҙгә суртан ҡармаҡлау мәлен маҡтай. Бер-ике көҙ суртанға барырға форсат теймәне. Ниһайәт, бер көҙ ауылға ҡайтыуымды күреп ҡалды ла балыҡҡа алып китте. Уларҙың баҡса башындағы шишмәнән ваҡ сабаҡтарҙы һоҫа менән һоҫоп алдыҡ та күлгә юлландыҡ. Ағайҙың ҡулында дүрт ҡармаҡ сыбығы, килеп етеү менән суртан тотҡанда сабаҡты нисек ҡармаҡҡа эләктерергә өйрәтте. Өс ҡармаҡты ырғытты ла, дүртенсеһен миңә бирҙе, йәнәһе, өйрәнсеккә ошоноһо ла ярай. Мин сабаҡ эләктереп, һыуға ырғыттым, ул шунда уҡ батты, беләк буйы суртан һөйрәп сығарҙым һәм иң ҙур хатамды эшләнем. "Өйрәнсеккә ярай ул!"- тиеүем булды, ағай дүрт ҡармағын да йыйҙы ла, минең һүҙҙәргә лә иғтибар итмәй, ҡайтып китте.

Икенсе көн иртән балыҡҡа теге яҡ күршелә йәшәгән, минән өс йәшкә йәш егетте алып китте, ҡышын ҡуянға һунарға ла уны эйәртте. Ул күршебеҙҙән бик һәйбәт һунарсы ла, балыҡсы ла, умартасы ла сыҡты. Ағай вафат булғансы бергә йөрөнөләр.

...Мин телемдә тыймаған өсөн һунарсы булмағаныма үкенмәйем, ул ваҡытта бик үйланмаһам да, һунынан ҡошҡа һунар итә алмаҫ инем, атырға ҡулым күтәрелмәҫ ине, тип һығымта яһаным. Мостай Кәримдең үлемһеҙ "Үлмәҫбай" поэмаһындағы түбәндәге юлдар: "Һунарсы ҡаны үҙемдә, һунарсы булыр балам." Һәр хәлдә лә минең турала түгел был.

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

*БАҠСА МӘШӘҠӘТТӘРЕ*

**Июнь айында баҡса эштәренең иң ҡыҙған мәле. Үҙегеҙҙең йәшәгән төбәккә хас һауа торошона ҡарап, үсентеләрҙе асыҡ һауаға сығарыу ваҡытын билдәләргә кәрәк. Халыҡта гөлйемеш сәскә атһа, башҡа ҡыраућҙар булмай, тигән фараз-күҙәтеү ҙә йәшәй. Гөлйемеш сәскә атһа, йәй килә, емештәре ҡыҙарһа, көҙ етә.**

# СҮП УТАУ, ҺЫУ ҠОЙОУ

### Ағастарҙы тәрбиәләү



Июндә барлыҡ олонло ағастар емешкә төймәләнә. Тимәк, уларға һыу һәм файҙалы матдәләр кәрәк. Һәр баҡсасы һыуҙы үҙенсә һибә, шулай ҙа һирәк, әммә мул итеп ҡойоу иң дөрөҫө буласаҡ. Көн һайын, әммә ерҙең өҫкө ҡатламын ғына дымлап сығырлыҡ итеп һыу ҡойһағыҙ, тамыр системаһы тәрәнгә китмәй, өҫтә генә ята. Ҡоролоҡ осоронда бындай ағастар ныҡ зыян күрә. Ҡышын да тамырҙар өшөүе ихтимал. Шуға ла һуңғы ваҡытта популяр булып киткән тамсылап һыу һибеүҙе күпселек баҡсасылар хупламай.

Ағастарҙы йәй уртаһына тиклем азотлы ашламалар менән туҡландырырға мөмкин. Тиҙәкте, шулай уҡ тауыҡ тиҙәген һыуға болғатып һибеү тупраҡты азот менән байытасаҡ. Азофоска (нитроаммофоска) кеүек составында азот, фосфор, калий булған ашламалар ҙа ярай. Шулай уҡ макро ғына түгел, микроэлементтар булған комплекслы ашламалар ҡулай. Ошо мәлдә киләһе уңышҡа нигеҙ һалына, ағастарҙа киләһе йыл сәскә атасаҡ сәскә бөрөләре формалаша. Шуның өсөн дә ашламалар һәм дым бик мөһим. Тик азотлы ашламаны күп ҡулланмағыҙ, был ағастарҙың көсөн икенсе юҫыҡҡа йүнәлтәсәк, ул күп итеп япраҡ ярасаҡ, үсентеләр ебәрәсәк. Артыҡ үсентеләр күп икән, шулай уҡ көҙҙә көтмәйенсә уларҙы ҡырҡығыҙ, ул шулай уҡ ағастың көсөн ала.

Июндә ағастарҙы зарарлы бөжәктәр баҫып алыуы ихтимал. Шуға ла көн һайын ағастарҙы ҡарайбыҙ, шул саҡта уларға үрсеп китергә мөмкинлек бирмәскә мөмкин.

### Йәшелсәләрҙе тәрбиәләү

Был ваҡытта йәшелсә баҡсаһында ла эш күп. Ныҡынып килгән үсентеләрҙе сүп үләндәренән таҙартыу мәле етте. Бер утап алһағыҙ, аҙаҡ еңелерәк буласаҡ. Шулай уҡ көн һайын һыу һипкәнсе, аҙнаһына 2 тапҡыр, әммә һеңдергәнсе һыу ҡойоу яҡшы. Ағастар кеүек уларҙың тамыры ла өҫтә генә ятасаҡ һәм матур уңышҡа өлгәшеү ауыр буласаҡ.

### Сәскәләр

Ирис, пиондар сәскә атып туҡтаған та, уларҙы ашлама менән туҡландырырға кәрәк. Ә раузалар әле саҡ сәскәгә бөрөләнгән, улар матур, сағыу итеп сәскә атһын өсөн минераль комплекс менән туҡландырығыҙ.

Ләләләр сәскә атып бөттө, тик уларҙы ҡаҙып алырға ашыҡмағыҙ. Орлоҡҡа төймәләнеп ултырғандарын өҙөп ташлағыҙ. Ләлә һабаҡтары һарғайып бөткәс кенә һуғандарын ҡаҙып алырға була. Уларҙы көҙгә тиклем елләп торған урында, 22-23 градус йылылыҡта һаҡлайбыҙ. Ҡаҙып алмаһағыҙ, ләлә ныҡ тәрәнгә китә, киләһе йылы уны таба алмауығыҙ ҙа ихтимал. Икенсенән, ул вағая, матурлығы кәмей.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

### Уйланыу ваҡыты

Кешеләр хайуандарҙан нимә менән айырыла, беләһегеҙме? Эйе, уйлай белеү менән! Әммә һеҙ уйланыу өсөн аҙнаһына нисә сәғәт бүләһегеҙ? Тығыҙ эш графигында тормошоғоҙ тағы ла байыраҡ булһын өсөн ғәмәлдәрегеҙҙең һөҙөмтәлелеген нисек арттырыу тураһында елкә тырнап, мейегеҙҙе ҡыбырлатып уйланырға ваҡыт табаһығыҙмы? Тапмаһағыҙ, уны һеҙҙең өсөн кем эшләргә тейеш? Әгәр тормош, уны үҙгәртеү тураһында уйланырға тамсы ла ваҡытығыҙ юҡ икән, хайуандарҙан нимә менән айырылаһығыҙ?

Һеҙгә эш ваҡытын 30 сәғәткә тиклем ҡыҫҡартырға һәм һәр аҙна бер ял көнөн уйланыу өсөн файҙаланырға кәрәк. Был көндө эштә үткәрергә ярамай.

"Был мөмкин түгел, былай ҙа барлыҡ эшемде башҡарып өлгөрмәйем", - тиерһегеҙ. Тап ошо өлгөрмәгәнгә лә, шул уҡ эште нисек тиҙерәк башҡарып сығыу тураһында уйланыр өсөн ваҡыт кәрәк тә инде.

Һеҙҙән яҡшыраҡ йәшәгәндәр аҙнаһына 90 сәғәт эшләй, 10 йәки 100 тапҡыр күберәк аҡса алғандар 10-100 тапҡыр күберәк эшләй тип уйлайһығыҙмы? Әлбиттә, юҡ!

Тормошта кем барыһынан да әҙерәк эшләй - күберәк аҡса ала. Уның ҡарауы, улар эштәренең һөҙөмтәлелеген арттырыуға ярҙам иткән система йәки ысул булдырып, уртаса статистик кешегә ҡарағанда ҡыҙыҡлыраҡ тормош менән йәшәү мөмкинлегенә ваҡытын йәлләмәй.

### Уңыштың фәнни принциптары

Йыһан математика ҡанундары буйынса йәшәй. Быны планеталарҙың хәрәкәтенең аныҡлығы, йыл миҙгелдәренең алмашыныуы, барлыҡ тереклектең симбиозы ла раҫлай һәм быны алдан күҙаллап була.

Һеҙ үҙегеҙ һораған тормош менән йәшәйһегеҙ, сөнки башҡаса булыуы мөмкин түгел. Йәшәйешегеҙ - уйҙарығыҙҙың сағылышы ул. Быны аңлатыу өсөн фәнни раҫлау талап итәһегеҙме? Улайһа, уйҙарығыҙ тормошоғоҙҙо барлыҡҡа килтерә тигән кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилгә иғтибар итергә кәрәк. Моғайын, иң скептик ҡарашлы физиктарҙан да, уларҙың шәхси үткәргән тәжрибәләре һөҙөмтәһендә, материя - саф энергия, ә энергия - ул аң, тигән һығымтаһын ишеткәнегеҙ барҙыр. Әгәр уй анда тыуып, артабан энергияға әйләнә, энергия есем тыуҙыра икән, тимәк, уйҙар тап фәнни процесс барышында матдиләшә! Тимәк, тормошоғоҙҙо үҙгәрткегеҙ килһә, уйҙарығыҙҙы үҙгәртегеҙ! Ҡасандыр кешелектең аҫыл аҡыл эйәләре Ғайса, Будда, Мөхәммәт, Эйнштейн йәки Гейзенберг тәҡдим иткән рецепт бер: һорағыҙ һәм алырһығыҙ.

Һеҙҙе нисек алыуығыҙ ҡыҙыҡһындыра, шулай бит? Әммә беҙҙең интеллект быны аңлар кимәлдә түгел. Был мөһим дә түгел. Быны аңлатыр өсөн миллиардлаған үҙгәреүсән сәбәпте иҫәпкә алырға кәрәк, ә беҙгә ике-өс үҙгәреүсән менән эш итеүе лә ауыр. Беҙ "нисек"те түгел, ә "ни өсөн" һәм "нимә"не аңларға тейеш.

Ҡырағай хайуандар нимә ашайым икән тип баш ватмай, ә юлда осраған һәр мөмкинлекте файҙалана һәм тәғәмләнә. Киләсәкте ентекле әҙерләү уны беҙҙән бары тик ныҡыраҡ алыҫайта һәм уға барып етеү процесын ҡатмарлаштыра. Изге китапта ла бит ҡоштар тураһында: "...улар сәсмәй ҙә, урмай ҙа, һаҡламай ҙа, уларҙы Аллаһы Тәғәлә туҡландыра", - тиелә. Ә беҙ аҡса, ризыҡ, кейем һәм башҡа бик күп нәмә етмәҫ тип ҡурҡабыҙ һәм үҙебеҙгә үҙебеҙ проблема тыуҙырабыҙ. Хәл-торош ниндәй генә булмаһын, һыуыҡтыста һәр саҡ аҡ май табыласаҡ. Шул майға эйә булыу байлыҡҡа, өйгә, ҡиммәтле автомобилгә эйә булыуға ҡарағанда еңелерәкме? Юҡ, еңел түгел, әммә был икенсе кимәл.

Һеҙ күберәк аҡса эшләү бер кисәк май хаҡын эшләүгә ҡарағанда күпкә ауыр тип уйлаһағыҙ, аҡсаны ныҡ ауырлыҡ менән табасаҡһығыҙ. Ҙур йәки аҙ аҡса эшләү араһында айырма юҡ, айырма бары тик ундағы нулдәрҙең һанында ғына.

**Пьер МОРАСИ.**



**5 ИЮНЯ
ПОНЕДЕЛЬНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 11.30, 12.05, 1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.15, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 18.05, 23.00 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Т/с Премьера. "Трейдер". [16+]
0.35 Премьера. "На футболе с Денисом Казанским". [18+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.05 Вести. Местное время.
21.20, 22.20 Т/с "Паромщица. Долина мечты". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Московская борзая-2". [16+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Спортивная история. [12+]**
**12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 "Это моя профессия". [12+]**
**16.45 Специальный репортаж. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 "Крылья". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.30 "Бай". [12+]**
**21.00 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Донбасс. Война. Лето-2014". [18+]**
**0.00 Х/ф "Этика долга". [16+]**
**2.00 "Море мечты". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**

**6 ИЮНЯ
ВТОРНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 23.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Т/с Премьера. "Трейдер". [16+]
0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Паромщица. Долина мечты". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Московская борзая-2". [16+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45, 23.45 "Курай даны". [12+]**
**11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 3.30 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.00 "Автограф". [12+]**
**17.30 "Крылья". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.30 Елкән. [6+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**0.00 Х/ф "Между смертью и жизнью". [16+]**
**1.30 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

**7 ИЮНЯ
СРЕДА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 23.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Т/с Премьера. "Трейдер". [16+]
0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Паромщица. Долина мечты". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Московская борзая-2". [16+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Әлләсе... [6+]**
**10.45, 23.45 "Курай даны". [12+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.30 Новости спорта (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 3.30 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 МузКәрәҙ. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]**
**16.45 История одного села. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 "Крылья". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.30 Тормош. [12+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Автограф". [12+]**
**0.00 Х/ф "Керосин". [16+]**
**1.30 Спектакль "Ой, кто там лежит?". [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

**8 ИЮНЯ
ЧЕТВЕРГ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 23.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Д/ф "Специальный репортаж". [16+]
0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Паромщица. Долина мечты". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Московская борзая-2". [16+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Сулпылар. [0+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Этно-краса. [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Специальный репортаж. [12+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.30 "Крылья". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.30 Башкорттар. [6+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Простой карандаш". [16+]**
**1.45 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

**9 ИЮНЯ
ПЯТНИЦА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Д/ф Премьера. "Прими "Вызов" - почувствуй силу!" [12+]
0.05 Д/ф "Дэниел Дэй-Льюис. Наследник". [18+]
1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.40, 4.15, 4.50, 5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Удивительные люди. Новый сезон. [12+]
23.55 Истории Большой Страны. [12+]
0.55 Х/ф "Иллюзия счастья". [12+]
4.10 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**9.15 Үткән гүмер. [12+]**
**9.45 "Йома". [0+]**
**10.15 Хазина. [0+]**
**10.45 Счастливый час.**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Наши годы. [12+]**
**12.45 Этно-краса. [6+]**
**13.00, 17.00 Территория женского счастья. [12+]**
**14.00, 14.30, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз).**
**14.15 "Курай даны". [12+]**
**15.00 "АйТекә!" [6+]**
**15.15 "КультУра". [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Бәхетнамә. [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.30 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**21.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.00, 6.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Время женщин". [16+]**
**2.00 Спектакль "Похищение девушки". [12+]**
**4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.30 Тормош. [12+]**

**10 ИЮНЯ
СУББОТА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Все звезды русского космоса". [12+]
11.15 Д/ф "До небес и выше". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Х/ф "Высота". [0+]
14.00 Х/ф "Верные друзья". [0+]
16.00 Х/ф "Женщины". [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
19.20, 21.35 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
22.30 Д/ф Премьера. "Эннио. Маэстро". Документальный фильм о легендарном композиторе. [12+]
1.20, 2.00, 2.40, 3.15, 3.50, 4.25, 5.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.45 Т/с "Ликвидация". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Невидимая нить". [12+]
0.35 Х/ф "Тропинка вдоль реки". [12+]
4.05 Х/ф "Невеста моего жениха". [12+]
5.53 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 Башкирские каникулы. [12+]**
**9.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Этно-краса. [6+]**
**11.00 Лит-ра. [6+]**
**11.30 МузКәрәҙ. [0+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Все песни о прекрасном... [12+]**
**19.00 Территория женского счастья. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Короткие волны". [16+]**
**2.15 Спектакль "Сваха". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Мистический Башкортостан. [12+]**

**11 ИЮНЯ
ВОСКРЕСЕНЬЕ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.45, 1.25, 2.05, 2.45, 3.20, 3.55, 4.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Правительство США против Рудольфа Абеля". Легенды разведки. [12+]
14.20 Х/ф "Мертвый сезон". [12+]
17.00 Д/ф "Специальный репортаж". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 Премьера. "Эээх, Разгуляй!" [16+]
21.00 "Время".
21.30 Х/ф "Одиннадцать молчаливых мужчин". [12+]
23.45 Д/ф Премьера. "Ловцы солнца". [12+]
5.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.55, 3.10 Х/ф "Продается кошка". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.40 Большие перемены.
12.45 Т/с "Ликвидация". [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Берега любви". [12+]
5.03 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [12+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Курай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 "Дорога к храму". [0+]**
**15.30, 4.15, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**16.00 "Честно говоря". [12+]**
**16.45 "Непокоренный дух". Концерт, посвященный дню рождения Салавата Юлаева. [12+]**
**18.45 Полезные новости. [12+]**
**19.00 Әлләсе... [6+]**
**19.45 Патриот РФ. [12+]**
**20.00, 21.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 4.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Добровидение-2021. [12+]**
**0.15 Х/ф "Живи своей жизнью". [16+]**
**2.00 Спектакль "Последние". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 5 ИЮНЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ ТИРӘ-ЯҠ МӨХИТ КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**19-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡором. Һарауыс. Мәкер. Алмас. Сауҙа. Айыл. Ра. Нәсихәт. Ҡамҡа. Ҡәҙер. Ғәбит. Ошо. Дарыу. Шәре. Ай. Дауыл. Ирвин. Виза. Тәҙрә. Ләм. Рубрика. Вәкәләт.

**Вертикаль буйынса:** Нурғәлин. Алсынбаев. Хаят. Ант. Һаба. Әмиров. Сатҡы. Ҡорам. Оскар. Әҙернә. Килдеғошов. Йкмәк. Мысыр. Акт. Саҡ. Дедал. Алка. Ҡаҙы. Ата. Уҡлау.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Июнь (Зөлкағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 5 (16) дүшәмбе | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 19:02 | 21:44 | 23:14 |
| 6 (17) шишәмбе | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 19:03 | 21:45 | 23:15 |
| 7 (18) шаршамбы | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 19:03 | 21:46 | 23:16 |
| 8 (19) кесе йома | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 19:03 | 21:47 | 23:17 |
| 9 (20) йома | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 19:03 | 21:47 | 23:17 |
| 10 (21) шәмбе | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 19:04 | 21:48 | 23:18 |
| 11 (22) йәкшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 19:04 | 21:49 | 23:19 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!*

## АҠСАНДЫ ТИКШЕР

**Телефон камераһы ярҙамында аҡса өлгөһөнөң сыҡҡан йылын һәм модификацияһын билдәләргә мөмкин булыуын белә инегеҙме?**

"Рәсәй банкыһы банкноталары" мобиль ҡушымтаһында Рәсәй банкыһының әйләнештәге бөтә аҡсалары һәм уларҙың һаҡлау билдәләре тураһында мәғлүмәт бар. Видеороликтарҙа ысынбарлыҡтағы тегә йәки был билдәнең нисек сағылыш табыуын йәки телефон экранын ҡулығыҙҙа аҡсаның төп нөсхәһен тотҡан кеүек бороп ҡарарға мөмкин. Ҡушымтаны түбәндәге һылтанма буйынса күсереп алырға була: https://cbr.ru/cash_circulation/mobilnoe-prilozhenie.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда ялған аҡсалар 4 тапҡырға тиерлек кәмегән. Башҡортостан Республикаһы буйынса Милли банк белгестәренең кибер-мутлашыусыларға ҡағылышлы иҫкәртмәһе менән гәзиттең 19-сы һанында таныштырғайныҡ инде.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 июнь "Серле көршәк"** (З. Биишева, Д. Кәримова инсц.), хикәйәт. 11.00 6+

**8 июнь "Осҡон осто, янғын сыкты"** (А. Ишбулдина), әкиәт. 11.00 6+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 июнь "Синяя птица"** (М. Метерлинк), раштыуа әкиәте. 10.00 6+

**6 июнь "Удивительное путешествие кролика Эдварда"** (К. ДеКамилло), әкиәт. 10.30 6+

**7 июнь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 10.30 0+

**9 июнь "Пеппи ДлинныйЧулок"** (А. Линдгрен), әкиәт. 10.00 0+

**10 июнь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00 6+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**8 июнь "Там, где праздники живут"** музыкаль-әҙәби лекторий. 11.45 6+

**"Урта быуат легендалары"** концерт. 6+

**9 июнь "Сказка о Спящей царевне и семи богатырях"** (А.С. Пушкин), мюзикл. 11.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**5 июнь "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен), әкиәт. 11.00 0+

**6 июнь "Хәүефһеҙ каникулдар"** (Л. Ниғмәтуллина), лекторий. 11.00 0+

**7 июнь "Диңгеҙ. Утрау. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар тарихы. 11.00 0+

**8 июнь "Волшебная лампа Аладдина"** (Л.Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 11.00 0+

**9 июнь "Три поросенка"** (З. Сөләймәнов инсц.), әкиәт. 11.00 0+

**10 июнь "Сказка о рыбаке и рыбке"** (А. Пушкин, Л. Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 13.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**5, 6, 10 июнь "Таңбатыр"** (М. Ғиләжев), әкиәт. 11.00 0+

**"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Буләков), лирик комедияһы менән Ишембай районында гастролдәр:

**6 июнь** - Үрге Эткол,

**7 июнь** - Көҙән,

**8 июнь** - Түбәнге Әрмет,

**9 июнь** - Маҡар,

**10 июнь** - Әхмәр ауылдарында. 20.00, 21.00 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**11 июнь** Миәкә районы Илсеғол ауылында **"Корос. Яугир ат яҙмышы"** (М. Ҡунафин), драма. 11.00 12+

### БР Милли музейы

**6 июнь "Таш быуат балалары"** оҫталыҡ дәресе. 12.00 6+

**8 июнь "Башҡортостанда юғары белем үҫеше"** күргәҙмәһе асыла. 12.00 6+

АФАРИН!

# ҺАУМЫ, ҺАУМЫ, ӘКИӘТ!



(Башы 1-се биттә).

"Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсында быйыл Өфөнөң 7 районынан 90 бала ҡатнашыуға 36 ғариза килгән. Шулар араһынан 16 бала әкиәтте яңғыҙ башҡарыусылар араһында сығыш яһаған, 8 ғаилә, 9 йәш әкиәт ижад итеүсе булған һәм ҡалғандары фольклор коллективтары менән ҡатнашҡан. Конкурсанттар, йылдағыса, төрлө халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадына мөрәжәғәт иткән һәм башҡорт, урыҫ, корея, әрмән, татар, украин, норвег әкиәттәрен яңғыратҡан. Уларҙың телмәр оҫталығын, әртислек һәләтен һәм тағы ла бик күп ыңғай сифаттарын абруйлы баһалама ағзалары билдәләп, М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында үткәрелгән йомғаҡлау тантанаһына бөртөкләп һайлап алған. Был эш бик еңелдән булмағандыр, сөнки баш ҡала мәғариф учреждениелары тәрбиәләнеүселәренең йыл да сараға етди әҙерләнеүен, һәр яҡлап камиллыҡҡа ынтылыуҙарын беҙ күптән беләбеҙ. Шулай ҙа, ярыш булғас, еңеүселәре табылырға тейеш.

Юғары баһаға лайыҡ булыусылар араһында һәр номинацияла бер үк мәғариф учреждениеһы вәкилдәре алдынғылыҡты бирмәүе күҙгә ташланды, тимәк, бында конкурсҡа ҡарата ғына түгел, туған телгә лә мөнәсәбәт етди. Шундай һоҡландырғандарҙың береһе Өфөнөң М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы булды. Был белем усағынан яңғыҙ башҡарыусылар араһында 3-сө класс уҡыусыһы Рамаҙан Ғүмәров, ғаилә менән сәхнәләштереүселәрҙән Торсонбаевтар бер кемгә алдынғылыҡты бирмәне - Гран-при яуланылар. Ә лицейҙың фольклор коллективы беренсе урынға лайыҡ булды. "Әкиәт һөйләгән саҡта ҡул сабып тыңлауҙары бик оҡшай, бүләктәр ҙә алырға яратам, шуға бик тырышып әҙерләнәм был конкурсҡа. Йыл да ҡатнашам һәм бик күп әкиәттәр беләм. Уларҙы миңә өйҙә әсәйем, лицейҙа Сиражетдинова Венера Муллабай ҡыҙы менән Әбдрәхимова Рәмилә Әкрәм ҡыҙы өйрәтә. Быйыл "Тыңлауһыҙ ҡуян балаһы" башҡорт халыҡ әкиәтен һөйләнем. Әкиәттәрҙән тыш математика дәрестәрен, футбол һәм баскетбол уйындарын яратам", - ти ун йәшлек Рамаҙан.

Ә бына ғаилә менән әкиәт һөйләүсе әсәле-уллы Торсонбаевтар "Һигеҙ бүрек тегеүсе оҫта" тигән бик фәһемле әрмән халыҡ әкиәтен сәхнәләштергән. Унда бер төлкө тиреһенән һигеҙ бүрек тектерергә уйлаған ҡомһоҙҙоң төп башына ултырыуы тураһында һүҙ бара. "Әкиәт ҡомһоҙлоҡ, һаранлыҡтан көлә һәм сюжеты ла артыҡ ҡатмарлы түгел, ике кешелек булыуы менән йәлеп итте беҙҙе. Әрмән халҡыныҡы булһа ла, беҙ уны сәхнәләштергәндә башҡорт милли кейемдәре кейҙек, башҡорт бейеүен ҡушып ебәрҙек. "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсы - ул балаларға туған телебеҙҙе өйрәтеүҙә, ҡала мөхитендә башҡорт рухлы итеп тәрбиәләүҙә эшебеҙҙе еңеләйләштергән бик әһәмиәтле бер сара. Балалар менән күберәк шөғөлләнергә этәргес бирә, шуға күңел һалып башҡарам был эште. Быйыл Ильяс улым менән икәү сығыш яһаһаҡ, 5 йәшлек ҡыҙым да яңғыҙ башҡарыусылар араһында үҙ көсөн һынап ҡараны, тик ҡала кимәленә үтмәне. Тағы бер ҡыҙыбыҙ бар, уға әле ни бары ике йәш. Тормош иптәшем Динар менән балаларҙың теле башҡортса асылырға тейеш, тигән инаныстабыҙ һәм был йәһәттән көсөбөҙҙән килгән барыһын да эшләйбеҙ. Күп итеп шиғырҙар ятлатам, ауылға ҡайтҡандарында башҡортса ғына һөйләшегеҙ тигән талабыбыҙ бар, форсат сыҡҡанда театр-концерттарға алып йөрөйбөҙ һәм иң мөһиме, башҡорт балалар баҡсаһы һәм лицейында тәрбиәләнәләр, уҡыйҙар", - тине Миләүшә Торсонбаева.

Әйткәндәй, Торсонбаевтарҙың балалары тәрбиәләнгән 308-се Башҡорт балалар баҡсаһы ла быйыл ҡала конкурсында үҙҙәрен яҡшы күрһәтте. Уларҙың фольклор коллективы "Унға тиклем һанай белгән кәзә бәрәсе" норвег халыҡ әкиәтен сәхнәләштереп, Гран-при яуланы. Төрлө йорт хайуандары булып кейенгән кескәйҙәрҙең тупырҙашып сәхнәгә килеп сығыу күренеше генә түгел, уларҙың әртислектәре, телмәр оҫталыҡтары ла хайран итте тамашасыларҙы. Өлкәндәр генә түгел, хатта үҙҙәренең тиҫтерҙәре лә мауығып ҡараны был сәхнәләштереүҙе. Гәзитебеҙҙең үткән һанында баҫылған балалар ҡоронда ҡатнашыусы ҡыҙҙар ҙа бар ине улар араһында һәм Айлина Ҡарағолова менән тағы берҙе һөйләшеү форсаты тейҙе: "Байрам бик оҡшаны, төрлө-төрлө әкиәттәр һөйләнеләр. Мин дә бик күп әкиәттәр беләм, уларҙы миңә әсәйем һәм өләсәйем һөйләй, балалар баҡсаһында ла өйрәтәләр. Беҙҙең әкиәт унға тиклем һанай белеүсе кәзә бәрәсе тураһында ине, мин үҙем дә һанай беләм", - тине Айлина һәм мәктәпкә барыуын түҙемһеҙлек менән көтөүен әйтте.

Гран-приға шулай уҡ белем усаҡтары араһында Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһының фольклор коллективы "Үгәй ҡыҙ Гөлбикә" әкиәте, ә "Аҡбуҙат" 75-се Башҡорт балалар баҡсаһынан Көмөшбаевтар ғаиләһе "Бүре менән кәзә" әкиәте өсөн лайыҡ булды. Шулай уҡ балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре араһында әкиәтте яңғыҙ һөйләүселәр араһында Гран-при яулаусы Йәсминә Лоҡманова ла "Аҡбуҙат"тан. Ҡыҙыҡай ике йәшенән алып "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсында ҡатнаша, Гран-приға 2020 йылда лайыҡ булғаны бар. Ә быйыл ул "Саҡ менән Суҡ бәйете" башҡорт халыҡ әкиәтен бәйән итте. Йәсминә әкиәтте тасуири һөйләп кенә ҡалманы, сығышы барышында дөңгәр ҙә һуғып алды, ҡумыҙҙа ла сиртеп күрһәтте, "Саҡ менән Суҡ" йырын да көйләп ишеттерҙе. Талантлы ҡыҙҙы конкурсҡа "Аҡбуҙат" 75-се Башҡорт балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәре Илүзә Хазиәхмәтова менән Венера Амантаева, ата-әсәһе әҙерләгән. "Ҡыҙыбыҙға алты йәш. Уны бәләкәйҙән кеше алдында үҙен тота белһен, телмәре шымарһын, һәләттәре үсешһен тип төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнаштырырға тырышабыҙ. "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр каналын ҡарап, атаһын телевизорҙан күреп үҫкәс, үҙе лә бәләкәйҙән микрофон тотоп, видеоға төшөргә әүәҫ булды. Хатта уйындары ла шуға ҡоролған", - ти йәш әртистең әсәһе Алита Лоҡманова.

"Һаумы, һаумы, әкиәт!" донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡортса һөйләүселәрҙең ҡала конкурсында шулай уҡ беренсе, икенсе һәм өсөнсө урындар яулаусы, "Нәфис һүҙ оҫтаһы", "Ижади ҡараш", Рухи мираҫты һаҡлаусылар", "Әкиәт - халыҡ аҡылы хазинаһы" номинацияларында еңеүселәр ҙә билдәләнде. Бына бер нисә йыл рәттән үткәрелеп килгән үҙҙәре әкиәт ижад итеүсе балалар араһындағы "Йәш әкиәтсе" номинацияһында I урынды "Аҡбуҙат" 75-се Башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Хәсән Йосопов менән 3-сө гимназия уҡыусыһы Алисхан Нафиҡов бүлеште. Балаларҙы БР мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева, министрлыҡтың Милли мәғариф идаралығы етәксеһе Илдус Ҡаһарманов, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Юлдаш Йосопов, Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева тәбрикләне.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсының сираттағы йомғаҡлау тантанаһы бына шулай йылдағыса шау-гөр килеп, балаларҙың шатлыҡлы тауыштарына, өлкәндәрҙең һоҡланыулы ҡараштарына һәм ихлас ҡул сабыштарына күмелеп үтеп тә китте. Киләһе йыл ярыш үҙенең 15 йыллығын билдәләйәсәк һәм унда ҡатнашыусылар һаны тағы ла күберәк, уларҙың әҙерлектәре тағы ла юғарыраҡ булырына иманыбыҙ камил. Сөнки баш ҡалабыҙҙа йәшәгән йәш ғаиләләр балаларға туған телен, мәҙәниәтен, халҡының ауыҙ-тел ижадын өйрәтеп, рухи тәрбиә биреп үҫтереүҙең мөһимлеген яҡшы аңлай, ә милли мәғариф учреждениеларыбыҙ, һанаулы ғына булыуҙарына ҡарамаҫтан, үҙ иңдәренә алған бурысты намыҫ менән үтәй. Уларҙың уртаҡ көс һалып башҡарған эше республикабыҙҙың алдынғы ҡарашлы, башҡорт рухлы граждандарын формалаштыра, был бөгөндән үк күренә.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ҠОРО ТЕЛ - ҡуңалтаҡ итек

Үҙ телем - үҙ ҡылысым, атайҙан ҡалған ҡоросом, илдә-төндә тынысым.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Осрашыуға ваҡытында килгәндә, эргәлә быны күргән бер кеше лә булмауы ҡалай ҡыҙғаныс!

**(Франклин Джонс).**

Шаңдау менән һүҙ көрәштермә: һуңғы һүҙ барыбер уныҡы буласаҡ.

**(Рамон Гомес).**

Белемле кеше - ул оҡшашлыҡтар таба белгән кеше. Ахмаҡтар өсөн һәр нәмә - өр-яңы.

**(Зигмунд Графф).**

Бөтә нәмәгә лә эйә булыу мөмкин түгел. Шуға ла мин иң әҙенән - аҡсанан башлаясаҡмын.

**(Януш Васильковский).**

Ҡартлыҡтың аҙығы - аҡыл, шуның өсөн йәшлегеңдә ҡартлыҡта аҙыҡһыҙ ҡалмаҫыңды хәстәрлә.

**(Леонардо да Винчи).**

...Иң аҡыллыһы ошондай ауыл хужалығы алымы булыр: яҡшы климат булдырығыҙ, тейешле ашлама менән тәьмин итегеҙ һәм кешеләргә үҙҙәренсә үҫтерергә мөмкинлек бирегеҙ. Бына шул саҡта улар һеҙҙе аптыратасаҡ.

**(Макгрегор)**

Кеше яңғыҙы ғына яңылышмай. Яңылышып, ул үҙ хатаһын тирә-яҡтағыларға тарата.

**(Сенека).**

Беҙҙең тормошобоҙҙағы күңелһеҙлектәрҙең яртыһы "Юҡ" тигән һүҙҙе тиҙ генә әйтмәй, "Эйе" тигәнен тиҙ генә әйтеү менән бәйле.

**(Бернард Шоу).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ғәли тигән кешенең бик һаран бер танышы була. Бер саҡ Ғәли танышының йортона инеп сығырға була, ләкин йорт хужаһының бик ҡаты ауырып ятыуын әйтәләр. Түшәге эргәһендә табип ултыра һәм ауырыуҙың яҡындарына дауалау тураһында кәңәштәр бирә. "Бәлки мин берәй нисек ярҙам итермен?" - тип һорай Ғәли табиптан. "Сирлегә бик яҡшы итеп тирләргә кәрәк. Тирләтә торған үләндәр эсһә, сире юҡҡа сығасаҡ..." - ти табип. "Һеҙ үләндәр таптырып, ауырыуҙың яҡындарын борсомағыҙ. Хәҙер мин уларҙың келәтенә барып, унда йәшереп ҡуйылған барлыҡ тәмле-томло ашамлыҡтарҙы бында алып киләм дә, ауырыуҙың күҙ алдында ултырып ашайым. Тик һеҙ пациентығыҙҙы тотоп тороғоҙ. Ярты сәғәт тә үтмәҫ, ул тирләп түшәсәк һәм сире лә ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сығасаҡ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
2 июнь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3267
Заказ - 724

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.